ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5-11 ноябрь (ҡырпағай) 2022

№44 (1034)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

## Аҡылығыҙҙы ойотмағыҙ!



2-3

## Республика Башлығы...

халыҡтың һорауҙарына яуап бирҙе



4-5

## Ноғман атлы мәғрур ҡарағай



11

## Фестивалдән...



15

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Иғтибар! "Киске Өфө" гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн дә ПР905 индекслы баҫмабыҙға яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Хаҡы - 798 һум 60 тин.***
***Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ.***
***Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 20 ЙЫЛ




УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# РУХТЫ БАЙЫТА...

## аңын уята

**"Киске Өфө"нө мин беренсе һандарынан уҡ уҡып барам, уҡымай ҡалдырған бер генә һаны ла юҡ. Ҡасандыр "Киске Өфө"лә үҙем дә "Топонимика серҙәре" рубрикаһын алып барғайным инде, гәзит миңә топонимикаға иғтибарлы булыуы менән дә бик яҡын.**

Быныһы, ярай, минең өсөн генә. Ә ғөмүмән алғанда, "Киске Өфө" - халҡыбыҙҙың рухын тәрбиәләй торған матбуғат. Уның аша бик күп яңылыҡтарҙы белеп барам. Әле яңыраҡ Искәндәр Шакиров тигән бер белгестең башҡорт телен яһалма интеллектҡа индереү буйынса шундай ҙур эш менән шөғөлләнгәнен белдем, бының бик кәрәкле, әһәмиәтле эш икәнен аңланым. Уның бер фекере минең иҫтә ныҡ уйылып ҡалды: "башҡорт теле, юғары мәҙәниәт йәки классик музыка кеүек үк, элитар телдер, тип тә уйлайым, үҙебеҙҙең ниндәй хазинаға хужа булыуыбыҙға бик шатланып йәшәйем", - ти ул. Мин дә бит шул тойғо менән йәшәйем. Башҡорт теле, ысынлап та, элита теле кеүек. Ул кешенең, һәр хәлдә, минең, һаулыҡҡа ла ыңғай йоғонто яһай торған тел. Шуның өсөн берәй урынға барып ял итергә мөмкинлек булһа, башҡортса һөйләшкән ергә барырға тырыша торғайным. Гәзитебеҙ беҙҙең күңелебеҙгә яҡын туған тел, рухиәт, халыҡ яҙмышы темаһына һәр ваҡыт ошондай мәҡәләләр биреп бара.

"Заман башҡорто" тигән рубрикала сыҡҡан материалдарҙы яратып, айырыуса иғтибар менән уҡыйым. Беҙҙең заман егеттәренең, ҡыҙҙарының шундай әҙерлекле, ҙур эштәргә һәләтле булыуына шатланам, һоҡланам. Ә беҙҙең киләсәгебеҙ - беҙҙең йәштәребеҙҙә, "ысын заман башҡорто" тип әйтерлек милләттәштәребеҙҙә.

Эйе, "Киске Өфө" минең даими уҡый торған гәзитемә әүерелгән. Уҡый-уҡый, ҡайһы саҡ ғәжәпләнеп тә ҡуям: нисек итеп үҙенә генә хас юлын, стилен тапҡан ул? Төп йүнәлеше яғынан да бик үҙенсәлекле бит ул. Бер һүҙ менән әйткәндә, "Киске Өфө" - бик аҡыллы гәзит. Ул халҡыбыҙҙың аңын уята, рухын байыта, тәрбиәләй, уйландыра , фәһем бирә - шул яғы менән бик тә әһәмиәтле, заманса баҫма ул. "Киске Өфө" милләттәштәребеҙ араһында тағы ла киңерәк таралыу алһын, тағы ла уҡымлыраҡ булһын, тигән теләктәмен.

**Рәшит ШӘКҮР, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.**

АФАРИН!



# ЭПОС ҺЫНЛЫ ЭПОСТЫ...

## яттан һөйләй балалар

**Ошо көндәрҙә "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәрҙең сираттағы республика конкурсында еңеү яулаусы уҡыусыларҙы тәбрикләү тантанаһы уҙғарылды. Егерме дүртенсе тапҡыр үткәрелгән ярыш дистанция тәртибендә ойошторолған, унда 25 районлан һәм 5 ҡаланан барлығы 136 уҡыусы ҡатнашҡан. Шулар араһынан баһалама ағзаларының юғары баһаһына лайыҡ булған еңеүселәр баш ҡалаға саҡырылғайны.**

(Дауамы 16-сы биттә).

12+

*МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ*

**Республикабыҙҙа 80-90-сы йылдарҙа аҡ ҡағыҙҙа нәшер ителгән гәзит-журналдар өлөшөнә ҡалай бәхетле яҙмыш яҙған! Үҙем шаһит ул осорҙағы ҡағыҙ баҫмаларҙың бигерәк тә ауылдарҙағы һәр йортта ҡунаҡлауына, кешеләрҙең йығылып ятып китап-журнал-гәзит биттәрендәге сихри мәғлүмәт донъяһын гиҙеүенә һәм, әлбиттә, редакциялар хеҙмәткәрҙәренең үҙе һайлаған журналислыҡ эшмәкәрлеген бар фиҙаҡәрлеген, тырышлығын, ижади ҡомарын һалып ғәмәлгә ашырыу ваҡиғаларына...**

# АҠЫЛЫҒЫҘҘЫ ОЙОТМАҒЫҘ!

Юҡ, әле улай түгел. Хәл бөтөнләй башҡаса. Бөгөн аҡ ҡағыҙҙа нәшер ителгән гәзит-журналдар яҙмышы бик аяныс хәлдә: уларҙы уҡымайҙар. Йөкмәткеһе менән үткән замандағы баҫмаларға ҡарағанда байтаҡҡа юғарыраҡ, сифатлыраҡ булһа ла, кешеләр уларға түгел, ә социаль селтәрҙәрҙәге имеш-мимеш, сүп-сарға мөкиббән киткән. Сөнки, тураһын әйтергә кәрәк, йәмғиәттә аҡыллы, кәңәшле, хәҡиҡәти һүҙгә ихтыяж кәмей бара. Кешеләрҙең аң, рух кимәле һайығайыуы, асылыбыҙ асылына ҡыҙыҡһыныу һүрелеүе, уйҙарҙы, ниәттәрҙе беҙгә хас булмаған ҡиммәттәр яулай барыуы тураһында һөйләй был...

Баш ҡаланың башҡорт телендәге "Киске Өфө" гәзитенең 20 йыллығы тураһындағы һүҙемде күңелһеҙ хәбәрҙән башланым. Сөнки бөгөнгө ысынбарлыҡ ошондай күңелһеҙ һығымталар яһата. Ә бит алыҫ булмаған үткәндәрҙә улай түгел ине. 80-90-сы йылдарҙа "Башҡортостан" гәзитенең бер ваҡытта ла булмағанса йөҙ меңдән ашыу тираж йыйыуы, республикаға үҙаллылыҡ яулаған мәлдә барлыҡҡа килгән "Йәшлек"тең шулай уҡ ҙур тираж менән таралыуы милләттәштәрҙең гәзит һүҙенә сарсауына бер дәлил ине. Былай сарсауҙы ҡандырыуға ихтыяж "Киске Өфө"нө ойоштороу мәлендә лә күҙәтелә ине әле. Шуға ла Башҡортостан Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы баш мөхәррирҙәр менән үткәрелгән ултырыштарҙа бер тапҡыр ғына күтәрмәй был "Ҡасан Өфө ҡалаһының үҙенең башҡорт телендәге гәзитен булдыраһығыҙ?" тигән һорауҙы. Башҡа мөхәррирҙәрҙән тәҡдим булмағас, ул саҡтағы Президент Аппараты етәксеһе Илдар Ғимаев "Вечерняя Уфа" гәзитендә баш мөхәррир булып эшләүсе Марат Муллаҡаевҡа төбәй был һорауҙы. Был тәҡдимде ҡолағына һәм күңеленә индереп, Марат Нуриәхмәт улы үҙенең редакцияһы эргәһендә был проектты башлап ебәрергә тәүәккәлләй һәм "Башҡортостан" гәзитендә егерме йылдан ашыу эшләп, инде ҡанға һеңгән, инде күнегелгән эштән айырылырға теләмәгән миңә йүгереп килә. Мин ризалашмағас, "Улайһа, бер һан ғына эшләп ҡарайыҡ әле. Мин уны Президентҡа күрһәтәйем дә, аҙаҡ хәл итербеҙ", - тигән үтенес белдерә. Хеҙмәттәшем Әлфинә Ҡарағужина һәм Марат Муллаҡаевтың үҙенең дә ярҙамы менән өс-дүрт көн эсендә "Киске Өфө"нөң беренсе һанын эшләп, 999 дана баҫтырып сығарабыҙ. 6 ноябрҙә Марат Нуриәхмәт улы "Киске Өфө"нөң ошо тәүге һанын тотоп, Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов эргәһенә китә **(һүрәттә)**. Президент шунда уҡ был гәзиттең яҙмышын һәм унда минең баш мөхәррирлек вазифамды мөһөрләп тә ҡуя. Шулай итеп, бурыстың үтә нығ яуаплылығын аңлаған мине, икеләнергә лә урын ҡалдырмай, "боҙло һыуға" ырғыталар...



Әйткәндәй, Марат Муллаҡаев тәҡдим иткән проекттың бары тик "Киске Өфө" тигән атамаһы һәм... Президент хәстәрләгән матди базаһы ғына бар ине. Проект бөтөн асылы, эстәлеге, рухы менән эш барышында ижад ителде. "Башҡортостан" гәзитендә эшләгән йылдарҙа тупланған түл, тәжрибә, һабаҡтар артабан төн йоҡларға бирмәгән, туҡтамай әйләнеп торған фекерҙәр, идеялар ҡуласаһына әүерелде лә, мине бер тапҡыр ғына түгел, даими рәүештә, аҙна һайын әлеге лә баяғы "боҙло һыуға" ташланырға мәжбүр итте. Ҡуласа әйләнә икән, туҡтап тороу, әйләнә-тирәңә ҡараныу, икеләнеүҙәр юҡ. Идеяларыңды йөкмәйһең дә, уларҙы ғәмәлгә ашырырға тип, алға йүгерәһең. Шул мәлдә бергә эш башлаған йәш журналистар Әлфинә Ҡарағужинаға, Айҙар Хәкимйәновҡа, Валера Ғәйнетдиновҡа, Азат Ярмуллинға, гәзитте версткалаусы Шамил Харисовҡа, корректор ҙа, текстарҙы компьютерҙа баҫыусы ла, тәржемәсе лә бурыстарын башҡарған Әминә Имашеваға, бер нисә айҙан беҙгә килеп ҡушылып, иңемдәге йөктө еңеләйтә биргән Әхмәр Үтәбайға рәхмәтлемен. Улар алдына ҡуйылған талап еңелдән булманы: яңы баҫма яңыса ижад ителергә тейеш, тигән хәҡиҡәтте төп ҡағиҙәбеҙ итеп алып, матбуғат майҙанында үҙебеҙҙең ҡабатланмаҫ, үҙенсәлекле эҙебеҙҙе һалырға тейеш инек. Уҡыусыларға һәр кемде уйландырырлыҡ, аңын ҡуҙғытырлыҡ, ҡанын ҡайнатырлыҡ, сәмен уятырлыҡ, аҡылын һәм һәләтен эшкә егерлек мәғлүмәт биреү ине төп маҡсат.

Ижад майҙанында еңеллек эҙләмәнек, уҡыусыларыбыҙҙың күңел донъяларын еңел-елпе хәбәрҙәр менән сүпләмәнек. Гәзитебеҙҙе республикала ла, Өфөлә лә таралыу бик еңелдән булмаһа ла, арыу ғына тираж йыйыуға ла өлгәштек. Һәр хәлдә, юлдар республика буйлап алып сығып китеп, халыҡ менән осрашыуҙар мәлендә ябырылып яҙыла инеләр гәзиткә. Баш ҡала гәзите булараҡ барлыҡҡа килгән баҫма шулай республика буйлап, төпкөл ауылдарға тиклем таралды. Был, әлбиттә, яңы баҫманың танылыуына, баһаланыуына, "Баш ҡалаға ниңә кәрәк башҡорт телендәге гәзит?" тип аптыраған, Өфөлә ошондай ихтыяж барлығын танырға теләмәгән ҡайһы бер ҡала етәкселәренә лайыҡлы итеп яуап бирергә, йөҙөбөҙ яҡтылығына булышлыҡ итте...

Ә бөгөн... Беҙҙең дә, башҡа баҫмаларҙың да уҡыусылары йылдан-йыл кәмей - был бөгөнгө хәҡиҡәт. Шуға ла ҡағыҙ баҫмаларҙы ябыу, эшмәкәрлекте социаль селтәрҙәрҙә дауам итеп, интернет-гәзиттәр булдырыу тураһындағы хәбәрҙәр ҙә ишетелә. Ләкин беҙ әлегә был хәбәрҙәрҙе ҡабул итергә теләмәйбеҙ. Сөнки халыҡтың күпмелер өлөшөнөң ҡағыҙ баҫмаларҙан айырылырға теләмәүен, гәзит һүҙенә нығыраҡ ышаныуын беләбеҙ. Почта хеҙмәте бик ауыр осор кисереүгә, элеккесә эшләмәүгә ҡарамаҫтан, тоғро уҡыусыларыбыҙ гәзит-журналдарҙа яҙылыу иғлан ителеү менән почталарға йүгерә һала. Әлбиттә, баштан уҡ билдәләгән, егерме йыл тоғро ҡалған, бер аҙға ла кимәлен төшөрмәгән йүнәлештәге йөкмәткебеҙ менән дә йәлеп итәбеҙ уларҙы. Ә йөкмәткене журналистарыбыҙ, хеҙмәткәрҙәребеҙ генә түгел, авторҙарыбыҙ ҙа тәьмин итә икәнен яҡшы беләһегеҙ. Ышанаһығыҙмы, юҡмы, егерме йыл буйы беҙҙең гәзит биттәренән төшмәгән авторҙарыбыҙ бар: улар - Фәүзиә Усманова-Яхина, Хәлил Һөйөндөков, Әғләм Шәрипов, Урал Мостафин, Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай, Радик Өмөтҡужин (Исмәғзәм Исмәғилев), Зәкирйән Әминев, Вәлиәхмәт Бәҙретдинов, Иҙрис Ноғоманов, Хәйҙәр Тапаҡов. Һуңыраҡ килеп ҡушылған авторҙарыбыҙ ҙа етерлек. Штаттан тыш хәбәрселәр тип аталыуға ҡарамаҫтан, штаттағы хеҙмәткәрҙәр кеүек эшләгән ошо авторҙарыбыҙға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ!

Редакция кабинетында ғына ултырған журналист түгелмен, республика райондары, ауылдары буйлап күп йөрөлә, осрашыуҙар үткәрелә. Осрашҡан аудитория башлыса ҡағыҙ баҫмаларҙан айырылмаған өлкән быуын, аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр, уҡытыусылар, тәрбиәселәр. Улар мәғлүмәтле, улар фекерле, улар белемле, улар кәңәшле. Улар беҙгә гәзит биттәрендә күберәк ниндәй темаларҙы яҡтыртырға кәрәклеге тураһында ла кәңәшен еткерә. "Киске Өфө"лә әленән-әле яңы рубрикалар барлыҡҡа килә икән, тимәк, ул ана шул осрашыуҙарҙа ҡолаҡҡа элгән тәҡдимдәр икәнен дә белеп ҡуйығыҙ. Тимәк, ике яҡлы бәйләнеш һәр ваҡыт күҙәтелә. Әммә...

Ошо сәфәрҙәрем мәлендә лә, Өфөләге мөхиттә лә күргән-аңғарғандарымдан шундай һығымта яһарға батырсылыҡ итәм: аҡ ҡағыҙ битенән уҡымау кешене деградацияға алып килә, уны кешелек асылынан, милли тамырҙарҙан ситләштерә. Әҙәм балаһының иң ҙур трагедияһы, бар бәлә-

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы республика муниципалитеттары башлыҡтарына Рәсәйҙең Халыҡтар берҙәмлеге көнөн салютһыҙ үткәрергә саҡырып мөрәжәғәт итте. Радий Хәбиров әйтеүенсә, баш ҡалала оло ваҡиға - хеҙмәт ҡаһарманлығы стелаһын асыу була. Эштәр көнөтөнө бара. Тантаналы ултырышта ветерандарҙы һәм милли йәмәғәт ойошмалары вәкилдәрен билдәләп үтеү күҙаллана.

✓Дәүләт Думаһында мобилизациянан баш тартҡан өсөн яуаплылыҡты көсәйткән закон проекты ҡаралмай. Был хаҡта Дәүләт Думаһының комитет етәксеһе Нина Останина белдерҙе. Бынан алда Дәүләт Думаһының Оборона комитеты рәйесе Андрей Картаполов һәм хәүефһеҙлек буйынса комитет рәйесе Василий Пискарев ошо идеяны күтәргәйне. Әммә хәҙер, өлөшләтә мобилизация тамамланғас, башланғыс үҙенең әһәмиәтен юғалтты.

✓Башҡортостанда махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың туғандары "Ғаилә" үҙәктәрендә социаль ярҙам алырға мөмкин. Ошо үҙәктәрҙең белгестәре төрлө ярҙам сараларын күрһәтеү мәсьәләләре буйынса 900-ҙән ашыу консультация үткәргән, 86 хәрби хеҙмәткәрҙең ғаилә ағзаһына психологик ярҙам күрһәтелгән. Башҡортостандың "Ғаилә" үҙәктәренең берҙәм телефоны: 8-800-347-5000.

✓1 ноябрҙән республикала, тотош илдәге кеүек үк көҙгө саҡырылыш башланды. Ике айҙа республикала 4000 кешене хәрби хеҙмәткә саҡырыу планлаштырыла. Бөгөн хеҙмәт йәшендәге егеттәр медкомиссия үтә башланы. Уларҙы хәрби хеҙмәткә оҙатыу 10 ноябрҙә башлана. "Хәрби хеҙмәткә алыу планға ярашлы башҡарыла, был махсус хәрби операцияға бер нисек тә бәйле түгел. Егеттәр Рәсәй биләмәһендә генә хеҙмәт итәсәк. Бер йыл хеҙмәт иткәндән һуң улар өйҙәренә ҡайтарыла. Бер кемгә лә хеҙмәт итеү ваҡытын оҙайтмайҙар", - тип билдәләне Башҡортостандың хәрби комиссары Михаил Блажевич.

✓БР Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров тейешле ведомстволарға һәм муниципалитеттарға Туймазы һәм Белорет райондарындағы тимер юл вокзалдары биләмәһен тәртипкә килтерергә ҡушты. "Туймазыла тимер юл вокзалын Куйбышев тимер юлы бик матур итеп ремонтланы. Уның биләмәһен тәртипкә килтереү беҙҙең иңгә һалынған. Бынан тыш, "Айғыр" вокзалына ла матур итеп реконструкция яһалған. Ике станцияны ла тәртипкә килтерегеҙ", - тине республика етәксеһе.

ләренең башы - асылынан ситләшеү икәнен күрә-белә йөрөйбөҙ хәҙер. Ошо мәхшәрҙе туҡтатыр, халҡыбыҙҙы, бигерәк тә йәштәребеҙҙе тоғро юлға күндерер һүҙ кәрәк халҡыбыҙға. Аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр, Зәйнулла ишан һымаҡ дин әһелдәренең һүҙе. Эйе, туған телдәге баҫмалар, шулай уҡ "Киске Өфө" гәзите журналистары, авторҙары ла ошондай һүҙҙәрҙе ынйы бөртөгөләй йыйып, уларҙы бер епкә теҙеүҙе дауам итә. Әммә тағы ҡабатлайым: ошо аҫыл һүҙ ҡомартҡыһын күҙенә элгәндәр, үҙ иткәндәр һирәгәйә. Райондарға командировкаға сығып, гәзиткә яҙылырға өндәп тә, һинең һүҙҙәреңдең һауала эленеп ҡалған мәлдәре күберәк хәҙер. Быуа шул әрнеү, борсолоу менән ҡаршылайбыҙ гәзитебеҙҙең ошо юбилейын...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Был риүәйәтте лә һөйләгәнебеҙ барҙыр. Һүҙебеҙҙе раҫ килтереп, тағы бер ҡабатлауҙан зыян булмаҫ. "Бер саҡ Хоҙай Тәғәлә кешеләрҙең туҡтауһыҙ зарланыуынан, уфылдауынан арып киткән һәм уларҙан ҡайҙалыр йәшеренеп, ял итеп алырға булған. Шул саҡ фәрештәләренең береһе Уға шундай кәңәш биргән: "Хаҡ Тәғәләбеҙ, ҡайҙа ғына йәшенһәгеҙ ҙә, кешеләрҙең зарынан ҡотола алмаҫһығыҙ, улар Һеҙҙе Ҡафтау башына ҡасһағыҙ ҙа, диңгеҙ төбөнә төшһәгеҙ ҙә табасаҡ. Кеше таба алмаҫлыҡ бер генә урын бар: ул кешенең күңелендә. Шунда йәшеренегеҙ. Кеше бер ваҡытта ла үҙенең күңеленә күҙ һалмай..."**

**Быуа шулай. Аңлы, рухлы, бәхетле, уңышлы, өлөшлө, эшле һәм ашлы булыр, тормош маҡсатыңа өлгәшер өсөн бары тик үҙ күңелеңә, үҙ асылыңа күҙ һалыу етә, тигәнгә ишара был. Быларға өлгәшеү өсөн "Киске Өфө" нө уҡығыҙ, ундағы фекер-кәңәштәрҙе ҡундырып алығыҙ күңелегеҙгә, тигәнде лә өҫтәп ҡуям. "Киске Өфө"бөҙҙө уҡып, ундағы фәһемле һүҙҙәр менән күңел һауыттарығыҙҙы тултырып, матур йәшәү өлгөләренә һәм һыналаған тәжрибәләргә эйәреп, тормоштоң ваҡ-төйәктәренә иғтибар итмәйенсә алға, маҡсатыңа табан ынтылып, юғарыға ҡарап фекер итеп, булғанына шөкөр итеп йәшәгәндә... отасаҡһығыҙ! Аҡылығыҙҙы ойотмағыҙ, милләттәштәр!**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# "УРСУЛА, АУЫҘЫҢДЫ ЯП!"



**Океан аръяғы кураторы тарафынан Рәсәйгә ҡаршы туҡтауһыҙ һөсләтелеүсе һәм алдын-артын байҡамаҫтан, санкция артынан санкция иғлан итеүсе Европа быныҡ менән үҙенә тоҙаҡ ҡына ҡороуын төшөнә башланы, буғай. НАТО тарафынан идара ителеүсе берләшмә илдәренең аяҡ-ҡулдары хәрби блокка бәйле етәксе элитаһы ауыҙ асып һүҙ әйтә алмаһа ла, Европа буйлап күптән инде протест акциялары әүҙемләшә, күп меңләгән халыҡ, үҙ мәнфәғәттәре иҫәбенә Киев режимына күрһәтелгән ярҙамды туҡтатыуҙы талап итеп, урамдарға сыға, Рәсәйгә ҡаршы санкцияларҙың Европаны бөлгөнлөккә төшөрөүен киҫәтә.**

Ысынлап та, Евросоюз илдәрендә тормош кимәленең бығаса булмаған кимәлгә төшөүе, бензин, электр энергияһы, газ һәм аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙың киҫкен артыуы сәбәпле халыҡ асыуы шуға тиклемгә барып етте ки, Париж урамдарына сығыусы ҡала халҡы Евросоюзды тарҡатырға тигән талап ҡуйып, "Урсула, ауыҙыңды яп!" тип хор менән ҡысҡырырға мәжбүр булды, сөнки ошонан алда ғына Еврокомиссия башлығы Урсула фон дер Ляйен Украинаға ай һайын 1,5 млрд евро бүлеү хаҡында тәҡдим индергәйне. Ә шул уҡ ваҡытта ябай француздар аҙыҡ-түлектән башлап, бөтә нәмәгә: электр утына, өйҙө йылытыуға, бензинға экономиялап йәшәргә мәжбүр.

Рәсәйгә ҡаршы санкциялар һәм энергетик көрсөк Европаны бөлгөнлөк хәленә килтереп баҫтырҙы, тигән фекерҙә итальяндар ҙа. Ил етәкселеге сәйәсәтенә ҡаршы Генуяла, Римда, шулай уҡ Барселонала киң ҡоласлы халыҡ сығыштары булып үтте. Киев режимын финанслауҙы туҡтатырға, Мәскәүгә ҡаршы санкцияларҙы ғәмәлдән сығарырға тигән талаптар менән Австралияла, Германияла, Чехияла, Австрияла, Молдавияла, Грецияла һәм башҡа илдәрҙә лә лозунгылар күтәргән халыҡ ағымы ташҡындай урамдарҙы ҡапланы. Вена ҡалаһында, мәҫәлән, Австрияныҡы менән бер ҡатарҙан Рәсәй флагын тотоп сығыусылар ҙа бар ине хатта...

Эйе, Европа бөгөн протест тулҡынына күмелде, халыҡ боларыштары ай буйына дауам итә инде хәҙер, ә ҡыш башланмаған да әле. Быныай шарттарҙа улар ҡышты нисек үткәрер? Кәрәгең тирәгендә йыҡтырыр, тиме? Әйткәндәй, үткән айҙан алып, Европа халҡы ярышып-ярышып утын ҡырҡа - иларһын да, көләрһең дә. Ошоғаса Рәсәй йылыһынан иҙерәп, һис бер мохтажлыҡ белмәй йәшәп ятҡан европалылар шундай эшкә тотонор тип кем уйлаған! Ошо уңайҙан Францияның әлеге лә баяғы яманаты сыҡҡан Charlie Hebdo карикатурасылары арҡаһына утын бәйләмә йөкмәтеп, Макронды Елисей һарайы янында кәртинкәгә "төшөрөп" тә ҡуйған, имеш. Һәм был бер ҙә генә уйҙырма түгел: Европа өсөн рәхәт замандар артта ҡалды, тип, тап ул бит ил граждандарын ауыр ҡышҡа әҙерләнергә саҡырғайны. Ысынлап та, бик теүәл һәм тынлаулы халыҡ булараҡ, быны иң тәүҙә немецтар ишетеп ҡалған булыртға тейеш: Германияла утын алтын бәрәбәренә тиң ти хәҙер, һыҡмыр немецтар хаҡына ла ҡарап тормай, кубометрлап утын һатып ала, ҡышлыҡ запас әҙерләргә тотонған икән.

Әшулай ҙа бер ҙә генә көлкө түгел был: Евросоюздың етәксе элиталары Рәсәйгә тип ҡорған тоҙаҡ, ахыр сиктә, барыбер үҙ илдәре халҡының елкәһенә тос туҡмаҡ булып төшә. Быны Европа халҡы күптән аңланы инде... Быуадай көрсөктәргә өйрәнмәгән халыҡтың асыуын урындарҙағы оппозицион көстәр һәм ультра уң партиялар электереп алырға һәм үҙ сәйәси мәнфәғәттәрендә файҙаланыуҙары бик ихтимал, ти күҙәтеүселәр. Икенсе яҡлап, Евроберләшмә илдәре араһында аңлашмаусылыҡ, тарҡалыш башланыуы ла мөмкин бит әле. Теләк булғанда, үҙ халҡынан алда агрессив Киев режимы файҙаһын ныҡ ҡайғыртыусы етәксене урынынан алып та ырғыталар хәҙер ҡайһы бер илдәрҙә. Мәҫәлән, Рәсәйгә - яңы ҡаты санкциялар, ә Киевҡа ярҙам вәғәҙә итеүсе Лиз Трасс, ана, премьер-министр ҡәнәфиендә ни бары ай ярым ғына ултырып ҡалды. Хатта ябай британдар ҙа Украинаның АҠШ менән НАТО өсөн Рәсәйгә ҡаршы төбәлгән ҡорал ғына икәнлеген аңлаған.

Ғөмүмән, был Украина хәҙер хатта үҙ партнерҙарының да теңкәһенә тейеп, ялҡыта ғына бара. Теләнсе хәлгә төшкән Зеленскийҙың ҡулынан килгән бар шөғөлө - ике ҡулын һоноп, АҠШ һәм Көнбайыштан аҡса һәм ҡорал талап итеү. Эйе, был әҙәм хәҙер мыжып, хатта янап, партнерҙарынан ярҙамды аяҡ тибеп кенә талап итә башланы, сөнки хәлдәре бик хөрт украиндарҙың. Евроберләшмә аҡса бүлеүҙән туҡтаһа, Украина халҡы эш хаҡы һәм пенсияһыҙ тороп ҡаласаҡ. Шуға күрә илдең премьер-министры Д.Шмыгаль вәғәҙә ителгән туғыҙ млрд евроны талап итеп, Евросоюзға ультиматум ебәргән. Быуа нисек хәлдәр.

Ысын булһа, ошо көндәрҙә генә әле "Яңылыҡтар ижтимағи хеҙмәте" порталы хәбәр итеүенсә, Америка менән Украина мөнәсәбәттәрендә етди проблемалар тыуып тороуы хаҡында хәбәр ителде. Бирһен Хоҙай! "АҠШ-тың стратегик мәнфәғәттәре бынан ары Украинаның пландары менән тап килмәй", - тиелә унда. Был хаҡта The American Conservative баҫмаһы авторҙары ла яҙып сыҡҡан. Аналитиктар фекеренсә, Киев Ҡырым менән Донбасс территорияларына контролде кире ҡайтармаҡсы, ә Вашингтон иһә Рәсәй менән глобаль конфликтҡа инеүҙән тыйылып, бындай ниәттәр планлаштырмай, имеш. Шул уҡ ваҡытта Штаттар Украинаға ярҙам итеүҙән һаман да баш тартмай һәм киләһе йыл уға 50 млрд доллар күләмендә хәрби һәм гуманитар ярҙам вәғәҙәләй. NBC телеканалы, 8 ноябргә тәғәйенләнгән юғары закон сығарыу органына һайлауҙар һөҙөмтәһендә Конгрестың яңы составы Украина мәсьәләһенә ҡараштыу үҙгәртеүе лә ихтимал, тигән фекер белдерә...

Әйткәндәй, Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Халыҡ-ара "Валдай" дискуссия клубы ултырышында һөйләгән телмәренең АҠШ-тағы һайлауҙар алдынан үтеүе Көнбайыш тарафынан төрлөсә ҡараштар тыуҙырҙы. New York Times белдереүенсә, Рәсәй Көнбайыш менән түгел, ә "көнбайыш элитаһы" менән көрәшә. Һәм, ысынлап та, Рәсәй Президенты телмәрендә билдәләнеүенсә, "Донъя менән идара итергә, ә асылда иһә, диктатҡа ынтылыштары менән Көнбайыш донъя элитаһынын, шул иҫәптән, АҠШ-тың да, халыҡ-ара абруйы ҡаҡшауға табан бара..." В.Путин әйтеүенсә, Көнбайыш шәхсән рәүештә донъя менән идара итеүгә һәләтһеҙ булыуға ҡарамаҫтан, бар көсөнә быны эшләргә маташа, ә был, классик һүҙҙәре менән әйткәндә, шундай һығымтаға нигеҙ булырҙай - хәл көмендә революция рухында: юғарылағылар булдыра алмай, ә түбәндәгеләр башҡаса былай йәшәргә теләмәй...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин яҡташыбыҙ Илмир Нәбиевты Рәсәй Хөкүмәтенең сәнәғәт департаменты директоры итеп тәғәйенләне. Илмир Нәбиев Башҡортостанда тыуған. 2011 йылда Рәсәй Хөкүмәтенең сәнәғәт һәм инфраструктура департаментында эшләй башлаған. 2021 йылда Рәсәй Хөкүмәтенең энергетика департаменты директоры урынбаҫары итеп тәғәйенләнгән.

✔Республика хужалыҡтарында 31 октябргә 43,1 мең гектарҙан шәкәр сөгөлдөрө йыйып алынған, йәки ошо культура сәселгән майҙандарҙың яҡынса 98 процентты. Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, дүшәмбегә республикала тамырҙарҙың тулайым йыйымы - 1,302 миллион тонна, уртаса уңыш гектарынан 301,9 центнер тәшкил иткән. Республикабыҙҙың ике шәкәр заводы 492 мең тонна яҡын сөгөлдөр эшкәрткән. Урындағы сеймалдан 75 мең тоннанан ашыу шәкәр етештерелгән.

✔Рәсәй Журналистар союзы рәйесе Владимир Соловьёв журналистарҙың XIII съезында хәрби бәрелештәр зонаһында эшләгән журналистарҙы хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусыларға тиңләргә кәрәк тигән тәҡдим менән сығыш яһаны. Башланғыс йәмәғәт ойошмаһының резолюцияһына индерелде. Соловьёв шулай уҡ мобилизацияланған журналистарға һөнәр буйынса граждандыҡ хеҙмәте вазифаларын биләү һәм хәрби хәбәрселәр булып эшләү мөмкинлеген беркетергә тәҡдим итте.

✔Башҡортостанда ноябрь айына һауа торошо фаразланды. Синоптиктар фекеренсә, 2022 йылдың ноябрендә Башҡортостанда һауа торошо уҙған йылдарҙағынан артыҡ айырылмай. Температураның һуңғы биш йылдағы уртаса күрһәткестәргә яҡын булыуы көтөлә. Ноябрҙә уртаса температура көндөҙ -2, төндә иһә -5 градус була. Ай дауамында республиканың үҙәк районарында башлыса болотло һауа торошо көтөлә. Көндәрҙең күбеһе яуым-төшөмлө булыуы ихтимал.

✔Башҡортостан Башлығы үҙенең указы менән республика Хөкүмәтенең мәғлүмәт хәүефһеҙлеген тәьмин итеү, шул иҫәптән компьютер һөжүмдәрен асыҡлау, иҫкәртеү һәм эҙәмтәләрен бөтөрөү буйынса вәкәләттәрҙе республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары БР иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратовҡа йөкмәтте.

*ҠЫҪҠАСА*

# ТАМАМЛАНДЫ!

**Ил Президенты Владимир Путин Рәсәйҙә өлөшләтә мобилизация сиктәрендә хәрби хеҙмәткә саҡырыуҙың тамамланыуын белдерҙе. Был хаҡта Кремль сайтында хәбәр ителә.** "Ул тамамланды, нөктә ҡуйылды", - тине Рәсәй лидеры Сочиҙа Әрмәнстан премьеры Никол Пашинян һәм Әзербайжан президенты Илһам Алиев менән өс яҡлы осрашыу йомғаҡтары буйынса матбуғат конференцияһында. Өлөшләтә мобилизацияланғандарҙың 260 меңе хәрби бәрелештәрҙә ҡатнашмай, әҙерлек үтә, шунын менән мобилизация тамамланды, тип өҫтәне Путин. Шулай уҡ Башҡортостанда ла 28 октябрҙә төбәк өсөн билдәләнгән планды үтәүгә бәйле өлөшләтә мобилизация рәсми рәүештә тамамланды. Республикабыҙҙан мобилизацияланған ир-егеттәр уҡыу частары урынлашҡан биш ҡалаға - Пензаға, Һарытауға, Ҡаҙанға, Еланға һәм Вольскиға оҙатылды.

✓ **Хәрби хеҙмәткә саҡырылған граждандар Донецк һәм Луганск Халыҡ Республикаларына, Запорожье һәм Херсон өлкәләре биләмәләренә ебәрелмәй, шулай уҡ махсус операцияла ҡатнашмай.** Был хаҡта Рәсәйҙең Хәрби көстәре Генштабының Баш ойоштороу-мобилизация идараһы етәксеһе генерал-полковник Евгений Бурдинский хәбәр итте. Ғәҙәттә, көҙгө саҡырылыш кампанияһы 1 октябрҙән башлана, ләкин быйыл уны өлөшләтә мобилизация үткәреүгә бәйле1 ноябргә күсерҙеләр, тине Бурдинский. Унын һүҙҙәренсә, быйыл көҙ йәмғеһе 120 мең кешене саҡырыу планлаштырыла, был иһә уҙған йылдарға ҡарағанда 7,5 меңгә аҙыраҡ. "Хеҙмәт срогын тултырған һалдаттарға килгәндә, улар октябрҙән тыуған яғына ҡайта башланы. 31 октябргә билдәле булған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 19,5 мең кеше Ҡоралды Көстәр сафында хеҙмәт итеп ҡайтҡан", - тине Бурдинский.

✓ **Үҙ теләге менән махсус операцияла ҡатнашҡан яугирҙар хәрби хәрәкәттәр ветераны статусына эйә була. Бында яраланғандар хаҡында ла һүҙ бара - уларға хәрби хәрәкәттәр инвалиды статусы бирелә.** Шулай итеп, үҙ теләге менән махсус операцияла ҡатнашҡандар һәм уларҙың ғаилә ағзалары, Рәсәй хәрбиҙәре кеүек үк, законда билдәләнгән льготалар, социаль ярҙам саралары менән файҙаланырға мөмкин. Был хаҡта Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин пленар ултырышта хәбәр итте. Бынан алда Дәүләт Думаһына ошо мәсьәләне Хөкүмәт менән берлектә өйрәнеү бурысы йөкмәтелгәйне, тип иҫкә төшөрҙө ул. Володин төрлө фракция депутаттарының был мәсьәләне күтәреп сығыуын да билдәләне. "Беҙ ил тураһында уйларға, аныҡ мәсьәләләрҙе хәл итеүгә ҡағылышлы мәсьәләләрҙә ярышырға түгел, ә берләшергә тейешбеҙ", - тине Дәүләт Думаһы спикеры.

✓ **Башҡортостанда махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балаларын ҡайнар аш менән тәьмин итеү тураһында хөкүмәт ҡарарына ҡул ҡуйылды.** Документ ундайҙарға көнөнә бер тапҡыр бушлай ҡайнар аш биреү тәртибен күҙ уңында тота. Улар иҫәбендә: дөйөм белем биреү мәктәптәренең 5-11-се класс уҡыусылары, урта һөнәри белем биреү учреждениеларында көндөҙгө бүлектә уҡып йөрөгән студенттар. Әлеге ярҙамды алыу өсөн ата-әсәгә (законлы вәкилгә) бушлай ашатыуҙы һорап ғариза яҙырға, шулай уҡ военкоматтан махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы тигән статусын раҫлаған белешмә алырға кәрәк. Ҡарарҙың үтәлешен контролдә тотоу Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары - иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратовҡа йөкмәтелде.

*КӨНАУАЗ*

# РЕСПУБЛИКА БАШЛЫҒЫ...

## халыҡтың һорауҙарына яуап бирҙе




**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үткән аҙнала республика халҡының һорауҙарына тура бәйләнеш аша яуап бирҙе. Дүртенсе тапҡыр үткәрелгән был сара дүрт сәғәттән ашыу ваҡытҡа һуҙылды. Тура бәйләнештә телгә алынған иң мөһим мәлдәр тураһында.**

### Мобилизация

Башҡортостан өлөшләтә мобилизация планын үтәгән. Шул уҡ ваҡытта өс балаһы булған 200 кеше махсус операциянан кире ҡайтарылған, улар урынына сикләүҙәре булмағандар саҡырылған. Хәҙер властарҙың бурысы - ир-егеттәргә һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам күрһәтеү. "Махсус хәрби операция зонаһына киткән егеттәргә ихтирамымды белдергем килә. Шәхсән үҙем уларҙы бер тапҡыр ғына оҙатманым һәм егеттәрҙең ғаиләләре менән лайыҡлы хушлашҡанын күрҙем. Улар туристик сәйәхәткә юлланмай, ә ғүмер һәм сәләмәтлек өсөн хәүефле ергә китә", - тине Радий Фәрит улы.

### Ирекмәндәр батальоны

Салауат Юлаев исемендәге Башҡортостан батальоны Росгвардия ғәскәрҙәре составына инәсәк, сөнки ул, нигеҙҙә, СОБР һәм ОМОН ветерандарынан төҙөлгән. "Башҡортостан халҡы махсус хәрби операцияла үҙ ирке менән ҡатнаша. Был башҡорт халҡының характерын, унын менталитетын күрһәтә. Элекке ваҡыттарҙан алып шулай. Беҙ тыуған ил өсөн барлыҡ һуғыштарҙа ҡатнашҡанбыҙ. Был гендар аша тапшырыла", - тине республика Башлығы.

### "Отставкаһы" тураһында

"Мин республиканың һайлап ҡуйылған етәксеһе, халыҡ миңә ышанған, республиканың үҫешен минең менән бәйләй һәм мин бер ҡайҙа ла китергә йыйынмайым. Әммә үҙемдең эшемә хеҙмәт кеүек ҡарайым. Әгәр башҡа эш менән шөғөлләнергә ҡушһалар - эшләйәсәкмен. Бойороҡ булһа - шинель кейеп, ҡайҙа ҡушалар, шунда барасаҡбыҙ. Имеш-мимеште 2024 йылда уҙасаҡ һайлауҙар алдынан таратала. Был посҡа ултырырға теләүселәр бар, шуға күрә "цирк"ҡа әҙер булырға кәрәк".

### ВУЗ-дарҙы берләштереү

"БДУ менән ӨДАТУ-ҙы берләштереү тамамланыу алдында. Мин был ҡарарҙың дөрөҫ булыуын эшем менән раҫлармын. Беҙ вуздарҙы уларҙы бөтөрөү өсөн түгел, ә көсәйтеү өсөн берләштерҙек. Беҙ берләшкән университетты финанслауҙы көсәйтеп, Рәсәй вуздары картаһында ҙур уйынсы булдырабыҙ. Берәүҙе лә ҡыҫҡартмаясаҡбыҙ, әммә ялҡауҙарҙы ла тотмаясаҡбыҙ. Студенттар ошондай яҡшы вузда уҡыуҙары менән ғорурланасаҡ".

### Башҡортостан сода компанияһы

"Республика Башҡортостан сода компанияһының милектәше булып ҡалды, ә Рәсәй өлөшөндә булған акциялар пакеты "Рус водороды" компанияһының ышаныс идаралығына тапшырылды. "Сода" матур күрһәткестәргә өлгәшә, килем бар, быйыл насар булмаған дивидендтар алдыҡ, шулай уҡ мәрхәмәтлек ярҙамы ла

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты "Мәҙәни маршрут" Бөтөн Рәсәй мәктәп музейҙары фестивалендә еңеү яуланы. Гимназия уҡыусылары фестивалдә Зөмәрә Хисмәтуллина исемендәге тарихи-крайҙы өйрәнеү музейы менән таныштырҙы һәм "Киләсәк - тарих ҡулында" проекты менән беренсе урынды алды. Уҡыусылар "Орленок" лагерына патриотик сменаға юлламалар менән бүләкләнде. Гимназияның тарих-тыуған яҡты өйрәнеү музейы 1977 йылда булдырылған.

✓Бөйөк Устюгтан ил буйлап сәйәхәткә сыҡҡан Ҡыш бабай поезы Рәсәй тимер юлдары буйлап 33 мең саҡрымдан ашыу юл үтергә тейеш. Поезд Башҡортостанға ла килә. 7 декабрҙә (шаршамбы) - Өфөлә, 8 декабрҙә иһә Белоретта туҡтай. "Ҡыш бабай поезы туҡтаған һәр ҡаланың вокзалында артистар һәм аниматорҙар ҡатнашлығында ҡышҡы әкиәт мөхитенә сумырға мөмкинлек биргән күңелле байрам программаһы көтә", - тип хәбәр ителәр Куйбышев тимер юлының матбуғат хеҙмәтенән.

✓Өфө мәҙәниәт идаралығының элекке етәксеһе Шамил Абдраҡов хәҙер Өфө сәнғәт училищеһы (колледжы) директоры вазифаһын башҡара. Шамил Абдраҡов 1980 йылда Мәләүездә тыуған. Салауат музыка училищеһын, Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлаған. 2013 йылдан Башҡортостандың мәҙәниәт министры урынбаҫары булып эшләне.

✓Быйылғы ағас ултыртыу өмәләрендә төбәктә йәшәүсе 210 мең кеше - мәктәп уҡыусылары, студенттар, волонтерҙар һәм хеҙмәт коллективтары ҡатнашҡан. Республика етәксеһе белдереүенсә, район-ҡалаларҙа быйыл көҙгөһөн 76 меңдән ашыу төп ағас-ҡыуаҡ (18 меңгә яҡыны - эре ағастар) ултыртылған, 85 тематик аллея барлыҡҡа килгән. Уларҙың күбеһе төрлө осор геройҙарына арналған.

✓Республика менән идара итеү үҙәге хеҙмәткәре Ильяс Сәғитов һөйләп үтеүенсә, әле Башҡортостанда 42 яңғыҙаҡ атай БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының "Ғаилә" ресурс үҙәктәре социаль ярҙамын ала. Тулы булмаған ғаиләләргә һәм халыҡтың башҡа категорияларына ярҙам тураһындағы мәғлүмәтте "Трудовые отношения" телеграм-каналынан белергә була. Унда барлығы 1700-ҙән ашыу йүнәлеш бирелгән. Шулай уҡ бушлай икенсе һөнәргә уҡып алыу мөмкинлеге лә бар.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Әлеге ваҡытта подрядсыны таптыҡ, 2023 йылдың мартына проект эшләнәсәк. Ул ваҡытта һәйкәлдә алырға кәрәкме һәм быны ни тиклем тиҙ башҡарыу кәрәк икәнлегә аңлашыласаҡ.***

алабыҙ. Санкцияларҙың бер пакеты БСК-ға етди ауырлыҡ килтерҙе, компания көслө баҫымды күтәрә, шуға күрә әле төп проблема - йәшәү, тауар һатыу".

### Хоспис

"Өфө хосписы юғары әҙерлек стадияһында: уның ҡыйығы ябылған, йөҙләнгән, барлыҡ инженер структураһы: йылылыҡ, газ, яҡтылыҡ һәм башҡалар әҙер, биҙәү эштәре бара. Был 13,5 мең квадрат метр, 60 палата, төҙөкләндерелгән территория. Уны киләһе йылдың тәүге яртыһында тапшырасаҡбыҙ. Мин башҡа губернаторҙарға үҙебеҙҙең проектты бушлай файҙаланырға тәҡдим иттем".

### Шәхси санкциялар

"Уларҙа сәйәси мәғәнә юҡ. Ни өсөн был ғәмәл башҡарыла һуң? Мин бер ваҡытта ла үҙемдең позициямды йәшермәнем - һәр саҡ "путинсы" булыуымды һәм быныҡ менән ғорурланыуымды белдерҙем. Илебеҙ махсус хәрби операцияға бәйле шундай ауыр хәлторошта булғанда, кешеләр үлгәндә, үҙ позицияңды белдереү мөһим. Береһенә лә таш ташламайым. Кемдер йомшаҡ, кемдер ахмаҡ һәм танауынан арыны күрмәй, кемдер әҙәм аҡтығы булып сыҡты. Әгәр һин ошо илдә йәшәйһең икән, ауыр минуттарҙа уға ярҙам итергә тейешһең".

### Транспорт реформаһы

"Өфөлә уның беренсе этабы тамамланды, киләһе йылдан брутто-контракттарға һәм автобус паркын сираттағы яңыртыуға күсәбеҙ. Автобустарҙың бер өлөшөн беҙ райондарға тапшырабыҙ һәм шунда икенсе этап башлана ла инде. Уның тәү бурысы - ауылдарҙың район үҙәге менән автобус бәйләнешен юлға һалыу".

### Төҙөкләндереү

"Кузнецов затонында Башҡортостандағы иң ҙур - 2200 урынлыҡ мәктәп, ә Бишбүләк районында - сыуаш теле өйрәнелгән мәктәп, Межгорьела бассейн төҙәләсәк. Һупайлыла Рыльский урамын ҙур реконструкция көтә, ә уны юбилейға төҙөкләндереү буйыл уҡ башланасаҡ. Хакимиәтемә тура бәйләнешкә килгән барлыҡ һорауҙарҙы ла тикшереүгә алырға ҡушам, унда төҙөкләндереү буйынса күп мәсьәләләрҙе бармаҡ шартлатып ҡына ла хәл итергә мөмкин".

### Ҡышҡы таҙалыҡ

"Бик күп коммуналь техника алдыҡ һәм баш ҡала хакимиәтенән ҡарҙы ентекле таҙартыуҙы талап итәсәкбеҙ. Өфө ҡарға батырға тейеш түгел. Ҡар иретеү пункты төҙөлөшө лә уларҙың контролендә".

### Көнсығыш сығыу юлы

"Баш ҡаланан көнсығыш тарафына сығыу юлын төҙөгәндә улбыл хәлдәр килеп сыҡһа, төҙөлөш тағы ла 10 йылға артҡа күсеүе мөмкин. Ә объектты төҙөп бөтөү - дөйөм республика бурысы. Финанс планы - график буйынса, ә төҙөлөш хатта графиктан алда бара. Юл һалыныу менән яңы күпер эшләнәсәк, тирә-яҡ территория инвестиция һалыу өсөн ылыҡтырғыс буласаҡ, торлаҡ төҙөлөшө шунда күсәсәк. Был - киләсәктең үсеш нөктәһе".

### "Өфө" футбол клубы

"10 йылда клуб республиканан 7 миллиард һумдан ашыу аҡса алған. Шул уҡ ваҡытта ул шәхси ҡулдарҙа ҡалған, шуға күрә беҙ юридик идара итеүгә инергә тип килештек. Клубты финанслауға 400 миллион һум бүләбеҙ, коммерция генийы Шамил Гәзизов арҡаһында ул алға сығырға мөмкин. Әлегә уларҙың уйынының алға сығыу ниәте күренмәй".

### Яңы йыл корпоративтары

"Офиста йыйылыу, коллегаларҙы ҡотлау, бер бокал шампан шарабы эсеүҙә бер хилафлыҡ юҡ. Яңы йыл байрамын бөрәү ҙә бөтөрмәгән. Беҙ коллегаларыбыҙ, ғаиләбеҙ менән йыйылып, уны байрам итергә лайыҡлы. Әммә тағун ваҡытында киң ҡолас менән, артистар саҡырып байрам итергә кәрәкмәй. Әлегә был урынһыҙ".

### Шәхси тормошо тураһында

"Хоккей уйынында йәрәхәтләнеп, тубығыма операция яһанылар, хәҙер сәләмәтлегем яҡшы, реабилитация бара, унан һуң ҡабат хоккейға ҡайтырға кәрәк. Былау - үтелгән этап, хәҙер мин башҡа аш-һыу әҙерләргә өйрәндем - уха, тандырҙа ҡабырғалар томалап бешерәм. Был ял бирә. Балаларға, әлбиттә, ваҡыт етмәй. Оло улым Фәрит ҡайһы берҙә эшемә сәй эсергә килә. Балаларымдың фотоларын хәүефһеҙлекте уйлап күрһәтмәйем, сөнки асыҡ эшмәкәрлек алып барам һәм агрессив мөхиттә йәшәйем".

**Республика Башлығы тағы ниндәй мөһим нәмәләр әйтте?**

- 2023 йылда Башҡортостанда барлыҡ сүп-сар түгеү урындары бөтөрөләргә һәм алданған өлөшсөләр проблемаһы хәл ителергә тейеш.
- "Башҡортостан оҙон ғүмерлелеге" программаһы буйынса киләһе йылда туристик урындарға ике тапҡырға күберәк пенсионер бара аласаҡ.
- Башҡортостанда әҙерлектең нигеҙ режимы индерелде, әммә өҫтәмә хәүефһеҙлек саралары кәрәк түгел.
- "Һөт кухняһы" продукцияһын алыу өсөн педиатр белешмәһен оҙайтыу эше еңеләштереләсәк.
- Йыл һайын муниципалитеттарға төҙөлөш эргәһендәге юлдарға таш түшәүгә 10 миллион һум аҡса бирергә тырышыласаҡ.
- Өфөләге Совет майҙанында фуд-зона, музей экспозициялары буласаҡ һәм йәрминкәләр уҙғарыласаҡ.

**Әйткәндәй...**
**"Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева тура бәйләнеш мәлендә Башҡортостан Башлығына республиканың төп символдарының береһе булған Салауат Юлаев һәйкәлен реконструкциялау мәсьәләһе буйынса халыҡтың борсолоуын еткерҙе. "Был минең өсөн үтә нескә һәм яуаплы мәсьәлә,- тине Радий Фәрит улы. - Һәйкәлгә, һис һүҙһеҙ, реконструкциялау талап ителә. Был мәсәлә йәмәғәтселектә бик ҡыҙыу һөйләшеүҙәр, бәхәстәр ҙә тыуҙырҙы. Һәйкәлдең проектланыуы бик ҡатмарлы, шуға ла беҙ архивтан уны төҙөүҙең бөтә процестары тураһындағы документтарҙың күсермәләрен алдырҙыҡ. Әлеге ваҡытта подрядсыны таптыҡ, 2023 йылдың мартына проект эшләнәсәк. Ул ваҡытта һәйкәлдә алырға кәрәкме һәм быны ни тиклем тиҙ башҡарыу кәрәк икәнлегә аңлашыласаҡ. Әгәр хәүеф бар һәм тиҙ арала алырға кәрәк булһа, Өфө ҡалаһының 450 йыллығын һәйкәлһеҙ ҡаршы алаҫаҡбыҙ. Йәмәғәтселек менән нимә мөһим булыуы буйынса фекерләшеп, уртаҡ тел табырбыҙ".**

**Хәтерегеҙҙә булһа, быға саҡлы йәмәғәтселек менән фекер алышыуҙарҙан һуң Салауат Юлаев һәйкәлен постаментынан алғас, уны бер ҡайҙа ла алып китмәйенсә, шул уҡ майҙанда реставрациялаясаҡтар, тигән ҡарарға киленгәйне.**

## ҺОРАУ-ЯУАП



# БАЛАЛАР ЯҠЛАУЛЫ

**➔ Тормош иптәшем мобилизацияла, хеҙмәткә саҡырылғанға тиклем уның рәсми килеме булманы (нуль килеме). Балаларҙың 3 йәштән 7-гә тиклемге түләүенә хоҡуғым бармы?**

- 3 йәштән 7-гә тиклем түләүҙе алыуға хоҡуҡ эшләгән ғаилә ағзаларының һуңғы йылдағы килеменән сығып, ғариза биреү көнөнә тиклем 4 ай алдағы һуңғы йыл килеменә ҡарап билдәләнә. Мәсәлән, әгәр ир ағымдағы йылдың сентябрендә мобилизацияланһа, ә ҡатын октябрҙә түләүгә ғариза бирһә, ирҙең 2021 йылдың июненән 2022 йылдың майына тиклемге осорҙағы килеме иҫәпкә алынасаҡ. Әгәр ир менән ҡатын был осорҙа эшләмәһә, ә сентябрҙә хеҙмәткә саҡырылһа, ғаиләгә пособие бирелмәй, сөнки льготалар биреү өсөн мобилизация нигеҙле сәбәп түгел. Әле Рәсәй Хеҙмәт министрлығы был мәсьәләне тикшерә.

**➔ Түләүсе мобилизацияланһа, алимент нисек түләнә?**

- Мобилизация бала алдындағы бурыстан азат итмәй. Алимент шул уҡ тәртиптә түләнә. Ғәҙәттә, алимент атай кешенең эш хаҡына бәйле: бер балаға дүрттән бер өлөш түләнә, икәүгә - өстән бер өлөш, өсәүгә - яртыһы. Мобилизациялағы ирҙең килеме күләменән сығып, ул үҙгәрергә мөмкин. Әгәр ҙә алимент беркетелгән күләмдә килгән булһа, уның суммаһы үҙгәрмәй. Шулай ҙа уны суд аша арттырырға мөмкин. Быға тиклем алиментҡа бәйле проблема булһа, хәҙер хәл яҡшырасаҡ, сөнки мобилизациялағы ир-егеттәрҙең гарантияланған килеме бар.

**➔ Ниндәйҙер хәл килеп сығып, баланы ҡалдырырға кеше булмаһа, нимә эшләргә?**

- Әгәр һеҙ Өфөлә йәшәһәгеҙ, Пушкин урамы, 86 адресы буйынса "Йәшлек House" үҙәге ирекмәндәренә мөрәжәғәт итә алаһығыҙ. Унда иртәнге 9-ҙан киске 6-ға тиклем балалар бүлмәһе эшләй. Шулай уҡ мәктәптән һуң да барырға мөмкин. Белешмә өсөн телефон: 8 987 099-80-49.

Ашығыс рәүештә дауаханаға ятҡанда табипҡа балағыҙ булыуы тураһында хәбәр итергә кәрәк. Табип баланы тәүлек әйләнәһенә һәм бушлай эшләгән балалар социаль үҙәгенә урынлаштырыу өсөн ғаилә хеҙмәте менән бәйләнешкә инәсәк. Планлы рәүештә дауаханаға ятҡанда (мәсәлән, бала табыу, операция) ошо хаҡта ғаилә хеҙмәтенә хәбәр итергә, дауаханаға ятыу көнөн билдәләргә һәм белгес менән артабан эш итеү тәртибен һөйләшеп килешергә кәрәк. Баланы социаль үҙәккә ваҡытлыса урынлаштырырға мөмкин. Үҙәк тәүлек әйләнәһенә һәм бушлай эшләй.

Социаль үҙәктә йәшәгән осорҙа дәүләт баланы биш тапҡыр ашатыуҙы тәьмин итә, мәктәпкә йөрөү туҡтатылмай. Ата-әсә һәр ваҡыт бала менән телефон аша һөйләшә ала. Балалар социаль үҙәгенә 3 йәштән 18 йәшкә тиклемге балалар урынлаштырыла. 3 йәшкәсә балаларҙы ваҡытлыса Сабыйҙар йортона урынлаштырырға мөмкин. Дауаханадан сыҡҡас, ата-әсә балаһын өҫтәмә рөхсәт һәм документтар йыймайынса өйөнә алып ҡайта ала. Бер нисә көнгә ҡайҙалыр барырға кәрәк булғанда ла шулай эшләнә.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡартлыҡ склерозы

❖ 50 грамм киптерелгән андыҙ тамырына 0,5 литр араҡы ҡойоп, 2-3 аҙна төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр балғалаҡ эсергә. Бер курс өсөн 1-1,5 литр шундай төнәтмә кәрәк була. Шунан дауаланыуҙы туҡтатып тороп, тағы ҡабатларға.

### Диабет

❖ Был ауырыу менән яфаланғанда ябай сәй урынына болон туҡранбашынан (клевер луговой) әҙерләнгәнен эсеүҙе ғәҙәт итергә кәрәк. Уны 1 стакан ҡайнар һыуға 2-3 киптерелгән болон туҡранбашы сәскәһен һалып әҙерләргә.

❖ Шәкәр диабеты булғанда көнөнә 1 стакан лимон һутын бер нисәгә бүлеп ҡулланырға кәңәш ителә.

### Ревматоидлы артрит

❖ Мүшмел ағасының (кизил) 1 балғалаҡ тамырына 1 стакан һыу ҡойоп ҡайнатырға, 2 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне ревматизм, ревматоидлы артрит ауырыуҙарынан 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Әммә ашҡаҙан сей яраһы, бөйөр сирҙәре булғанда һаҡ ҡулланырға кәрәк.

### Инсульт

❖ Әрем үләненән һут һәм балды бер тигеҙ күләмдә алып ҡушырға. Көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсергә.

### Йөрәк аритмияһы

❖ Йөрәк ритмы боҙолған осраҡта 2 ҡалаҡ ваҡланған шалҡанға 1 стакан тулы һыу ҡойоп, талғын утта 15 минут ҡайнатырға, шунан 20-30 минут үтҡәс, һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Бынын өсөн көндең икенсе яртыһында тағы берҙе ҡайнатып алырға кәрәк.

### Иммунитет

❖ 100 грамм бойҙайҙы йыуып, аҙ ғына һыуҙа 2-3 сәғәт ебетергә һәм салфетка ярҙамында киптереп, ит турағыста тартырға. Шуға 1-әр ҡалаҡ бал һәм ҡаймаҡ (һөт йәки һөт өҫтө булһа ла ярай) ҡушырға. Килеп сыҡҡан дауаны иртәнсәк ас ҡарынға ашарға. Был рәүешлә бер ай туҡланырға. Дөйөм сәләмәтлекте яҡшыртыуҙан тыш, эсәктәрҙең эшмәкәрлеге лә яйға һалыныр.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Элек ағас төрлө аш-һыу кәрәк-ярағын эшләүгә тотонолған. Уның араһында иген, он иләү һәм ҡамыр баҫыу өсөн бөтөн әҙерләмәнән соҡоп яһалған оҙонсараҡ һауыттар - һелкеүес йәки йылпыуыстар, бер бөтөн ағастан һәм ҡайсаҡ йылан башын хәтерләткән тотҡалы һоҫҡо, ҡашыҡ (поварешка), һалма һоҫҡос (ҡашыҡ сумары ла тиҙәр), сүмес, ижау, киле һәм башҡа әйберҙәр булған. XIX быуат аҙағы - XX быуат башында һелкеүес, ҡашыҡ, киле һ.б. кеүек айырым кәрәк-яраҡтарҙы эшләү буйынса махсуслашыу күҙәтелгән.



*Сүмес. ВЭМ фондынан*



*Он һелкеүес һәм аҙыҡ-түлек һаҡлау өсөн соҡоп яһалған тәпәндәр. Ғафури районы, 1981 йыл. Т.К. Сурина фотоһы*



*Ағас тамырынан шәкәр онтағыс. МАЭ фондынан (Өфө ҡалаһы). Т.К. Сурина фотоһы*



*Ағас ялғаш һәм һоҫҡо. Архангел районы, 1975 йыл. И.Ф. Кибальник һүрәте*



*Һырланған киле. Архангел районы, 1970 йыл. Автор фотоһы*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# РЕСПУБЛИКАҒА ТАРАЛДЫ

**Гәзит уҡыусылар, минеңсә, ике төргә бүленә. Беренселәре - даими алдырғандар. Икенселәре - ҡыҙыҡһыныусылар. Тәүгеләренең исемдәре үк әйтеп тороуынса, улар баҫманы уҡып ҡына ҡалмай, ә йөкмәткеһендә барған үҙгәрештәрҙә мөмкин тиклем ҡатнашырға, үҙ фекерен еткерергә тырыша. Икенселәре үҙ ҡыҙыҡһыныуын ҡандырырға теләгәнлектән, баҫманың исемен тәү тапҡыр ишетеү менән уға яҙыла.**

"Киске Өфө" менән дә шулай булды. Баш ҡала гәзите булараҡ барлыҡҡа килгән баҫма бар республикаға таралды ла китте. Мин үҙемде 20 йәшлек "Киске Өфө" гәзите уҡыусылары араһында тәүгеләре иҫәбендә тип һанайым. Милләтебеҙҙең зыялылары ояһы булған баш ҡалабыҙ Өфөлә башҡортса гәзит булмауы хаҡында һүҙ бынан 40 йыллап элек үк күтәрелгәйне. Һүҙ күтәреү - бер, ә бына уны тормошҡа ашырырҙай кеше табыуы шундай уҡ мөһим мәсьәлә. Бының өсөн тәжрибәле журналист ҡына булыу етмәй, ә тормошто һәйбәт белгән, тирә-яҡта барған хәл-ваҡиғаны дөрөҫ төшөнгән, ойоштороу һәләтле белгес, штат теҙмәһен, финанс мәҙәләләрен аңлаған кеше табыуы ла еңел түгел. Эзотериктар әйтмешләй, һәр ваҡиғаның үҙ ваҡыты бар, ул кисә лә, иртәгә лә түгел, ә нәҡ бөгөн. Ә ана шул "бөгөнгө көн" килеп еткәс, республикала билдәле журналист, йәмәғәт эшмәкәре Гөлфиә Янбаеваға был эште ышанып тапшыралар. Миңә ҡалһа, ошондай һәр ир-аттың да ҡулынан килмәҫтәй ауыр, милләт өсөн уғата изге бурысты Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы бынан ике тиҫтә йыл элек үҙе теләп йөкмәне һәм бөгөнгә тиклем лайыҡлы күтәреп килә.

Халҡыбыҙҙа шундай әйтем бар: ашаған белмәй, тураған белә. Матбуғат өлкәһендә был, тәү сиратта, баш мөхәррир вазифаһына ҡағылалыр. Баҫманың йөкмәткеһен булдырыуҙан тыш, уның коллективын да йыйып алырға кәрәк бит әле. Ә улары иһә республика журналистикаһының иң-индәре, илһөйәрҙәре, тарихыбыҙҙы, йола, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе белгән-аңлаған булырға тейеш. Ике тиҫтә йыл арауығы күрһәтеүенсә, баҫма был бурыстарҙы үтәне һәм иң мөһиме, баш мөхәррир үҙ тирәһенә ҡәләме бар фекерҙәштәрен йыйҙы. Шул уҡ ваҡытта шундай ҡәтғи талап та формалашты: һәр журналист та "Киске Өфө" гәзитендә эшләй алмай. Сөнки баҫманың йөкмәткеһе башҡаларҙан ҡырҡа айырыла. Юбилярғәзит коллективы халҡыбыҙҙың тағы бер аҫыл мәҡәленә тоғро ҡала: атаңдың ғына улы булма, халҡыңдың да улы бул. Башҡа баҫмаларҙа, социаль селтәрҙәрҙә яҡтыртылған темаларҙы ҡабатлауҙан ни файҙа, халҡыбыҙҙы уятырлыҡ, милли рухта тәрбиәләрлек мәҡәләләр булмаһа. Бына ошо яғы менән үҙенсәлекле "Киске Өфө" гәзите. Ул башҡорттарға арналған материалдарҙы ғына түгел, ә үҙ тыуған телебеҙҙә донъя кимәлендә билдәле шәхестәрҙең фекерҙәрен, тәрбиәүи мәҡәләләрен дә тәҡдим итеп, күңелдәрҙе лә, донъяға ҡараштарҙы ла байытты һәм киңәйтте.

Өфө милли зыялыларыбыҙ йыйылған үҙәк тип әйтеп үткәйнем, ләкин баш ҡалабыҙҙың башҡортса төп баҫмаһында уларҙың исемдәрен осратыу, мәҡәләләрен күреү бик һирәк күренеш. Телдәр тураһында закон ҡабул ителгәнсе был турала уларҙың да мәҡәләләре күп баҫылды, ә ул тормошҡа ашыу менән шымып ҡалынды, әйтерһең дә, закон үҙен үҙе эшләтә. "Киске Өфө" гәзите атҡаҙанған, халыҡ эшмәкәре исемен йөрөтөүселәрҙең, күп һанлы башҡа дәүләт наградалары менән бүләкләнеүсе һәм башҡа зыялыларыбыҙҙың тирә-яҡта барған хәлдәргә үҙ фекерен асыҡ белдереү трибунаһы булды, булып ҡала. Ә бөгөнгө фекерҙәр буталған, донъялар боларған мәлдә уларҙың ошо трибунаға яҡынлауы, үҙ аҡылын, кәңәшен еткереүе үтә лә мөһим бит.

"Киске Өфө" гәзите тураһында күп яҙырға мөмкин, сөнки мин 20 йыл буйы сығып килгән баҫманың үҫешен үҙ күҙҙәрем менән күрҙем һәм һуңғы йылдарҙа уның "әсәһе" Гөлфиә Гәрәй ҡыҙының алдан күрә белеүенә тағы бер тапҡыр инандым. Мәҫәлән, баҫма сыға башлау менән күптәр исемен үҙгәртергә саҡырып, "Вечерняя Уфа" гәзитенең дубляжы тип аңларҙар тип хафаланды. Ваҡыт баш мөхәррирҙең хаҡлы булыуын иҫбатланы һәм гәзит беҙҙең, уҡыусыларҙың күңелендә "Киске Өфө" тигән атамаһы менән ныҡлап инеп урынлашты. Тағы шуныһы мөһим: бынан 20 йыл элек "Киске Өфө" аҙнаһына бер тапҡыр ҡалын гәзит булып сыға башланы. Ә хәҙер, ҡарағыҙ, район-ҡала гәзиттәре лә шул уҡ форматҡа күсте, өлгө алырҙай кешең булғас, шулай инде. Үҙ уҡыусылары, үҙ фекере, үҙ йүнәлеше булған баҫмаға уңыштар, уҡыусылар һәм авторҙар теләп,

**Мәләүездән**
**Сәйфулла ӘМИРОВ.**



# КИЛӘСӘКТЕ ЛӘ ҠАЙҒЫРТА...

**Тарихын онотмаған, бөгөнгөһөнә иғтибарлы булған һәм киләсәген ҡайғыртҡан илдең йәшәү дәүере оҙайлы була. Ошо уҡ фекерҙе гәзиткә ҡарата ла әйтеп булалыр, моғайын. Республикала тап ошондай баҫмаларҙың береһе - "Киске Өфө" гәзите. Гәзит үҙенең биттәрендә тарихҡа ҙур урын бүлә, әлеге мәлдәге йәшәйеште лә әүҙем яҡтырта, киләсәгебеҙ булған балаларыбыҙ һәм йәштәребеҙ хаҡында ла онотмай. Ғөмүмән алғанда, баҫмалағы һәр мәҡәлә, мәғлүмәт үҙ урынында, үҙ ваҡытында бирелә бара. Был, һис шикһеҙ, уға ҙур баһа өҫтәй.**

Гәзит донъя күрә башлаған ваҡыттарҙа балалар тураһында яҙылған мәҡәлә геройҙары бөгөнгө көндә йәштәр ҡорона инеп, оло тормош юлына аяҡ баҫҡан кешеләр. Ә бынан ике тиҫтә йылдар элек үҙҙәренең уй-фекерҙәре, хыялдары менән уртаҡлашып, гәзиткә әңгәмәләр биргән йәштәребеҙ иһә хәҙер инде республиканың ныҡлы таянысы, ышанысы. 20 йыл кеше өсөн дә әллә күпме ғүмер, ә гәзит өсөн әйтеп тә тораһы түгел. Ошо йылдар эсендә "Киске Өфө" әллә күпме кеше өсөн ышаныслы дуҫ һәм кәңәшсегә әйләнде.

Баҫмалағы мәҡәләләр үҙенең күп төрлөлөгө менән генә иғтибарҙы йәлеп итеп ҡалмай, ә уларҙың төплөлөгө менән күңелгә инеп ултыра. Әңгәмә булһынмы ул, берәй сара тураһындағы мәҡәләме, шиғыр йәки хикәйәме, баҡсаға кәңәшме, хатта кинәйәле әйберме - береһе лә буш ҡыуыҡ түгел, һәр береһе гәзит уҡыусы өсөн әһәмиәтле.

"Тарихнамә" рубрикаһы аша тыуған еребеҙ тураһында, баш ҡала хаҡында иҫ киткес күп мәғлүмәт белдем ошо йылдар эсендә. Шулай уҡ башҡорттоң арҙаҡлы улдары тураһында мәҡәләләр оло хазинаға тиң, ҡайта-ҡайта уҡыйым, уҡыған һайын үҙем өсөн яңылыҡ табам.

Баш ҡалала тыуып үҫкәндәр менән әңгәмәләрҙе лә ратып уҡыным, шулай уҡ "Өфө ҡунағы" тигән рубрика менән сыҡҡан мәҡәләләр ҙә ҡыҙыҡлы. Эшҡыуарҙар, табиптар, уҡытыусылар, сәнғәт кешеләре, фермер һәм башҡа һөнәр эйәләре - береһен дә күҙ уңынан ысҡындырмайынса, улар хаҡында ике тиҫтә йыл мәҡәләләр биреп бара гәзит. Хеҙмәт кешеһен күрә белеү, уның эше, тормошо, уй-тойғолары менән ҡыҙыҡһыныу бик мәслихәт күренеш, был йәһәттән "Киске Өфө"гә һүҙ тейҙерерлек түгел.

Милләтебеҙ өсөн күп эштәр башҡара баҫма. Башҡорттоң арҙаҡлы ул-ҡыҙҙары тураһында ла яҙа, тәбиғәтебеҙҙе лә телдән ысҡындырмай, баш ҡала тураһында ла йөкмәткеле мәғлүмәт бирә бара. Телебеҙ, тарихыбыҙ, ғөрөф-ғәҙәт һәм йолаларыбыҙға бүлгән иғтибары айырым маҡтауға лайыҡ. Халҡыбыҙ ошондай баҫмаһы булыуы менән бик бәхетле. Баҫма үҙенең уҡыусыһын күтәрә, баһалай белә, иғтибар үҙәгенән төшөрмәй, һәр мәртәбәле күренеште күреп, күтәреп ала белә. Беҙгә лә, гәзит уҡыусыларға, уға таяныс булып, баҫмаға яҙылып, уны күтәрмәләп торорға кәрәк, сөнки "Киске Өфө" - ысын мәғәнәһендә халыҡ гәзите.

**Рәсүл КИНЙӘБУЛАТОВ.**

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН



## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Икенсе бүлек. Бронза быуаты.

Арҡайым ишендәге ҡаласыҡ-ҡәлғәләрҙең Һынташты тибындағы ҡәберлектәр менән тығыҙ бәйләнеше булыуы асыҡланды, был ҡомартҡылар бронза эпохаһының Көньяҡ Урал өсөн көтөлмәгән материалдарын бирҙе. Ҡәберлектәрҙә ике тәгәрмәсле боевой арбалары (колесницалары) менән ерләнгән яугирҙарҙың ҡалдыҡтары табылды, был уларҙан ҡалған асыҡ эҙҙәрҙең гипс күсермәләрен (отпечатокта-рын) яһау мөмкинлеген бирҙе. Тәгәрмәстәрҙең диаметры 1-1,2 м, көпсәктәр араһы 1,2-1,4 м. Уҡыусыбыҙ китабыбыҙҙың беренсе бүлегендә бирелгән мәғлүмәттәр аша Көньяҡ Уралда ике тәгәрмәсле арбаларҙың тәүләп б.э. тиклем III-II мең йыллыҡтар арауығында ҡулланыла башлауын, Һынташты арбаларының иртә металл эпохаһына ҡараған Шумаев ҡурғандарында табылғандарын (Ырымбур өлкәһе) камиллаштырыу менән бәйле булыуын белә.

Мәйеттәрҙе тәрәнлеге 1,2-1,5 метрға еткән, 4х2,5 метр үлсәмле дүрт мөйөшлө ҡәберҙәрҙә ерләгәндәр. Бынан башҡа уларҙа ат ҡалдыҡтары ла күп осрай. Ҡәберҙәр ер ҡатламының ул замандағы кимәлендә арҡырыға ағас ярҡалар йә иһә бүрәнә менән ҡапланған, ҡағиҙә булараҡ, япмаға ҡабырғаларына яткырылған ат түшкәләре (һөлдәләре) һалынған. Үлгәндәр эргәһенә 7-гә тиклем ат ҡәүҙәһе ҡуйылған осраҡтар бар. Уларҙың ҡайһылары ҡәбер янындағы һай ғына соҡорҙарға күмелгән. Һис шикһеҙ, улар махсус рәүештә һуйылып һалынған. Тотош мал түшкәләренән башҡа, ҡәбер эсенә лә, уның өҫкө өлөшөнә лә тиҫтәләгән ат, һыйыр, һарыҡтарҙың баштарын, тирәләрен һәм аяҡтарын ритуаль ерләү башҡарылған. Ҡорбанға салынған ат, туҡал үгеҙ, һарыҡ тәкәләре һөйәктәре ҡәберҙәр араһында махсус рәүештә ҡаҙылған һай ғына соҡорҙарға өйөм-өйөм итеп һалынған.

Атап үтелгән типтағы ҡәберлек материалдары андронов ҡәбиләләренең ҡатмарлы матди һәм рухи донъяһын тулыраҡ күҙ алдына килтерергә ярҙам итә. Улар андроновсыларҙың малсылыҡ хужалығының шундай юғары кимәлгә етеүен дәлилләй: аҙыҡ-түлек менән тулыһынса тәьмин итеүҙән башҡа ерләү йолаларын үтәү өсөн үлгәндәр хөрмәтенә күпләп йылҡы, һыйыр, үгеҙ һәм һарыҡ малы ҡорбан ителә алған. Ошо малдарҙың һуңғы өсәүһе, күрәһең, ерләү процессияһында ҡатнашыусыларҙы һәм үлгән кеше йәндәрен ризыҡ менән тәьмин итеү маҡсатында ҡорбан ителһә, ат кешенең ерҙәге генә түгел, ә теге донъялағы тормошоноң да алыштырғыһыҙ бер өлөшө итеп ҡарала. Тарихтың барса артабанғы осорҙарында, һуң урта быуаттарға тиклем үк (XII-XIV б.б.), Евразия далаларында, шул иҫәптән Көньяҡ Уралда ла, малсылыҡ менән шөғөлләнеүселәрҙең ҡәберлектәрендә ат булыуы массовый, йәғни тәбиғи күренешкә әйләнһә, андронов ҡәбиләләре ҡурғандарында был иң тәүгеләренән булараҡ теркәлә. Аттың күскенселәр тормошонда һәр заманда ла кешенең юлдашы итеп ҡабул ителеүе күп кенә халыҡтарҙа үҙгәрешһеҙ ҡала. Быға боронғо дәүерҙәрҙә һәм урта быуаттарҙа йәшәгән авторҙарҙың мәғлүмәттәре бик асыҡ дәлил булып тора. Бына, мәҫәлән, 921-922 йылдарҙа Көньяҡ Урал далалары аша Волга Болғарияһына сәйәхәт иткән ғәрәп илселеге сәркәтибе Ибн Фаҙлан башҡорттарҙың яҡын күршеһе булған угыҙҙарҙың холоҡ-йолалары хаҡында билдәле бер мәғлүмәт теркәп ҡалдыра. Ул угыҙ кешеһен ерләгән саҡта уны аты менән бергә күмеп, ошолай тип әйтеүҙәре хаҡында яҙа: "Былар унын аттары, ул ошо аттарҙа ожмахҡа барасаҡ". Сәйәхәтсе йәнә ошондай мәғлүмәт бирә. Ҡайһы бер саҡта угыҙ кешеһен атһыҙ ерләйҙәр (күрәһең, һүҙ ярлы угыҙ хаҡында бара), шунан һуң аҡһаҡалдарҙың береһе ерләнгән кешенең иптәштәренең аттарында алға сабып китеүе, ә быныһының уларҙы ҡыуып етә алмауы хаҡында зарланыуын төшөндә күреүен белдерә. Аҡһаҡалдар, ошо төштә нисек юрау хаҡында һөйләшкәс, үлгән кеше хөрмәтенә ат һуйырға ҡарар итә: ҡорбан ителгән аттың итен ашайҙар, тиреһен, башын, ҡойроғон һәм дүрт аяғын ерләнгән кешенең ҡәбере өҫтөнә йәйеп һалалар. Х быуат авторының әле килтерелгән мәғлүмәте Евразия күскенселәренең барса археологик эпохаларында йәшәүселәрҙә, шул иҫәптән андронов мәҙәниәте ҡәбиләләренә лә ҡағыла.




*Карта №2. Көньяҡ Уралда бронза эпохаһының "ҡалалар иле" ҡәлғәләре картаһы (Г.Б. Зданович буйынса). 1 - Степное, 2 - Черноречье, 3 - Устье, 4 - Чекотай, 5 - Куйсак, 6 - Сарым-Саклы, 7 - Родники, 8 - Исиней, 9 - Ҡыҙыл, 10 - Арҡайым, 11 - Коноплянка, 12 - Журумбай, 13 - Ольгинское, 14 - Камысты, 15 - Һынташты (Синташта), 16 - Һынташты-II (Синташта-II), 17 - Андреевское, 18 - Аландское, 19 - Берсуат, 20 - Шөкөртау (Шикуртау), 21 - Бахта, 22 - Париж, 23 - Улак-1.*

Бронза эпохаһындағы Көньяҡ Урал халҡы мәҙәниәтенең формалашыу үҙенсәлектәрен асыҡлау йәһәтенән андронов ҡәбиләләре материалдарынан түбәндәге факттар иғтибарға лайыҡ. Күп кенә осраҡтарҙа (мәҫәлән, Берлик ҡурғандары) ҡәбер стеналары аҫтан өҫкә тиклем яндырылмаған кирбес менән көпләнеп, аҙаҡтан балсыҡ менән һыланған була. Ошондай кирбес стенаның ҡалынлығы 10-15 см тәшкил итә. Әгәр ҡәбер эсендә ҡоролманы һәр саҡта ла билдәле бер төркөм кешеләренә хас булған торлаҡ символы икәнлеген иҫәпкә алһаҡ, ерләү йолаһының әле һүҙ барған деталенең саман өйҙәр һалыу традицион булған этник мөхиттә барлыҡҡа килеүен раҫлап була. Был андронов мәҙәниәтенең формалашыуында көньяҡ сығышлы (Көньяҡ Ҡаҙағстан, Урта Азия) ҡәбиләләрҙең әүҙем ҡатнашыуына тағы ла бер дәлил булып тора.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

*УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ*

# СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУҘАРҒА...

## яуап биреүсе лә ул



**"Киске Өфө" гәзите 20 йыл эсендә халҡыбыҙ яҙмышына ҡағылған сетерекле һорауҙарға яуап биреүсе баҫма булып әүерелде. Был баҫманы уҡып, һәр бер кеше үҙенә рухи аҙыҡ таба ала.**

Бик күп милләттәштәребеҙ яратып уҡыған был гәзит бай һәм киң мәғлүмәтле, төплө һәм тос фекерле, милли рухыбыҙҙы, динебеҙҙе тергеҙеү буйынса ла баһалап бөткөһөҙ эштәр башҡара. Гәзиттә ниндәй генә тармаҡтар буйынса мәғлүмәт бирелмәһен, уларҙың һәр ҡайһыһында уҡыусы иғтибарын йәлеп иткән ҡыҙыҡлы фекерҙәр, файҙалы кәңәштәр, уйланырлыҡ һығымталар табып була. Бигерәк тә башҡорт халҡының үткәнен, бөгөнгөһөн һәм киләсәген яҡтыртҡан мәҡәләләр һәр кем өсөн фәһемле.

Гәзиттә баҫылған мәғлүмәттәр халҡыбыҙҙың дауамы булырлыҡ йәш быуынды тәрбиәләүгә нигеҙ булып тора. Был гәзиткә һәр мәктәп, һәр уҡыу йорто, милләтебеҙ яҙмышы өсөн борсолған һәр кеше яҙылырға һәм уны һәр кем уҡырға тейеш.

Яраткан гәзитебеҙҙе 20 йәшлек юбилейы менән ихлас күңелдән ҡотлап, уға киләсәктә лә башҡорт халҡының тоғро дуҫы, юлдашы булып ҡалыуын теләйек.

**Мәүлит КӘРИМИ,**
**Рәсәй һәм Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

26 сентябрҙә 21 сәғәттә 58-се гв. атлы полкының 4-се эскадроны йылға аша сыға башлай. Яугирҙар, десант паромын (дөрәҫерәге, ҙур һалды) Кәкре Йылғасыҡ (Кривая Речка) күленә алып килеп, һыуға төшөрә, байтағы ошо һалға тейәлешеп, хәүефле юлға сыға. Беренсе десантты комдив урынбаҫары, гв. полковнигы Ә.Ә. Фаварисов, 58-се полк командиры, гв. подполковнигы Т.Т. Кусимов оҙатып ҡала. Маршрут: Кәкре Йылғасыҡ - Днепрға илтеүсе ҡул тармағы (иҫке үҙән) - Днепр. Десант составында 100 яугир булып, улар 4 станковый пулемет, танкыға ҡаршы ата торған 6 мылтыҡ менән ҡораллана. Десанттың төп өлөшө оло һалда, ҡалғандары, төркөмдәргә бүленеп, кәмәләрҙә һәм ваҡ һалдарҙа бара.

Йылғаға килеп еткәс, көслө ағым һалдарҙы һәм кәмәләрҙе бер-береһенән алыҫ ҡына араға ағыҙып алып китә. Гв. лейтенанты Е.Ф. Манахов взводы һәм Әбдрәүф Дәүләтовтың пулемет взводының кәмәләре йылғаның һай ерендә уң ярҙан 40-50 метрҙа ҡомға ултыра. Евгений Манахов, тиҙ генә кәмәнән һыуға төшөп, башҡаларға үҙе артынан барырға әмер бирә. Днепрҙың көҙгө һалҡын һыуы үҙәктәргә үтә, яугирҙарҙы ел ҡуҙғатҡан йылға тулҡындары ҡойондора, әммә улар ярға табан барыуын дауам итә.

Йылға өҫтөндә ишкәк һәм оҙон көртәләрҙең ара-тирә һыуҙы сайпылдырған тауыштарын шәйләп ҡалып, немецтарҙың уң яҡ ярҙағы һаҡ төркөмдәре пулеметтарҙан ут аса, уларҙың яҡтыртҡыс ракеталары, төн ҡараңғылығын ярып, һауаға оса.

Төн уртаһында яугирҙарыбыҙҙың төп һалы ярға килеп терәлә, беҙҙең десант немецтарҙың яр буйындағы нығытмаларына һөжүм итә. Көслө ағым ваҡ һалдарҙы һәм кәмәләрҙе түбәнгәрәк алып китһә лә, улары ла ярға имен-аман килеп етә. Пулемет взводы командиры, кесе лейтенант Петр Федотов, пулеметсылар Әшрәф Мөхәтдинов һәм Ғәйфулла Ғәбитовтар станковый пулеметтарын, патрон ҡаптарын ярға алып сыға, төн ҡараңғылыында уң яҡ яр башынан бер туктамай ата башлаған немец пулеметтары көбәктәренән сыҡҡан ут-ялҡын тарафына тоҫҡап, үҙҙәре лә ут аса.

Шул арала Әбдерәүф Дәүләтовтың пулемет взводы, лейтенант Евгений Манаховтың сабельниктар взводы ла ярға килеп сыға. Эскадрон командиры уларға немец позицияларына ташланырға бойороҡ бирә. Һәр бер яугир, ҡоро ергә аяҡ баҫыу менән, ажарланып алышҡа инә, немецтар өҫтөнә автоматтарынан пуля яуҙыра, йә бында, йә тегендә дошман окоптарында гранаталар шартлап ярыла. Ҡурҡыу белмәҫ гвардеецтарҙың атакаһы аяуһыҙ була, дошман позицияларында паника башлана. Һөйөклө командирҙары, генерал Миңлеғәли Шаймуратовтың батырҙарса һәләк булыуына, дивизияның исеме үҙгәртелеүенә инде ярты йылдан ашыу ваҡыт үтһә лә, 16-сы гвардия атлы дивизияһының күп милләтле яугирҙары башҡорт шаймуратовсыларының боевой рухына тоғро ҡала, үлемесле яу ҡырҙарында дан ҡаҙана.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**"Киске Өфө" гәзитенең 20 йыллыҡ архивы гәйәт бай: мәғлүмәткә, аҡылға, тарихи факттарға, фекерҙәргә, тәрбиә мәктәбе һабаҡтарына, тәжрибәгә. Ҡайһы саҡта беҙ ҡайта-ҡайта шул архив материалдарындағы темаларға мөрәжәғәт итәбеҙ, уларҙы тағы уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ. Шуныһына инанғанбыҙ: гәзитебеҙҙә бынан 20 йыл элек, 15 йыл элек баҫылған материалдар бөгөн дә актуаль. Был ни өсөн шулаймы? Сөнки "Киске Өфө" мәңгелек ҡиммәттәр, халҡыбыҙҙың аҫыл аҡылы, меңәр йылдар һынalған тәжрибәһе тураһында яҙыуҙы дауам итә. Мәҫәлән, башҡа бер баҫмала ла булмаған "Диалог" рубрикаһында танылған шәхестәребеҙҙең рухиәтебеҙ, йәшәйешебеҙ, милләт киләсәге, милли идеяһы тураһындағы иң аҫыл һүҙҙәре, аҫыл аҡылы, сәмебеҙгә тейер, гәмебеҙҙе уятыр фекерҙәре әйтелә килә. Ҡайһы бер фекерҙәргә күҙ һалып китәйек.**

# ФӘН - АҠЫЛ ҠАҘНАҺЫ,

### ул йәмғиәттең, дәүләттең интеллектуаль кимәлен билдәләй

*(2004, №15).*

**Әңгәмәлә Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы, профессор Ғайса Хөсәйенов менән тарих фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университеты профессоры, академик Нияз Мәжитов ҡатнаша.**

**Ниндәй фәндәргә яҡынырaҡ килеү халыҡтың ғүмерен оҙайта ала тип иҫәпләйһегеҙ?**

**Ғайса Хөсәйенов:** Иң беренсеһе, этногенез. Беҙ үҙебеҙҙең тамырҙы аныҡ билдәләргә тейешбеҙ. Салауат Ғәләмов "Урал батыр" эпосына 4 мең йыл" тип әйтә-әйтеүен, әммә иң тәүҙә халыҡтың шул саҡта йәшәгәнен иҫбат итергә кәрәк. Халыҡтың ғүмерле булыуы өсөн тарих менән диндән дә ҡулайлы сараларҙы әле кешелек уйлап сығармаған.

**Нияз Мәжитов:** Беҙгә иң беренсе тормош шарттарын яҡшыртаһы бар, ул тормош фәне тип атала. Тормош фәне йәшәй белеү тигәнде аңлата. Голландиянан миңә бер башҡорт ҡатыны өс йыл буйына хат яҙа. Ул унда 25 йыл буйы йәшәй икән. Бәхетиһен, ул ханым яҙыуынса, голланд халҡы хәҙер тотошлайы менән дәррәү рәүештә нәҫел-ырыу, милләт шәжәрәһе менән ҡыҙыҡһына башлаған. Был хәлде милләттәшебеҙ тормош шарттарының яҡшырыуы менән аңлата. Уның һүҙҙәрендә бик тәрән хәҡиҡәт ята. Ысынлап та, кешенең йәшәгән, белеме артҡан һайын, үҙенең тарихын өйрәнергә теләге, мөмкинлектәре күбәйә. Ошо хәл быға тиклем нәҫеле, халҡы тамырҙары тураһында уйлап та ҡарамаған башҡорт кешеһендә үҙ сығышына ҡарата ҡыҙыҡһыныу тойғоһо уятҡан. Ул башҡорттар хаҡында күберәк мәғлүмәт белгеһе килеп, мине эҙләп тапҡан булып сыҡты.

**Ғайса Хөсәйенов:** Милли интеллигенция халыҡтың абруйын күтәрергә, ҙурлығын иҫбат итергә бурыслы. Халыҡтың милли аңын үҫтереү, рухын һаҡлау өсөн милләт ғалимдары уның тарихын, мәҙәниәтен ентекле өйрәнеп, дөйөм кешелек цивилизацияһындағы ролен билдәләргә тейеш. Халҡыбыҙҙың киләсәген тәьмин итеүҙә лә фән күп нәмә эшләй ала. Сәйәсәт бөгөн бер төрлө, иртәгә икенсегә үҙгәрә, ә фән нигеҙҙәре, аҫылы үҙгәрешһеҙ ҡала. Шулай булыуы менән дә ул ҡиммәт. Милли аң, милли рух йәшәтә һәм ҡиммәтле итә милләтте.

# АЙҒА КҮСЕП КИТӘ АЛМАЙБЫҘ,

### тимәк, заман ҡуйған шарттарға ҡулайлашырға һәм үҙ урыныбыҙҙы билдәләргә генә ҡала

*(2005 йыл, №48).*

**Иҡтисад фәндәре докторҙары - академик, профессор Мазһар Иҫәнбаев һәм РФ Президенты эргәһендәге Дәүләт хеҙмәте академияһы профессоры Хәлил Барлыбаев менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**Теләйбеҙме-юҡмы, үҙенең барлыҡ ысынбарлығы менән "капитализм" тип атаған ҡоролош алдыбыҙға баҫты. Ул ҡоролоштоң ҡанундарын ҡабул иткәндәр, уға яраҡлашҡандар ғына йәшәй аласаҡ, тимәк...**

**Мазһар Иҫәнбаев:** Был уй мине көнө-төнө, бер туктауһыҙ борсой. Беҙ ошо ерҙә йәшәгәс, Айға күсеп китә алмайбыҙ. Шулай булғас, заман ҡуйған шарттарға яраҡлашырға һәм яңы шарттарҙа үҙебеҙҙең урыныбыҙҙы билдәләргә тейешбеҙ. Тик дөйөғош ҡына ҡомға башын тығып, кешеләр күҙенән йәшенергә маташа, әммә уның барлыҡ күҙәһе күренеп тора. Киләсәкте кем әүҙем, кем инициативалы, улар юғалып ҡалмаясаҡ. Ике йыл элек Баймаҡ районының Ниғмәт ауылындағы туғандарыбыҙҙа ҡунаҡта ултырғанда бер туғаным ауылда эш булмауына, йәштәрҙең эсеүенә, уҙ-ара һуғышыуына зарланып алды. Мин уға: "Хоҙай һеҙгә бөтәһен дә биргән: бына ята урман, сәсеүлектәр, көтөүлектәр, сабынлыҡтар, һаҡмар йылғаһы аға... Доноп ятҡан Һаҡмар туғайҙарында кәбеҫтәне лә, кишерҙе лә, сөгөлдөрҙө лә, һуғанды ла үҫтереп була. Һеҙ бит уларҙы Сибайҙан, Магниттан ташыйһығыҙ. Һеҙ, киреһенсә, ошоларҙы бында үҫтереп, Сибай, Магнит баҙарҙарына сығарырға тейешһегеҙ. Ә һеҙ эш юҡ, тип әйтәһегеҙ..." - тип әйтергә тура килде уға. Тик беҙҙекеләр ғәмһеҙ, вайымһыҙ, колхоз бөткәс, йәшәү ҙә туктаны, тип тик ултыра.

**Хәлил Барлыбаев:** Тәбиғәттә булған тәбиғи һайлап алыу хәҙер йәмғиәттә лә буласаҡ. Был осраҡта күп һәм тырышып уҡыған, айыҡ тормош алып барған, ныҡышмалы һәм егәрле эшләгән кеше генә уңышҡа өлгәшәсәк. Башҡаса юл юҡ. Алдынғы илдәрҙә йәшәүселәрҙең бөтәһе лә шулай итә.

Минең бер дуҫтың аграр университетты бөткән улы үткән йыл йәй Германиялағы бер хәлле фермер хужалығында өс ай контракт буйынса эшләп, немец теле буйынса стажировка үтеп, аҙмы-күпме аҡса эшләп ҡайтты. Теге фермер был егетте бер ялһыҙ, һәр көн иртәнге сәғәт 6-нан киске 9-ға тиклем үҙе менән бергә алып йөрөп эшләтеп, хәлдән тайҙырып ҡайтарған. Шул өс ай эсендә теге фермер 2-3 кис кенә күрше ҡалалағы театрға барып ҡайтҡан. Бына шулай ул Европалағы бай фермерҙарҙың тормошо.

# МИЛЛИ ФӘЛСӘФӘ НИГЕҘЕ,

### ул диндәме, әллә мифологияламы?

*(2004 йыл, №47)*

**Әңгәмәләш ҡунаҡтарыбыҙ - исемдәре республикабыҙҙа ярайһы уҡ таныш булған фекер эйәләре: тарихсы ғалим Салауат Ғәләмов менән яҙыусы һәм журналист Илгизәр Диҡҡәт.**

**Далала дауыл ҡупһа, барлыҡ тереклекте төбө-тамыры менән йолкоп, аҡтарып алып китә. Иң тәүҙә ел ыңғайына ҡамғаҡ тәгәрләй, артынса ҡалғандары эркелә. Тамырҙары тәрәндә булған имән генә дауылды тоймай, тик тороуын белә. Был хәл-күренеш тәбиғәттә ана шулай һүрәтләнә. Йәмғиәт һәм халыҡ тормошо ла даланың ошондай ҡотолғоһоҙ күренешенә оҡшаған. Замандың аяуһыҙ елдәре иҫә башлау менән күп халыҡтар, тормош даланынан юғалмаҫ өсөн, шул уҡ имән кеүек үҙенең тамырҙарына тотоноп һаҡланып ҡалырға тырыша. Тамырҙары бушағыраҡ булғандары дингә йәбешергә мәжбүр. Шулай түгелме?**

**Илгизәр Диҡҡәт:** Эйе. Байтаҡ халыҡтар дингә сытырман йәбеште. Тик был күренеш уларың тамыр бушаҡлығынан түгел, ә башта уҡ теге йәки был дин нигеҙендә халыҡ булып ойошоуынан. Быға миҫал итеп, мәҫәлән, үзбәктәрҙе, төрөктәрҙе килтереп була. Йәки Ислам динен ҡабул иткән болғарҙарҙан бөгөнгө татарҙар барлыҡҡа килгән, ә мосолман динен инҡар иткән өлөшө сыуаш булып ҡалған. Башҡорттар иһә Тәңре тәғлимәте нигеҙендә халыҡ булып ойошҡан. Боронғо динебеҙ онотолһа ла, ул йолаларыбыҙҙа, иждаыбыҙҙа, ғөмүмән, булмышыбыҙҙа һаҡланып килә. Шуға ла беҙ, башҡорттар, Ислам диненән алдараҡ рухи һәм тарихи ҡиммәттәребеҙҙе тергеҙеүҙән башланыҡ.

**Салауат Ғәләмов:** Беҙҙең милләт диндән дә иртәрәк барлыҡҡа килгән һәм, әйтәйек, Ислам дине йоғонтоһондағы тормош халҡыбыҙ ғүмеренең дүрттән бер өлөшөн генә тәшкил итә. Тимәк, халҡыбыҙҙы йәшәтеүсе ҡеҙрәт, идея, көс икенсе нәмәлә. Теләһә ниндәй халыҡтың милләт булып ойошҡанлығын күрһәтеүсе билдә - тарихтың теләһә ниндәй осрағында тиҙ генә ғәскәр төҙөй алыуы. Ғәскәр - ул бер үк ваҡытта дәүләтселек күрһәткесе лә булып тора. Башҡорттар Рәсәй өсөн кәрәк саҡта үҙаллы ғәскәр туплап, күп тапҡырҙар һәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашҡан, һуғышлары - XX быуат башында Әхмәтзәки Вәлиди төҙөгән Башҡорт ғәскәре һәм Бөйөк Ватан һуғышында барлыҡҡа килгән Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы. Ғәскәр төҙөй алыу дәүләт кимәлендәге аңдың үҫешеп етеүе хаҡында ла һөйләй бит.

**Илгизәр Диҡҡәт:** Башҡорттарҙың дәүләтселеге булмаған, тигән фекер бөгөнгө көндәрҙә лә ишетелеп ҡала. Тик, ысынлап та, Салауат әйткән ғәскәр төҙөү миҫалы ғына ла күп нәмә тураһында һөйләй. Байтаҡ дәүләт ҡоролоштарынан айырмалы рәүештә, дәүләтселегебеҙ милләтебеҙҙең ҡоролошонда уҡ - ирекле ырыуҙарҙың конфедерацияһы принцибында - йәшәп килгән. Шундай миҫал килтереп үтергә кәрәк - башҡорттар монгол ғәскәренә ҡаршы ун дүрт йыл һуғыша, байтаҡ яуҙарҙа еңеүгә ирешә. Монголдар ата-бабаларыбыҙ менән килешеү төҙөргә мәжбүр була. Монголдар аҙаҡтан хәйлә менән еңә, тик мәсьәлә икенселә - дәүләтселегебеҙ булмаһа, тырым-тырағай ырыуҙар үҙҙәрен яҡлай алмаҫтар ине. Миҫал өсөн әйтеп үтәйем - бөйөк империяны тәшкил иткән ҡытайҙар монголдар тарафынан ун ике йылда, Урта Азия - алты йылда, рус кенәзлектәренең төп өлөшө өс йылда баҫып алына.

# ҺАНДАР АРТЫНДА ХӘҠИҠӘТ БАР,

### ә ул хәҡиҡәт асылыбыҙҙа һәм... тарихи документтарҙа

**Башҡортостан Республикаһы Президенты хакимиәтенең ижтимағи-сәйәси үҫеш мәсьәләләре буйынса бүлек мөдире, философия фәндәре докторы Әмир Мырҙағәле улы Юлдашбаев менән Рәсәй Фәндәр Академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, сәйәси фәндәр докторы, профессор Илдус Ғөбәйҙулла улы Илешевтарҙың әңгәмәһе - халыҡ иҫәбен алыу сараһындағы ҡайһы бер хәҡиҡәт хаҡында.**

**Тарихтан күренеүенсә, Рәсәйҙә үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса башҡорттарҙың иң күп кәмегән йылдары 1897 һәм 1926 йылдар араuығына тура килә. Ошо осорға ниндәйерәк баһа бирергә мөмкин булыр ине?**

**И. Илешев:** 1897 йылғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса башҡорттар 1 млн 300 мең кеше тәшкил итә. Был һан революцияға тиклем үҙгәрешһеҙ килә лә, 1917-1920 йылдар арауығында халыҡ һаны 900 меңгә тиклем кәмей. Иң фажиғәлеһе - 1926 йылда, 713 мең кеше. Тимәк, 10 йыл эсендә башҡорттар яртылаш тиерлек кәмей. Халҡыбыҙҙың күпләп кәмеүенең сәбәптәре инҡилап осорондағы һәрби хәрәкәттәргә, аслыҡтан ҡырылыуға бәйле. Шулай уҡ Минзәлә, Бөгөлмә өйәҙҙәренең Татарстанға бирелеүе һөҙөмтәһендә тиҙ арала 200 меңләп башҡортто ассимиляцияға дусар итә.

**Ә. Юлдашбаев:** Вәлиди ғәскәре менән Силәбе тирәһендә йөрөгәндә бөтөн Башҡортостан ҡыҙылдар аҫтында була. Аҙаҡ аҡтар ҡулына күсә. Талау нимә ул? Үлтерәләр, көсләйҙәр, яндыралар, барлыҡ аттарҙы, һыйырҙарҙы алып китәләр. Артабан 21-се аслыҡ йылдары килә. Иген уңмай, ә малһыҙ ҡалған халыҡҡа ни эшләргә һуң? Ленин Дауыт Юлтыйға "Ниңә гел аслыҡ, кешеләрҙең гүр ҡаҙып, мәйет ашауы тураһында яҙаһығыҙ. Совет власының халыҡҡа нимә эшләүе тураһында яҙығыҙ!" тигән иҫкәрмә эшләй. Беҙҙең тарихсылар ҙа, яҙыусылар ҙа әле был мәсьәләләрҙе күтәрергә көсө етмәй. Документтарҙа аҡылдан яҙырлыҡ ҡот оскос факттар теркәлгән.

Ошо осорҙағы башҡорттарҙың тағы ла бер сәбәбе - ассимиляция. Минзәлә, Бөгөлмә, Боғорослан өйәҙҙәренең беҙҙән китеүе халҡыбыҙ тарихындағы иң ҙур юғалтыу тип әйтер инем мин.

# ЭТНОТУРИЗМ НИГЕҘЕНДӘ...

### "Урал батыр" бренды булырға тейеш

*(2014 йыл, №23).*

**БР Күсемһеҙ мәҙәни милек объекттарын һаҡлау һәм ҡулланыу буйынса ғилми производство үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин һәм БР Туриндустрия берлеге рәйесе урынбаҫары, "Урал батыр" милли туроператоры етәксеһе Кинйә Күскилдин һөйләшә.**

**Баҙар шарттарында туристик бизнесты үҫтереү өсөн дүрт төп шарт кәрәк тиҙәр: капитал, технологиялар, кадрҙар, ресурстар. Башҡортостанбыҙҙа быларҙың барыһы ла бар кеүек, тик ни өсөн беҙ һаман**

**да туризмды тейешле кимәлгә күтәреп, башҡорт донъяһын башҡаларға күрһәтә алмайбыҙ?**

**Данир ҒӘЙНУЛЛИН:** Туризм тейешле кимәлдә үҫешһен өсөн ошо шарттар, шул иҫәптән, объекттар ҙа кәрәк. Мәҫәлән, сит илгә сыҡһаң, унда диңгеҙҙән, тәбиғәттән, заманса отелдән тыш, төрлө боронғо ҡоропмдарға, археологик ҡомартҡыларға экскурсиялар бар. Тимәк, туризмда матур тәбиғәт менән генә туристарҙы йәлеп итеп булмай. Әлегә беҙҙә быңдай объекттар иҫәпле генә. Туристик объекттарҙы булдырыу - бөгөн төп мәсьәлә.

**Кинйә КҮСКИЛДИН:** Бөрйәнде генә алһаҡ, Шүлгәнташ мәмерйәһе үҙе бер уникаль урын. Йылҡысыҡҡан күлен күрһәтеп, уның легендаһын һөйләһәң - шулай уҡ фәһемле һәм ҡыҙыҡлы сәйәхәт килеп сыға. Халыҡ ижадына бәйле урындар ғына ла күпме, тик беҙ уларҙы күтәрә белмәйбеҙ. Мәҫәлән, революция һәм граждандар һуғышына бәйләп, Баймаҡ районының Темәс ауылын күрһәтергә булыр ине. Бәлки, был объекттарҙың барыһы ла башҡа милләттәргә, шул уҡ рус халҡына аңлашылмаҫ - быныһы икенсе мәсьәлә. Бер тапҡыр федераль баҫмалар журналистарын Темәскә алып барҙым. Музейҙа батша һалдаттарына һәнәк менән ынтылған кешеләрҙең һындары бар, шуларҙы күреп аптырағандарын тоям, әммә бер нәмә лә өндәшмәйҙәр. "Аңлайһығыҙмы, ни өсөн башҡорт халҡы бөгөн дә илһөйәр, ни өсөн үҙ ерен, ғөмүмән, бөтөн Рәсәйҙе ярата? - тип һорайым уларҙан. - Сөнки беҙ шулай тәрбиәләнгәнбеҙ. Еребеҙҙе баҫыусыларға ҡаршы көрәштә йәнебеҙ ҙә йәл түгел, ил, ер тойғоһо көслө беҙҙә".

**Данир ҒӘЙНУЛЛИН:** Объекттар бар ҙа, ләкин уларҙы туристар ҡабул итерлек хәлгә еткерергә кәрәк. Шул уҡ Шүлгәнташ мәмерйәһен алып ҡараһаҡ, йәйһеген унда көнөнә меңдән ашыу кеше килә. Ә мәмерйәнең микроклиматы ул тиклем халыҡ ағымын күтәрә алмай. Шуның өсөн дә уның тирәһендә яңы музей комплекстары төҙөү кәрәк. Бөгөн Йылҡысыҡҡан күлене эргә-тирәһе шырлыҡҡа әйләнеп бөткән, берәү ҙә уны башҡорт өсөн изге урын тип әйтмәҫ. Күлде таҙартып, махсус һуҡмаҡтар түшәп, уның тарихы яҙылған таш ултыртып, Аҡбуҙаттың һәм "Урал батыр" эпосының башҡа геройҙарының һындарын төҙөп ҡуйһаң, ул туристарҙы үҙенә йәлеп итәсәк. Был йәһәттән эштәр эшләнә лә инде. Былтыр хөкүмәт ҡарары менән "Шүлгәнташ" тарихи-археологик музей-заповедниги структураһында ойошторолған "Урал батыр ере" музей-туристик маршруты ошо мәсьәләрҙе хәл итеүгә йөҙ тотасаҡ та инде. Әлегә беҙ уның документтарын тәртипкә килтереү, территорияһын билдәләү буйынса эш алып барабыҙ. Бөрйән районына, уның элекке хакимиәт башлығы Динир Әсғәт улы Әхмәтйәновҡа рәхмәт, улар был проектты ыңғай ҡабул итте, урындағы етәкселектең райондың киләсәге туризм, "Шүлгәнташ" мәмерйәһе менән бәйле булыуын аңлауы эшебеҙҙе еңелләштерә. Проект менән 10 млн һумлыҡ Президент грантына ла лайыҡ булдыҡ, ул эште башлап ебәреү өсөн ҙур этәргес буласаҡ.

"Шүлгәнташ" - ябай мәмерйә түгел, мәмерйә үҙе һәм уның территорияһы халҡыбыҙҙың тарихы, бөйөк эпосы, легендалары менән бәйле. Тап ошо мәмерйәгә Шүлгән инеп ҡасҡан, унда һыуҙың үлгән, терелгән урыны, Йылҡысыҡҡан күле - Аҡбуҙаттың, башҡорт аттарының һыу аҫтынан өҫкә сыҡҡан урыны бар. "Шүлгәнташ" мәмерйәһе ЮНЕСКО-ның тарихи ҡомартҡылар исемлегенә тәҡдим ителгәнен барыһы ла белә, беҙ хәҙер ныҡлап ошо номинацияны яҡларға әҙерләнәбеҙ. Быға өлгәшһәк, киләсәктә бөтөн донъяла "Шүлгәнташ"ты, Башҡортостанды, солоҡсолоҡто беләсәктәр, быларҙың барыһын да үҙ күҙҙәре менән күреү өсөн сит илдән туристар киләсәк. Уларҙы ҡаршы алыу, автобустарға ултыртып, Бөрйәнгә барып еткәнсе башҡа тарихи урындарҙы, мәмерйәнең үҙен, башҡа музей комплекстарын күрһәтеү - туроператорҙарҙың бурысы.

# ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ,

## Үҙем һыу буйҙарында..."

*(2012 йыл, №19).*

**Һорауҙарға география фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт университетының география факультеты деканы Инбер Мөхәмәт улы ЯППАРОВ һәм Ағиҙел һәм Урал йылғалары һыу объекттары мониторингы буйынса Федераль дәүләт учреждениеһының бүлек мөдире Әхтәм Рауил улы ҒӘББӘСОВ менән яуаптар эҙләйбеҙ.**

**Һорау: Кешелек иң ҙур өлөшө һыу менән ҡапланған Ерҙә йәшәһә лә, асылда, донъя океанының уртаһында ултырһа ла, XXI быуат башында һыу ҡытлығы барлыҡҡа килде. Һыу проблемаһына мөнәсәбәтле белгестәр булараҡ, һеҙ был ҡытлыҡтың сәбәптәрен нисек аңлатаһығыҙ? Ғөмүмән, һеҙҙең һыуға мөнәсәбәтегеҙ нисек?**

**Әхтәм ҒӘББӘСОВ:** Бигерәк тә 2010 йылда Башҡортостан был ҡытлыҡты нығыраҡ кисерҙе. Гидрогеологтарҙың әйтеүе буйынса, Башҡортостанда ер аҫты һыуҙары 2-4 метрға түбәнгә төштө. Былтыр, мәҫәлән, был кимәл күтәрелде, уртаса алғанда күтәрелеш 30 сантиметрға тиң булды. Ғалимдар һыу кимәле түбәнәйеүенең биш йылға һуҙылырын күҙаллай. Быйыл, бер ҡасан да булмағанса, апрелдә үк ҡояш ҡыҙҙыра башланы, тимәк, был һыу кимәленең тағы ла түбәнәйеүенә килтерәсәк. Быға тиклем беҙ, бигерәк тә ауыл ерендә йәшәүселәр, һыуҙы ҡоҙоҡтарҙан ала инек. Йылдан-йыл ҡоҙоҡтарҙа ла һыу ҡалмай башланы. Мин үҙем, мәҫәлән, баҡсамда 7 метрҙан һыу ала инем, хәҙер ҡоҙоғомдоң тәрәнлеге 11 метр.

**Инбер ЯППАРОВ:** Һыу - тормошобоҙҙоң нигеҙе. Һыуһыҙ бер нәмә лә эшләп булмай. Әгәр ҙә Хоҙай Тәғәлә беҙгә шул һыуҙы биргән икән, беҙ уның ҡәҙерен белергә, һыуға ҡарашыбыҙҙы үҙгәртергә бурыслы. Һыу өс хәлдә була: ҡаты (боҙ), шыйыҡ һәм пар хәлендә. Һыу ошо өс хәлгә күскән ваҡытта йылылыҡ бүлеп сығара һәм таҙара. Беҙ бөгөн һыуҙың ана шул таҙарған өлөшөн һаҡлау мәсьәләһен күҙ уңында тоторға тейешбеҙ. Атмосферала барлыҡ һыуҙың 7 проценты бар икән, тимәк, 14 йыл һайын бер үк һыу атмосфера аша ергә төшә. Әгәр ҙә беҙ ана шул ваҡыт эсендә кешенең һыуға мөнәсәбәтен үҙгәртеп өлгөрһәк, киләсәктә эсәр һыу проблемаһы булмаясаҡ.

Тәбиғәт законы буйынса 1 тонна органик матдәне етештереү өсөн яҡынса 400 тонна һыу ҡулланыла. Әйтәйек, 1 тонна бойҙай үҫтереү өсөн тәбиғәт 400 тонна һыу бүлә. Ә бына кеше ниндәйҙер әйбер етештергән саҡта күпкә артығыраҡ һыу сарыф итә. Миҫалға ҡатын-ҡыҙҙар яратып кейгән колготкиҙы ғына алайыҡ. Уның ауырлығы 20-25 грамм, уны эшләр өсөн яҡынса 250 литр һыу кәрәк. Ә 1 тонна ҡорос иретер өсөн 1600 тонна һыу сарыф ителә. Беҙ һыуҙы һаҡһыҙ, тәбиғәткә ҡарағанда дүрт тапҡырға артыҡ ҡулланабыҙ. Әгәр ҙә беҙ халыҡты яҡшы йәшәтер өсөн уға кәрәк булғандың барыһын да ошондай юл менән эшләй башлаһаҡ, эсәр һыуға мохтажлыҡ йылдан-йыл арта ғына барасаҡ.

**Әхтәм ҒӘББӘСОВ:** Беҙ үҙебеҙ 78 процент һыуҙан торабыҙ һәм һыуҙың сифаты ни тиклем яҡшы булһа, үҙебеҙ ҙә шул һыу кеүек буласаҡбыҙ. Тимәк, һыу беҙҙең сағылышыбыҙ, һыуыбыҙ ниндәй, үҙебеҙ ҙә шундай. Мин һыуға ҡарата мөнәсәбәтебеҙҙе үҙгәртеү маҡсатында баш ҡалабыҙ Өфөлә һәм башҡа ҡалаларҙа "Өсөнсө кран" проектын тәҡдим итәм. Беҙгә әле кран буйынса ике төрлө - эҫе һәм һыуыҡ һыу килә, ә өсөнсө крандан бөтә параметрҙары буйынса ла тик эсер өсөн тәғәйенләнгән һыу килә башлаһа, кешенең һыуға мөнәсәбәте лә үҙгәрер ине, тием. Европа илдәрендә ундай кран бар. Өсөнсө кранға айырым иҫәпләү приборы ҡуйырға, хаҡын да юғарыраҡ күтәрергә була. Нимә генә тимәйек, крандан килгән һалҡын һыуҙы кеше эсә лә, башҡа маҡсатта ла тотона икән, ул барыбер эсәр һыу кеүек ҡәҙерле түгел. Өсөнсө кранды барлыҡҡа килтереү, шулай итеп, кешене һыу ҡулланыу мәҙәниәтенә өйрәтер ине.

**Инбер ЯППАРОВ:** Ысынлап та, хатта ул башҡа һыуға ҡарағанда өс тапҡырға ҡиммәтерәк булған хәлдә лә, кеше ул крандан тик эсер өсөн генә һыу алып, уны ҡәҙерләй башлар ине. Минеңсә, беҙҙең крандар, ғөмүмән, һаҡсыллыҡ талаптарына яуап бирмәй. Әйтәйек, беҙ теш таҙартҡанда йә ҡулды һабынлап йыуғанда крандан һыу ағып тора. Әгәр ҙә крандарҙы ауылдарҙағы йә поезд вагондарындағы ҡулйыуғыс һымаҡ үҙгәртеп эшләһәк, һыуҙы экономиялай алыр инек. Беҙ ер аҫты һыуҙары кимәле төшөүен туҡтата йә уны күтәрә алмайбыҙ, ә һыуҙы һаҡсыл ҡулланып, эсәр һыуҙы экономиялай алабыҙ. Беҙҙең хәҙерге иҡтисад, асылда, ер аҫтынан нефтте һәм газды һурыуға ҡоролған һәм 1 тонна нефть сығарыу өсөн 10 тонна самаһы һыуҙы ер аҫтына ҡыуырға кәрәк. Хәҙер Башҡортостан йылына 500 миллион тонна нефть таба икән, бының өсөн 5 миллиард тонна һыу ер аҫтына ҡыуыла, тигән һүҙ. Әлбиттә, был һыу ер өҫтөнә ныҡ бысранып сыға. Шуға күрә республикабыҙҙың ҡайһы бер райондарында шишмәләр ныҡ бысранған. Элек нефть табыу тармағы дәүләттеке булғанда контроль бар ине, хәҙер иһә хатта ниндәйҙер дәғүә белдереүе лә ҡыйын. Бензинға хаҡты дәүләт нисек көйләй алмаһа, бында ла шул уҡ хәл. Оҙаҡламай беҙгә һыуҙың категорияларын киренән билдәләргә тура киләсәк, сөнки таҙартыу ҡоролмалары бысраҡ һыуҙарҙы таҙартып өлгөрә алмай.

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ТЕЛҺӨЙӘР ҺӘМ...

## илһөйәрҙәр гәзите



**Уйлап ҡараһаң, аптырарлыҡ: бынан ике тиҫтә йыл элек Башҡортостандың баш йорто Өфөнөң башҡорт телендә сыҡҡан үҙ баҫмаһы юҡ ине. Башҡорт йәмәғәтселеген әйтәм, нисек шундай хәл менән килешеп йәшәгәндәрҙер инде. Ә бит абруйлы ғына яҙыусыларыбыҙ, мәҙәниәт-сәнғәт әһелдәре, ғалимдарыбыҙ күп ине.**

Беҙҙең быуын ул саҡта йәш ине әле, бәлки, тап ана шул йәшлек менән ул хаҡта уйлап та еткерелмәгәндер. Мәсьәлә күтәрелмәгән түгелдер, ҡуҙғатыла килгәндер инде, тик республика хужалары тарафынан ул ваҡыт был йәһәттән саралар күрелмәгән, тимәк. Республика үҙаллылыҡ алып, бер тиҫтә йыл үткәндән һуң ғына, ниһайәт, Башҡортостандың тәүге Президенты Мортаза Рәхимов указы менән 2002 йылда "Киске Өфө" гәзите донъя күрә башланы. Был баш ҡалабыҙ кимәлендә генә түгел, ә бөтөн Башҡортостан һәм, ғөмүмән, дөйөм башҡорт донъяһы өсөн әһәмиәтле ваҡиға булды. Туған телебеҙҙе рәсми йәшәтеү сараһы булараҡ та ваҡытлы һәм кәрәкле ине ул.

Ҡайһы берәүҙәрҙең, был гәзит фәҡәт Өфө ҡалаһында таратылыусы баҫмалыр, тип хата уйлауы һәм бәғзе берәүҙәрҙең һаман булһа ошо гәзитте алдырыу түгел, тотоп та ҡарағаны булмауы күңелде бик әрнетә, әлбиттә. Ундайҙарҙың тормош йүнәлештәре икенсе юҫыҡта, күрәһең. Ә бит "Киске Өфө"нө лә, "Башҡортостан", "Йәшлек" һәм башҡа гәзит-журналдарыбыҙ кеүек үк, республикабыҙҙың бөтөн районДарынан да яҙылып алдырырға була. Туған тел, башҡортобоҙ тарихы, уның бөгөнгөһө, киләсәге маңҡорттарҙы ҡыҙыҡһындырмай, әлбиттә. "Киске Өфө" һәм әсә телебеҙҙә сыҡҡан башҡа баҫмаларыбыҙҙы алдырып уҡып барыусылар бөгөн әллә ни күп булмаһа ла, уларҙың сафы һүҙҙә түгел, ә ғәмәлдә үҙ милләтебеҙ рухына тоғролоҡло илһөйәрҙәр һәм телһөйәрҙәрҙән тора.

Шуныһы менән ғорурлана алам: мин "Киске Өфө"нө ул сыға башлағандан алып, беренсе һандарынан уҡ яҙылып уҡып барам һәм улай ғына ла түгел, гәзит эшмәкәрлегендә мөмкин тиклем үҙем дә ҡатнашлыҡ итәм, уның йөкмәткеһен төрләндереүҙә үҙ өлөшөмдө индерергә тырышам. Ә бигерәгендә лә шуныһы яҙышырға мәжбүр итә мине: халҡыбыҙҙың көнитмеше, тарихы, рухи донъяһына ҡағылышлы мәсьәләләр буйынса гәзит күтәргән мәсьәләләр мине лә тулҡынландыра, ҡайһы саҡ хафаға һала йә булмаһа, ҡыуандыра - һәр хәлдә, битараф ҡалдырмай. Шуға ла әйтер һүҙҙәремде башҡа уҡыусылар күңеленә лә еткергем, улар менән фекер уртаҡлашҡым килә.

Этнограф булараҡ, мине ауылдарҙан яҙышып торусы авторҙарҙың халҡыбыҙ үткәненә ҡағылышлы яҙмалары ҡыҙыҡһындыра һәм, әгәр мин уларҙа ауыл, тыуған яҡтарының ер-һыу атамалары, ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында ҡыҙыҡлы факттар, мәғлүмәттәр осратһам, ҡыуанып китәм, уларҙы, авторҙарын һәм башҡа сығанаҡтарын күрһәтеп, башҡорт этнографияһына арналған мәҡәләләрҙә файҙаланам. Шулай итеп, гәзитте уҡыусы һәм уға яҙышыусы авторҙар үҙҙәре лә аңғармаҫтан, ғилем өлкәһенә бик ҙур ярҙам күрһәтәләр, юғиһә бит, ауылдары тирәһендәге ул атамалар фән өсөн билдәһеҙ тороп ҡалыуы ла ихтимал. Икенсенән, "Киске Өфө"нөң туған телебеҙ яҙмышына, халҡыбыҙ тарихына ҡағылышлы маҡсатҡа йүнәлешле эшмәкәрлеге хуплауға лайыҡ тип иҫәпләйем һәм был баһа менән гәзит уҡыусылар ҙа килешәләр, тип уйлайым.

Яратып, ҡыҙыҡһынып уҡырлыҡ һәм ниндәйҙер өлгө йә ғибрәт алырлыҡ рубрикалары күп гәзиттең. Шулар иҫәбендә мин "Фекер төйөнө", "Тарихнамә", "Телгенәм, бергенәм", "Заман башҡорто", билдәле һәм ҡыҙыҡлы шәхестәр менән "Диалог" кеүек рубрика материалдарын, шифалы дарыу үләндәре хаҡында мәғлүмәттәрҙе иң тәүҙә уҡып сығам, ҡайһы бер кәңәштәрҙе файҙаланып та ҡуям. Ғөмүмән, "Киске Өфө" бына егерме йыл инде минең өсөн көтөп алынған баҫмаға әйләнде. Оҙон ғүмерле булһын гәзитебеҙ, тигән ихлас теләктәремде еткерәм.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ.**

**✓ Ә хәҙер үҙемдең бер ҙә көлкө килмәй. Сөнки мин был шомло бабайлы урында япа-яңғыҙым тороп ҡалдым. Һәр ҡыштырлауға ҡолаҡ һалып тора инем, шул мәл... эргәлә генә кемдер көлөп ебәрҙе!**

КӨЛКӨФӨ

# ТЕГЕ БАБАЙ МЕНӘН ОСРАШЫУ



Күрше ауылға эш буйынса барғайным. Иҫәп буйынса төштән кире ауылға ҡайтырға ине. Әммә уныһын-быныһын эшләгәнсе һуңға ҡалып кителде. Ана сығам, бына сығам, тигәнсе, көн кискә лә ауышты. Ә ҡайтыр кәрәк. Ҡайтмайынса бер нисек тә булмай. Шуға, әллә бөгөн йоҡлап, иртәгә ҡайтырға микән, тиғән уй башҡа ла инеп сыҡмай. Әйткәндәй, ул заманда беҙ күберәген йәйәү йөрөнөк. Бының ҡыйынлығын артыҡ һиҙмәнек тә, буғай. Шулай булырға тейеш һымаҡ ҡабул иттек. Бына әле миңә лә хәҙер ун ике саҡрым араны йәйәү тәпәйләр кәрәк. Ярай, мәйтәм, йәйге көндең бауыры оҙон. Моғайын да, имен-аман ҡайтып етермен. Әгәр сәғәтенә биш-алты саҡрымды үтһәм... Әгәр аҙ генә шәберәк атлаһам... Әгәр ара-тирә йүгереп барһам... Әгәр шул урында бер аҙ ял итеп алһам... Бындай уйҙарҙан һуң хатта ғына ла күңелле булып китә. Мәйтәм, насип итһә, өс түгел, ә ни бары ике сәғәт эсендә өйҙә булырмын әле.

Йәш саҡ - дыуамал саҡ, тип бушҡа әйтмәйҙәр икән. Бына бит, әй, энер мәле күптән үткән, күҙ бәйләнеп ҡараңғы төшкән. Ә мин ҡара урман буйлап япа-яңғыҙ һыҙғырып китеп барам! Әле уйлап ултырам. Хәҙерге йәш һәм хәҙерге аҡыл булһа, төнгә ҡарай урманға табан мылтыҡ терәп торһалар ҙа бер аҙым атламаҫ инем. Ә әле ҡурҡыу-ркөү юҡ. Айыу-бүре йә ен-шүрәле осраһа, тиғән уй башҡа ла инеп сыҡмай. Улай ғына ла түгел, ярай әле бесән мәле, тип ҡыуанып китеп барам. Тапҡанмын инде ҡыуаныр нәмә. Йәнәһе лә, бына әлеге мәлдә ошо бәләкәй генә һуҡмаҡ та оло юлға әйләнеп киткән. Йәнәһе лә, шуға атлауға йәпле. Уныһы шулай инде. Бесән мәле бит. Был мәлдә кемеһе арба, кемеһе матай менән йөрөп, юлды апаруҡ тигеҙләп бөтә.

Һуҡмаҡ киң, атлауы иркен, кәйеф шәп. Һәләмәк кенә атлап барам. Йүгерә-атлай барырмын, тигән уй күптән инде һүнгән. Ошолай тыныс ҡына барған мәлдә ҡапылдан ғына күңелдә нимәләр өйкөй төшә. Өйкәү генә түгел, хатта күңел бер аҙ һулҡылдай биреп ҡуя. Башымдағы бар зиһенде бер урынға туплап, эштең нимәлә икәнен аңларға тырышып ҡарайым. Юҡ, аңлап булмай. Шуныһы аптырамалы, атлаған һайын был өйкәү-борсолоу көсәйә генә бара. Һәм бер мәл атылған уҡ һымаҡ йәрәккә килеп ҡаҙала - ә теге шомло урынды нисек үтергә? Аптырап туҡтап ҡалам. Нишләп был турала онотҡанмын? Нисек иҫтән сыҡҡан? Ә хәҙер ни эшләргә? Кире боролор инең, сама менән ярты юл үтелгән. Алға табан атлар инең, йөрәк көҙгө япраҡ һымаҡ, бына өҙөләм, ана өҙөләм тип өлпөлдәп тора. Шул кәрәк һиңә асыҡ ауыҙға, тип үҙемде әрләп алам.

Ә теге урын бигерәк шомло шул. Бына шул урында, әгәр ысын була ҡалһа инде, кешеләргә ара-тирә бер бабай осрай икән. Кәүҙәгә әллә ней ҙур түгел, имеш. Күргән кешеләр, башындағы түбәтәйе-нейе менән метр самаһы барҙыр, тей. Бына шул бабай апаруҡ кешегә осраған. Бер мәл фәлән ағай менән һымаҡ ошо һуҡмаҡ буйлап был яҡтан атлап килгән. Һәм текә үрҙән аҫҡа табан атлай башлаған. Ә теге бабай теге яҡтан атлап килгән булған. Фәлән ағай уны күреп, аптырап ҡатып ҡалған. Ә был бабай тыныс ҡына юлдан ситкә сыҡҡан. Һәм әйеге менән, әйҙә үт, тип ымлаған. Теге ағай уның эргәһенән генә үтеп киткән, ә теге бабай уны ҡарашы менән генә оҙатып ҡалған. Был ағайҙың нисек йөрәге ярылмағандыр инде, уныһын әйтә алмайым. Был ағай аҙаҡ, әллә нишләп ҡуш ҡуллап һаулыҡ һорашманым, уңайһыҙ булды, итәғәтһеҙ кеше икән, тип уйлағандыр әле, тип үкенгән, имеш. Ә бер мәл фәлән ағай уның һыйырҙарҙы ауыл яғына һыңғайлатып ҡыуып йөрөгәнен күргән. Һәм бар эшен онотоп, ауыл яғына кире сапҡан. Бер ҡыуа башлағас, ауылға еткергәнсе ҡыу инде, тип ҡысҡырырға баш етмәгән, тип борсолған, имеш, был ағай аҙаҡ.

Ә бер мәл был бабай утын тейәп ҡайтып килгән бер ағайҙың арбаһын текә үргә ҡарай этешеп сығарып ебәргән. Ысынмылырбушмылыр, тегенең аты тауҙы йүгереп тигәндәй менгән дә ауылға еткәнсе сапҡан. Был ағай лысма тиргә, ә аты ап-аҡ күбеккә батҡан, тей. Ә шулай ҙа был ағай аҙаҡ, эх, белгәндә, утынды күберәк тейәр инем, тип ҡайғырып йөрөгән, имеш. Быны ошо һүҙҙәр ысын була ҡалһа, был бабай бер ҙә яуызға оҡшамаған бит, тип тыныслана бирең ҡуям мин.

Күңел бер аҙ тынысланды. Ә теге бабайлы урынға еткәс... йәнем саҡ мине ташлап китмәне. Алда ниндәйҙер тауыш килә бит, әй! Кемдәрҙер һөйләшә! Бәлки, ҡолаҡҡа ғына ишетеләләр, тип үҙемде ышандырырға тырышам. Юҡ, ысынлап та кемдәрҙер һөйләшә! Ҡурҡалырға түгел, тын алырға ҡурҡып, күпме торғанмындыр инде, уныһын белмәйем. Бер мәл, нисектер, ҡурҡыу үткәндәй булды. Хатта нисектер бар донъяға битараф булып ҡалынды. Тимәк, миңә теге ысын донъяға тап ошо урында күсергә яҙылып ҡуйылғандыр инде, тигән уй күңелдә нығына бирең ҡуя. Ә үр аҫтында тауыш йә көсәйә төшә, йә бер аҙға тынып ҡала. Бер мәл шуға иғтибар итәм - ике кеше һөйләшә! Берене ир кеше тауышына, ә икенсеһе ҡатын-ҡыҙҙыҡына оҡшай. Әллә, мәйтәм, теге бабай әбейе менән бергә йөрөп ята микән? Миңә ҡалһа, әбей бабайын әрләй, буғай. Эшкинмәгән, булдыҡһыҙ, һинең арҡала ошондай хәлгә ҡалдыҡ, тигәнерәк һуҡраныу һүҙҙәрен асыҡ аңғарып ҡуям. Бабайы нимәләр тип мыңғырлап яуап бирә. Үәт әй, тип уйлап ҡуям, әбейҙәр бар ерҙә лә бер үк икән. Бында ла әрләйҙәр, тегендә лә, тигәндәй...

Мин иплә кенә рюкзакты арҡанан алам һәм уның эсенән бысаҡтыр эҙләй башлайым. Мәйтәм, шул мәлдә ҡурҡыу шул хәтлем көслө булғандыр инде. Билдән төшөрмәгән бысаҡты рюкзак эсенән эҙләп торсо әле. Бысаҡ, әлбиттә, рюкзакта юҡ. Ә минең бармаҡтар уның төбөнән ниндәйҙер түңәрәк нәмәне табып ала. Нимә икәнен ҡапылғара аңлай алмай торҙом әле. Шунан ҡапыл иҫкә килеп төшә. Фонарик бит был. Иплә кенә рюкзакты кире арҡаға элә. Ҡулыма фонарикты алам. Һәм алға табан ҡыйыуһыҙ ғына тәүге аҙымды, шунан икенсеһен, тора-бара өсөнсөһөн яһайым. Минең уй ошолай - аңғармаҫтан барып сығырға, бабайҙың күҙен фонариктың уты менән сағылдырырға, ә әбейен... уныһын осора тибергә лә (бирешмәҫ әле) алға табан уҡ һымаҡ осорға!

Йылап ҡына атлап килә биргәс, мин тегеләрҙең тауышын ғына түгел, үҙҙәрен дә төҫмөрләй төшәм. Нисәү икәнен аңлап булмай. Әллә икәү, әллә өсәү инде улар. Бер аҙ тыңлап торғас, эштең айышына төшөндөм бит, әй. Һәм енел һулап ҡуям. Былар бит бесәнселәр! Был йәш ғаилә һуҡмаҡтың һөҙәк яғынан матайҙарын һүндереп өйөп килгәндәр. Йәнәһе лә, бензинды бушҡа яҡмайҙар. Ә бына тап ошо шомло ерҙә иҫке генә матайҙары эшләмәгән дә ҡуйған. Теге бабайҙың ғына ҡасафаты, ул ғына матайҙы эшләтмәне, тип ҡурҡа икән былар. Ә мин, үҙ сиратымда, уларҙан ҡурҡҡанмын икән. Һәм ҡапылдан ғына башҡа хәтәр уй килә - быларҙы бит шаяртып-ҡурҡытып алырға була!

Мин бесәнселәргә апаруҡ яҡынлай төшәм һәм ҡапыл фонарикты ҡабыҙып ебәрәм. Теге икәү ысынлап та матай ремонтлайҙар икән. Әммә ҡараңғы булғас, йүнләп эшләй алмайҙар. Һүҙ ҙә юҡ, минең шаяртыу үтә ҡаты килеп сыҡты. Ҡап-ҡараңғы төндә ҡапыл яҡтылыҡ барлыҡҡа килгәс, теге икәү саҡ телһеҙ ҡалманы. Күҙкәйҙәрен селт-селт йомоп, миңә ҡарап ҡаттылар ҙа ҡалдылар. Иҫтән яҙып ҡына ҡуймаһындар, урманға табан сабып сығып китмәһендәр, үҙемә ташланып ҡуймаһындар, тип үҙемдең дә ҡот осто. Шуға мин тауышымды мөмкин тиклем яғымлы итеп, уларға өндәшәм.

- Сәләм, сәләм! Бесәндән ҡайтып килеүме? Матай боҙолдомо?

Телһеҙ ҡалған теге икәү миңә ҡарап, һаман ҡатып тик ултыралар. Бер аҙ торғас, ир кеше үҙенең эсенән ниндәйҙер тауыш сығара ала.

- Һаумы, ағай.

Үәт, мөғжизә, ҡараңғы төндә минең ағай икәнде ҡайҙан беләләр инде. Тора биргәс, ҡатыны телгә килә.

- Биш күбә күбәләнек.

Шунан йәлләткес кенә тауыш менән өҫтәп ҡуя.

- Өйҙә ике бала яңғыҙҙары ҡалды. Нишләп кенә ултыралар инде?

Мин "изге" тауыш менән яуап бирәм.

- Ошо балаларығыҙ хаҡына ярҙам итергә уйлап торам әле. Хәҙер мин яҡтыртып торам, ә һеҙ матайығыҙҙы ремонтлағыҙ.

Ир-бесәнсе тәүҙә ҡыйыуһыҙ, тора-бара ихласлап матайҙы соҡорға керешә. Ара-тирә минең яҡҡа күҙ һалып ҡуя. Шунан ҡатыны бер аҙ көрәйгән тауыш менән әйткән була.

- Ярай әле һеҙ килеп сыҡтығыҙ.

Этлеккә, мәйтәм, баш шәп эшләй шул. Минең "тапҡыр" яуап уларҙы кире хәртәйтә төшә.

- Һеҙ, тип... һеҙ кемде әйтәһегеҙ ул.

Ҡатындың тауышы тағы мөшкөл генә.

- Һуң... кем тип... кеше килеп сыҡты... тип әйтеүем инде.

Ә минең яуап уларҙы саҡ иҫтән яҙҙырмай

- Ә һеҙ нишләп мине кеше тип уйлайһығыҙ?

Бындай яуаптан һуң ирҙең хатта ҡулынан асҡысы төшөп китә.

- Һеҙ, ағай... беҙҙе... улайтып... ҡурҡытмағыҙ инде.

Мин мөмкин тиклем тыныс яуап бирергә тырышам.

- Ҡурҡмағыҙ минән. Теймәйем мин һеҙгә.

Бесәнселәр тағы телһеҙ ҡала. Шунан мин әйтә ҡуям.

- Яҡтылыҡ етмәһә, әйтегеҙ. Мин икенсе күҙемде лә тоҡандырырмын.

Көлкө инде. Йәнәһе лә, әле мин бер күҙ менән генә яҡтылыҡ бирең торам. Әммә тегеләрҙә көлөү ҡайғыһы юҡ. Яҡтылыҡ етеңкерәмәй шул, икенсе күҙеңде лә тоҡандыр, тиһәләр, нимә эшләр инем икән. Миндә бит фонарик берәү генә. Икенсе "күҙҙе" бер нисек тә тоҡандырып булмай. Ошо "көлкөлө" уйҙар минең баштан үтеп китеп өлгөрмәй, ҡапыл тын ҡалған урманды яңғыратып, матай эшләп китә. Ә ҡалғаны йәшен тиҙлеге араһында үтә. Матайҙың фонары тирә-яҡты яҡтыға ҡаплай. Мин эргәләге имәнгә ҡарай ырғыйым. Шул арала минең эргәнән генә гөүләп матай үтеп китә. Һәм ҡараңғылыҡҡа инеп юғала. Мәйтәм, ярай әле үҙем сос. Унан бигерәк, ярай әле имән йыуан. Тегеләй була ҡалһа, билләһи, тапап китәләр ине...

Көлә-көлә әле генә бесәнселәр торған ергә киләм. Ҡурҡыуҙары шул хәтлем көслө булғандыр инде. Аҙыҡ-фәлән төрөп алған төйөнсөктәре, матайҙың асҡыстары ерҙә аунап ятып ҡалған. Уларҙы йыйып алып, юл ситендәге ҡайын ботағына эләм. Иртәгә юл ыңғайы алырҙар әле. Әйткәндәй, аҙаҡ теге бесәнсе ир, нимә ҡарап тораһың, килеп ярҙам итеш, тип бушҡа әйтмәгәнмен әле, тип һөйләп йөрөгән, имеш. Мәйтәм, әйтерһең әйтмәй ҙә бындай саҡта. Ул бабай осрай ҡалһа, бына мин әйтә алмаҫ инем...

Көлә килә, артынан ҡыуа килә, тип бушҡа әйтмәйҙәр икән. Үәт тормош, бая ғына мин бесәнселәрҙән ихлас көлөп тора инем. Ә хәҙер үҙемдең бер ҙә көлкө килмәй. Сөнки мин был шомло бабайлы урында япа-яңғыҙым тороп ҡалдым. Һәр ҡыштырлауға ҡолаҡ һалып тора инем, шул мәл... эргәлә генә кемдер көлөп ебәрҙе! Фонарикты шул яҡҡа йүнәлтһәм, имән ботағында теге бабай көлөп ултыра!

- Ну, ҡыҙыҡ иттең тегеләрҙе. Күптән былай рәхәтләнеп көлгәнем юҡ ине. Рәхмәт инде һиңә. Тегеләргә, яҡтылыҡ етмәһә, әйтегеҙ, икенсе күҙемде лә тоҡандырырмын, тип ебәргән булаһыңмы, әй!

Мин ни эшләргә белмәй, ҡатып ҡалам. Теге бабай битен усы менән ҡаплай төшөп, миңә өндәшә.

- Күҙгә яҡтыртма әле!

Мин, аптырап, фонарымды ергә йүнәлтәм. Ә унда... эсен тырнай-тырнай сыйылдап сығып бер сысҡан көлөп ята. Шунан ошо сысҡан күҙ менән ҡаш араһында теге бабайға әйләнә. Өҫтән ҡаҡҡылап ала ла миңә әйтә.

- Әйҙә, баҫтырыш уйнайыҡ. Һин ҡасаһың, ә мин һине тотам!

Әлбиттә, бындай ҡурҡыныс күренеш минең баштан ғына үтеп китә. Һәм мин йән-фарманға ауыл яғына ҡарай сабам. Билләһи, тиҙлек буйынса теге матайҙан бер ҙә ҡалышмағанмындыр ул.

Был хәл күптән булды. Ә шулай ҙа, әгәр теге бабай осрай ҡалһа, мине ҡыуып етә алмаһың бит әле, тип әйтергә уйлап йөрөйөм әле.

**Һөйләүсене Әғләм ШӘРИПОВ тыңлап торҙо.**

*ХӘТЕРЛӘП...*

# НОҒМАН АТЛЫ МӘҒРУР ҠАРАҒАЙ

**Халҡыбыҙҙың Ноғман атлы мәғрур ҡарағайы ауыуына бер йыл... Уның менән бергә тотош дәүеребеҙ - бер быуатлыҡ тарихыбыҙ убылғандай тойолоп, күңелдәребеҙ етемһерәп, яҡлауһыҙ, һаҡлауһыҙ тороп ҡалдыҡ. Мәңгелек урманыбыҙҙың Рух солоғо, башҡорт прозаһының алтын бағанаһы ине ул. Халыҡ яҙыусыһы тигән титулға Ноғман Мусин тигән дәрәжә, олпатлыҡ, оһоллоҡ өҫтәй ине.**

Юғалтыуҙы барлыҡ Башҡортостан халҡы ауыр кисерҙе. Һәм бына уның вафатына бер йыл тулыр алдынан Ноғман Мусин 1983-2021 йылдарҙа йәшәгән йортта (Өфө ҡалаһы, Менделеев урамы, 7/1) яҙыусының яҡты иҫтәлегенә таҡтаташ асылды. Таҡтаташҡа әҙиптең портреты һәм уның ижад кредоһын билдәләгән "Мин - мәңгелек урман" тигән һүҙҙәр яҙылған. Халыҡ күп йыйылды, барыһы ла халыҡ яҙыусыһы тураһындағы йылы иҫтәлектәре менән уртаҡлашты. Таҡтаташ асыуҙың бар мәшәҡәттәрен үҙ өҫтөнә алған "Мин - патриот" ойошмаһына һәм яҙыусының туғаны, журналист Уйылдан Галинға рәхмәт һүҙҙәре еткерелде. Яҙыусының таҫмаға яҙылған тере тауышын ишетеү барыбыҙҙы ла һиҫкәндерҙе: "... бәхет күп яҡлы, ҡайһы саҡ ҡайғылар, ауырлыҡтар, хәсрәттәр аша ла килә бәхет. Тормоштоң асылы шунда...".



Ноғман ағайҙың ҡыҙы Нурсилә балалары менән.




Тормоштоң асылы, Ноғман Мусиндың әҙәбиәттә яулаған бейеклектәре, ул ҡалдырған рухи мираҫтың әһәмиәте хаҡында һөйләшеү Ә.Вәлиди исемендәге Милли китапханала дауам итте. Олуғ яҙыусыбыҙ тураһында иҫтәлектәр китабы ла донъя күрер бер саҡ, тик унда ташҡа баҫылыр һүҙҙәр ҡат-ҡат шымартылған булыр, ә был һөйләшеүҙә бәйән ителгән хәтирәләр - һәр береһенең күңел түрендә йөрөгән үтә лә шәхсән тойғолар яңғыраны. Күңел йылылығына сорналған Хәтер кисәһенә әйләнде был һөйләшеү.

Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры Рәшит Шәкүр: "Ноғман Мусин менән алтмыш йылдан артыҡ тығыҙ аралашып йәшәү бәхете тейҙе миңә, кешелекле, ихлас фекерҙәшем булды ул минең. Фатирһыҙ йөрөгән саҡта, беҙҙең ғаиләгә ике бүлмәле фатирын ышанып тапшырып, отпускыға ҡайтып китте. Бына ошондай ағайҙарса хәстәрлегеген тойоп йәшәнем мин уның", - тип, матур хәтирәләре менән уртаҡлашты. Рәшит Шәкүр Ноғман Мусиндың тәүге күләмле әҫәре - "Зөһрә" повесына рецензия яҙған булһа, күренекле прозаик Әмир Әминев уның бөтә әҫәрҙәрен дә рецензиялаған икән. "Ноғман ағайҙың иң яҡын дуҫы Әнүр Вәхитов - әсәйемдең бер туған ағаһы. Ғаилә байрамдарыбыҙ һәр ваҡыт бергә үтте, алты йыл бер йортта күршеләр булып йәшәнек, - тип башланы һүҙен Әмир ағай. - Йәшәү урындарыбыҙ алышынып, ҡаланың ике осонда йәшәгән дәүерҙә лә уның үҙе менән дә, ижады менән дә күршеләр булып ҡалдыҡ. Тормошта ла, ижадта ла дуҫлығыбыҙ дауам итте, ижади пландарыбыҙ, әҙәбиәтебеҙ, әҙәби мөхит хаҡында фекерҙәребеҙ менән ихлас уртаҡлашыр күрше лә, ағай ҙа, дуҫ та, кәңәшсе лә була белде ул. Тормошобоҙҙоң бәхетле миҙгелдәрен дә, ауыр мәлдәрен дә бергә кисерҙек".

Ноғман Мусиндың фекер-кәңәштәрен йәш прозаик Мөнир Ҡунафин да күңел түрендә йөрөтә: "Ағайыбыҙҙың: "Буш ваҡытығыҙҙы әрәмгә үткәрмәгеҙ", - тигән һүҙен йәшәү принцибы итеп алырға мөмкин. Ул үҙе, халыҡ араһында йөрөгәндә, ижади командировкаларҙан, гәзиткә тәғәйен материалдан тыш, яҙыласаҡ әҙәрҙәренә бол туплап, ишеткән-күргәндәрен эҫе мәлендә ҡағыҙға теркәп ҡайта торған булған. Беҙҙе лә шулай егелеп эшләргә саҡырҙы, ижад серҙәре менән йомарт бүлеште. "Егеттәр, бер-берегеҙгә терәк булығыҙ, бер-берегеҙҙе ваҡытында күтәрә белегеҙ", - тип тормош һабаҡтары ла өйрәтте. Уның тормошо, эшләү һәм йәшәү рәүеше беҙгә, йәштәргә, оло һабаҡ".

Шағир Әхмәр Үтәбәй "Мәңгелек урман" дилогияһының төп геройы Төлкөсураның портретын ятҡа һөйләп биреп, барыбыҙҙы ла хайран итте. Баҡһаң, "Мәңгелек урман"ды үҫмер ваҡытында ҡат-ҡат уҡыған Әхмәр, Төлкөсура һымаҡ мыҡты кәүҙәле, киң яурынлы, бөркөт ҡарашлы булырға теләп, иртәлекисле физик күнегеүҙәр эшләргә өйрәнеп алған икән. Әхмәр һөйләгәндән һуң шундай уйға киленде: Ноғман Мусин ижадында герой концепцияһы өйрәнелмәгән икән әле (Бөгөнгө йәштәр үҙҙәренә кумирҙы сит мөхиттән эҙләй). Әмир Әминев үҙ сығышында: "Беҙ Ноғман Мусинды "урман йырсыһы" тип кенә атап, уның киң ҡоласлы ижадының тематикаһын тарайтабыҙ", - тигәйне - бына уның һүҙҙәренә ҡеүәт! Ноғман Мусин әҫәрҙәрен йотлоғоп уҡыған быуын өсөн шәхес булып формалашыуҙа әҫәр геройҙарының йәшәү рәүеше ниндәй роль уйнаған! Тергеҙергә кәрәк был мәктәпте.

"Беҙҙең бурыс - олатайымдың әҙәби мираҫын өйрәнеү, уның исемен мәңгеләштереү. Ҡулыбыҙҙан килгәндең барыһын да эшләргә тырышырбыҙ", - тип ышандырҙы яҙыусының түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусы ейәне Тимур Ғарифуллин. Барыбыҙ ҙа еңел һулап ҡуйҙыҡ: ҡарағайҙың тамырҙары иҫән икән, тимәк, урман - мәңгелек!

...Хәтер кисәһе икенсе көнөнә яҙыусының тыуған ауылы Ҡолғонала дауам итте. Ноғман ағайҙың тәүге ғаиләһендә уның үҙенә оҡшап ҡына торған Нурсилә исемле ҡыҙы ҡалған. Ауылдаштарының күҙ алдында үҫеп буй еткерә Нурсилә. Тормош ҡороп, атаһына, Ноғман ағайҙың үҙе әйтмешләй, ҡарағайҙай өс ейән бүләк итә. Иң өлкәндәре Флүргә 40 йәш, ул Санкт-Петербург ҡалаһында донъя көтә. Фотоларҙан ҡарап таныным үҙен: шул уҡ яҫы маңлай, һыҙылып киткән ҡап-ҡара ҡаштар, һынсыл ҡараш - олатаһы!

Нурсилә апайҙың Марат исемле уртансы улы алып ҡайтты мине Ҡолғонаға. Унда ла олатаһының сифаттарын күрергә теләп, юл буйына күҙәтеп барҙым. Буй-һынында әллә ни оҡшашлыҡ сырамыта алманым, ә бына йылмайып ебәрҙеме - ул да олатаһы ғына була ла ҡуя икән. Тик һирәгерәк йылмая. Ҡолғона тирәһендәге ер-һыу атамаларын яҡшы белеүе, машинаны оҫта, ышанысл йөрөтөүе һоҡландырҙы.

Нурсилә апай беҙҙе ҡапҡа төбөндә ҡаршы алып тора ине. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, танышҡандан һуң, ни эшләргә белмәй, ҡулымдағы күстәнәсемде уға һондом. Балаларса ҡыуанып, ихлас йылмайып ебәрҙе. Йылмайыуы, йөҙө, күҙ ҡараштары - барыһы ла атаһынан. Халыҡса әйткәндә, һуйған да ҡаплаған!

Сәй артында ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына сетерекле лә, серле лә теманы дауам итәбеҙ. "Үҙемде иҫләгәндән алып Ноғман Мусиндың ҡыҙы икәнемде белеп, һәр саҡ уның иғтибарын, хәстәрен тойоп йәшәнем. Атайымдың бер туған апайҙарына, уларҙың балаларына рәхмәт, улар менән тығыҙ аралашып йәшәнек, атайым Ҡолғонаға ҡайтҡанда, уның менән бергә мине ҡунаҡ табынына саҡырып ала һалдылар. Балалығым менән атайымдың һәр саҡ эргәмдә булыуын теләп, дыуамаллашҡан ваҡыттарым да булды инде, әлбиттә. Ләкин йәшәй-йәшәй үҙ-ара мөнәсәбәттәребеҙҙе нисек бар, шулай ҡабул итергә өйрәндем. Атайымдың "Шоңҡар" журналында (2016 йыл, июль һаны) баҫылып сыҡҡан интервьюһында "...тәүге ҡатынымдан үҙемә оҡшап торған ҡыҙым, ҡарағайҙай һомғол буйлы өс ейәнем бар" тигән һүҙҙәрен уҡығанда минән дә бәхетле кеше юҡ ине. Аллаға шөкөр, атайымдың хәҙер бер бүләре, биш бүләсәһе бар..."

Ноғман ағай менән уның ғүмер буйы бергә йәшәгән ҡатыны Фәймә инәйҙең, был донъяны бик иртә ташлап киткән ҡыҙҙары Фәрзәнә менән Гөлшат апайҙарҙың яҡты иҫтәлегенә арнап аят уҡытты Нурсилә апай һәм уның балалары. Мобилизацияланып, Украинаға, хәрби операцияға юлланған Ҡолғона егеттәренең иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуҙарын теләп тә доға ҡылдылар мәжлескә йыйылыусылар. Изге, матур, сауаплы эш эшләнде.

...Хәтер кисәләре барышында Ноғман ағайҙың таҫмаға яҙылған бәхет тураһындағы уйланыуҙары ҡолаҡта яңғырап тик торҙо: "... бәхет күп яҡлы, ҡайһы саҡ ҡайғылар, ауырлыҡтар, хәсрәттәр аша ла килә ул бәхет. Тормоштоң асылы шунда...". Нурсилә апай менән уның ҡарағайҙай өс улына мәшһүр яҙыусының - Рух солоғобоҙҙоң тамырҙары булыу бәхете яҙған. Был бәхет - оло яуаплылыҡ, оло һынау ҙа. Ошо һынауҙы лайыҡлы үтә алһындар ине егеттәр. Ноғман ағайҙың әле һаман күҙ алдында торған һынсыл ҡарашы ла шуны иҫкәртә кеүек: һынатмағыҙ, уландар!.. Беҙ, Ноғман ағайҙың тоғро уҡыусылары ла, һеҙҙән мәшһүр яҙыусының исеменә торошло эштәр көтөргә хаҡлы.

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, шағирә.**

*УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ*

# ҠУЛДАН ТӨШКӘНЕ ЮҠ

**"Киске Өфө" 20 йыл буйына иң яҡын дуҫыма әүерелде. Бик күп ауылдаштарымды, дуҫтарымды өгөтләп яҙҙырҙым. Уларҙың күбеһе баҡыйлыҡҡа күсте инде. Әйтергә кәрәк, гәзиттән алған фәһем, аҡыл һәм рух уларға ысын донъяла ла үҙ урындарын табырға ярҙам иткәндер...**

Мин бөгөн 86 йәштәмен. "Киске Өфө"нө һаман ҡулдан төшөрмәй уҡыйым, ул миңә хәтеремде һаҡларға һәм нығытырға ярҙам итә. Гәзитте ҡулға алғас та иң тәүҙә уның һуңғы битендәге "Аҡыл-ҡаҙна" рубрикаһындағы ҡанатлы фекерҙәрҙе уҡып, ҡанатланып алам да, шунан башватҡысты тултырам, телевидение программаһына күҙ йүгертәм, шунан һуң ғына урта биттәргә күсәм.

Әле "Киске Өфө", "Атайсал", "Һаҡмар" гәзиттәрен, "Ағиҙел", "Шоңҡар", "Бәрәкәт" журналдарын алдырып уҡыйым. Хәҙер почта хеҙмәте шулайыраҡ булып китте шул - гәзит-журналдар ҡайһы ваҡыт һуңлап та килә. Баҫмаларыбыҙҙы байрам көткәндәй көтөп алам. Үтә ныҡ һуңлап китһә, Әбйәлил районының Ташбулат ауылында йәшәүсе йәшлек әхирәтем Бикҡужина Диләфрүзгә шылтыратам. "Гәзит һиңә килдеме, нимәләр баҫылған?" тип һорашам. Ул да "Киске Өфө"нөң дуҫы. Ҡайһы ваҡыт гәзиттә баҫылған мәҡәләләр буйынса оҙайлы әңгәмәләр ҙә ҡорабыҙ.

"Киске Өфө"гә оҙон ғүмер теләйем. Баҫманың артабан сығыу-сыҡмауы уны алдырыусыларға бәйле булыуы көн кеүек асыҡ. Гәзитте күберәк йәштәр алдырып уҡыһын ине.

**Мәхмүзә ИСЛАМҒОЛОВА.**
**Баймаҡ районы Ярат ауылы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺОЛО БУТҠАҺЫ...

## йөрәкте һаҡлай

■ Һоло ярмаһы йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырмай. Билдәле булыуынса, артерия стеналарының хроник ялҡынһыныуы йышыраҡ атеросклерозға килтерә. Һоло составындағы авенантрамидтар - фенол антиоксиданттары ҡан ҡүҙәнәктәренә артерия стеналарына ултырырға ҡамасаулай. Етмәһә, авенантрамидтар ялҡынһыныуҙы ла баҫа. Шуға ла һоло ярмаһы йөрәкте ишемик сирҙән һаҡлай һәм холестерин кимәлен түбәнәйтә.

■ Йәш ярымдан дүрт йәшкә тиклемге балалар баҡсаһына йөрөүселәр йышыраҡ артыҡ ауырлыҡ менән яфалана, тип яҙа The Journal of Pediatrics баҫмаһы Монреаль университеты белгестәре тарафынан яһалған докладҡа таянып. Тикшеренеүселәр 1600 бала һәм уларҙың ата-әсәләре менән һынауҙар үткәреп ҡараған. Балаларҙың өстән бер өлөшө дөйөм балалар баҡсаларына, тағын бер өлөшө ғаилә балалар баҡсаларына, 11 процент балалар оҙайлы көн төркөмөнә йөрөгән, ҡалғандары өйҙә өләсәйҙәр менән ултырған. Һимеҙ балаларҙың һаны көндөҙгө балалар баҡсаларында һәм оҙайлы көн төркөмөндә йөрөүселәр араһында 50 процентҡа күберәк булған.

■ Тулы кәүҙәле балалар тиҫтерҙәренә ҡарағанда яйыраҡ үҫешә. Быны ғалимдар күптән дәлилләгән инде. Мәҫәлән, Төньяҡ Каролина университеты ғалимдары әйтеүенсә, бындай балаларҙа дөйөм организмдың хәрәкәт әүҙемлеге түбәнәйә. Ғалимдар билдәләүенсә, баланың бәләкәй сакта тулы кәүҙәле булыуы уның артабанғы ауырлығына ла йоғонто яһауы ихтимал.

■ Эйнштейндың даһилыҡ сере уның баш мейеһенә бәйле - АҠШ-тың Флорида университеты экспертлары фаразлауынса, бөйөк ғалимдың баш мейеһенең формаһы бигерәк үҙенсәлекле була. Улар был асышҡа Эйнштейндың бығаса бер ҡайҙа ла баҫылмаған баш мейеһе фотоларын тикшергәндән һуң килә. Стандарт ҙурлыҡта һәм ауырлыҡта булыуына ҡарамаҫтан, Альберт Эйнштейндың мейе бураҙналары ҡатмарлыраҡ булған. Маңлай өлөштәре лә ғәҙәти кешеләрҙекенән айырылып торғанға күрә, ғалимдар ошондай фекергә килгән дә инде.

■ Йорт хайуандары кеше һаулығының торошона яҡшы тәьҫир итә, ти белгестәр. Европа университеттары ғалимдары йорт хайуандары ярҙамында стрестан ҡотолорға, хатта психиканы нығытып, иммунитетты ла яҡшыртырға мөмкин, тип дәлилләй. Медиктар фекеренсә, бесәйҙе бер нисә минут буйына һыйпау баш ауыртыуынан ҡотолдора. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә алынған статистик мәғлүмәттәргә ярашлы, өйҙәрендә эте йәки бесәйе булғандар уртаса биш йылға оҙағыраҡ йәшәй. Дөйөм алғанда, зоотерапия бөгөн күп кешеләргә сәләмәтлеген нығытырға булышлыҡ итә. Белгестәр әйтеүенсә, бесәй ауыртҡан урынды үҙе табып, дауалау һәләтенә эйә.

■ Һуңғы осорҙа сәләмәт йәшәү рәүешен өҫтөн ҡуйыусылар һаны артҡан. Әммә психологтар сәләмәт туҡланыу менән бәйле булған орторексия сиренең артыуын да билдәләй. Баҡтиһәң, ҡамыр аштары, май, сөпрәле аҙыҡтар, кофеиндан тулыһынса баш тартыу кешене бәхетһеҙ яһай икән. Психологтар әйтеүенсә, туйғансы ашамау һәр ваҡыт депрессияға алып килә, хроник сирҙәр кискенләшә.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ОНОТОЛМАЙ БАЛА САҠТАҒЫЛАР

**Инде өлкән йәштә булһам да, мәктәп йылдары, дәрестәге ҡыҙыҡ хәлдәр, мөһим ваҡиғалар һаман да иҫтә. Гәзит уҡыусылар менән шул хәтирәләремде уртаҡлашырға булдым әле.**



● Беренсе синыфты беҙ 1-се балалар йортона йөрөп уҡыныҡ. Буранлап ҡар яуамы, ҡойоп ямғыр яуамы, ауыр портфелдәребеҙҙе һөйрәкләп атлайбыҙ. Беҙҙе Сажиҙә исемле тәрбиәсе оҙатып йөрөй. Бер көн мәктәп-интернаттан ҡайтҡанда дарыуханаға алып инде (үҙенә берәй дарыу алырғалыр) һәм биш тин аҡса ҙурлығындағы "С" витаминдары (аскорбинка) һатып алды. Интернатҡа ҡайтҡас, һәр витаминды бысаҡ менән биш өлөшкә бүлеп, һәммәбеҙгә берәр өлөш таратып бирҙе. Ул шундай тәмле, әммә ауыҙҙа тиҙ генә ирей икән. Бүлмәлә тынлыҡ урынлашты. Шул саҡ Сажиҙә апай: "Әгәр һине һыйлаһалар, нәмә әйтергә кәрәк?"- тип һораны. Тынлыҡты Булат боҙҙо: "Нинә бигерәк әҙ?" Балалар гөр килешеп көлөшкәйне, Сажиҙә апай: "Тәмле әйбер әҙ була шул", - тип әйтеп ҡуйҙы. Барыбер апай беҙҙе яратҡандыр тип уйлауым әле лә иҫемдә.

1-се балалар йорто Пушкин урамында урынлашҡан, ә мәктәп-интернат - Красин урамында. Өфө ҡалаһының бер осонан икенсе осона йөрөп уҡығанбыҙ, сөнки ул ваҡытта (1951 йыл) ул мәктәп (9-сы тип аталһа ла) баш ҡалала берҙәнбер башҡорт мәктәбе ине.

● Икенсе синыфта уҡығанда иң мөһим ваҡиға пионерҙар рәтенә ҡабул итеү булды. Иң тәүҙә һәр беребеҙ "Тантаналы ант" яҙҙыҡ. Уның: "Я, юный пионер Советского Союза", тип башланыуы һәм "обещаю перед лицом своих товарищей" тип дауам итеүе иҫемдә ҡалған, ә дауамын онотҡанмын. Яҙылған антыбыҙҙы уҡытыусыға тапшырғас, һәр беребеҙгә сатин туҡыманан тегелгән ҡыҙыл галстуктар бәйләнеләр һәм бөтәбеҙ бергә антты ҡыҫҡырып әйттек. Уҡытыусы беҙҙең пионерҙар рәтенә инеүебеҙ менән ҡотланы ла: "Отрядығыҙ рәйесе гел "бишле" билдәләренә өлгәшкән Әнүзә Бакирова булыр", - тине. Отряд звеноларға бүленде. Өс рәт булып ултырғанбыҙ, тимәк, өс звено. Мин икенсе рәттә, тимәк, икенсе звенола. Звеноларға һәр береһенә етәксе һайланыҡ. Уҡытыусы: "Икенсе звеноға кемде етәксе итеп һайларһығыҙ?" - тип һораны. Минең шул тиклем етәксе булғым килде һәм эстән генә "Мине һайлағыҙ, мине һайлағыҙ, зинһар", тип теләнем. Тик мине һайламанылар. Ауыр булды, илағым килде. Хатта кемде һайлағандарын да ишетмәгәнмен. Был минең беренсе тетрәнеүем булды.

● Йылдар ашығып үттеләр, бына беҙ етенсе класта уҡый башланыҡ. Класс етәксеһе итеп йәш тарих уҡытыусыһы Марат ағай Хафизовты ҡуйҙылар. Ул әле генә институт тамамлаған, беренсе йыл уҡытасаҡ. Марат ағай үҙе менән таныштырҙы ла класҡа староста һайларға тәҡдим итте. Закиров ҡулын күтәреп тороп баҫты ла: "Усманованы тәҡдим итәм", - тине. Уҡытыусы: "Тағы ла кемде тәҡдим итәһегеҙ?" - тип һораһа ла, яңы фамилияһар әйтелмәне. Мин тороп баҫып, тәҡдимде кире ҡаҡтым. Юҡ шул, ул ваҡытта самоотвод ҡабул ителмәне һәм мине кластың старостаһы итеп берҙәм тауыш менән һайлап ҡуйҙылар. "Нинә Усманованы һайлайһығыҙ?" - тигән һорауға: "Ул иншаларҙы һәйбәт яҙа", - тине Әхмәт. Шулай звено етәксеһе булып булмағайны, бер йыл староста булдым. Бер йыл үткәс, сөнки Марат ағайҙы мәктәп директоры итеп тәғәйенләнеләр, балалар йортон яптылар, ә беҙҙе интернатҡа ҡуштылар. Күп синыфташтар ФЗУ-ларға китеп бөттө.

● Тарих дәресе. Марат ағай Хафизов тәҙрә ҡаршыһына баҫҡан да беҙгә дәрес һөйләй. Мин уҡытыусыны күҙәтәм. Ул ҡара кейеме менән ҡояш нурҙарында балҡып торған тәҙрәлә ҡулға кеүек тора. Мин ҡарашымды ҡара таҡтаға күсерәм, унда уҡытыусы балҡып тора, нурҙарға күмелгән. Тик нурҙар һүнә бара, кәмей, шул сәбәпле мин ҡарашымды тәҙрә ҡаршыһында баҫып торған уҡытыусыға күсерәм. Уҡытыусы тағы ла күләгә кеүек. Күп тапҡыр ҡабатлайым был ысулды. Тик ниңәләр физика һәм астрономия уҡытыусыһы Зия Баттал улының (етенсе синыфта астрономияны өйрәнә башланыҡ) һүҙҙәре иҫемә төшә: "Кем дә кем икһеҙ-сикһеҙлекте күҙ алдына килтерә алмай (бесконечность), астрономия фәнен аңлай алмаҫ". Бер шағир яҙғанса: "Күктә ниҙәр булмаҫ тиһең, Икһеҙ-сикһеҙ күк бит ул". Мин шул икһеҙсикһеҙлектең сиген күрергә тырыша башланым. Күҙ ҡарашымды алыҫҡа төбәйем, сиге юҡ. Шул саҡ "У-у-у" тигән тауыш ишетәм һәм уға "с-с-с" та ҡушыла. Ул сикһеҙлекте күҙ алдына килтерә алмаһаң да, ишетеп була, тип шатланһам, "Усманова" тигән һүҙ ҡолағыма салына. О, ояты ни тиклем! Был Марат ағай тын ғына мине саҡыра. Дәрестә йоҡлап киткәнмен икән. Бер ни ҙә булмағандай күҙҙәремде асам да, бер ғәйепһеҙ ҡарашымды уҡытыусыға төбәп (хатта тороп та баҫмайым): "Нимә, Марат ағай?" - тип һорайым. Марат ағай: "Усманова, йоҡлама!" - тип йылмая. Ә мин "Юҡ, йоҡламаным, күҙҙәремде генә йомдом", тип аҡланам, синыфташтарым гөр килешеп көлә. Көлһөндәр, әйҙә, тик улар минең икһеҙ-сикһеҙлектең тауышын ишетеүемде белмәйҙәр. Ул тауыш әле лә иҫемдә, ул аҙан тауышындай, электрон музыкаға ла оҡшағайны. Ә мин бер уҡытыусыға, бер ҡара таҡтаға ҡарап, үҙемә үҙем гипноз сеансы үткәргәнмен икән.

Күптән түгел бер ғалим, икһеҙ-сикһеҙлекте бер кем дә күҙ алдына килтерә алмай, тине. Зия Баттал улы, астрономияны уҡыта торғас, фантаст та булып киткәндер, күрәһең, бушлыҡтан (безвоздушное пространство) ҡайта алмай ҙа йонсоғандыр...

● Балалар йортонда тәрбиәләнеүселәр берҙән-бер көндө Ер юлдашын, спутникты күреүҙәре тураһында хәбәр таратты. Ул күктә "пип-пип-пип" тип осоп үткән. Тик мин генә аш-һыу бүлмәһендә дежур булып, күрмәй ҡалғанмын. Шуға бигерәк тә ҡайғырҙым, бик ҡыйын булды.

Икенсе көндө дәрестә (төштән һуң уҡыйбыҙ) рус теле уҡытыусыһы Әминә Йыһаншина апай ниндәйҙер әҫәрҙән өҙөк уҡый, ә мин тәҙрә аша күктәге йондоҙҙарҙы күҙәтәм. Уҡыусылар: "Спутник" йондоҙ кеүек",- тигәйне. "Был йондоҙҙарҙың береһе спутниктыр, тик мин уның осоуын күрә, һиҙә алмайымдыр", тип уйлап, иң ҙур йондоҙҙо һайлап алып күҙәтә башланым. Яңағымды устарыма ҡуйып, терһәгемде партаға терәнем. Эй, тын ултырам, хатта тын да алмайым, тигәндәй. Ҡапыл был йондоҙ урынынан күсте. Мин шатлығымдан һикереп тороп, ҡулым менән тәҙрәгә төртөп күрһәтеп: "Спутник!" - тип ҡысҡырғанымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. Балалар тәҙрәгә ябырылдылар, мин һәм уҡытыусы ғына урыныбыҙҙа ҡалдыҡ. Мин шатлығымдан, ә уҡытыусы ҡурҡыуынан ҡуҙғала алманыҡ. Балалар күкте байҡап, Спутникты күрә алмағас: "Алдаҡсы!" - тип урындарына таралышты. Әминә апай ҡулы менән йөрәген тотоп: "Йөрәкте яра яҙҙың бит", - тине. Ә мин илай яҙып: "Ғәфү итегеҙ, зинһар, яңылыштым!" - тип апайға инәлдем. Әминә апай мине дәресте өҙгәнем өсөн әрләмәне лә хатта, кластан да ҡыуып сығарманы. Балалар әҙерәк тынысланғас, дәресте дауам иттек.

Әминә апай Йыһаншинаға арналған хөрмәт, һөйөү хистәре миндә әле лә, 81 йәштә булһам да, күңелемдә һаҡлана. Ул төрлө әҫәрҙәрҙе матур итеп үҙе уҡырға ярата ине. Рус телендә һәйбәт һөйләшеүгә ҙур ярҙам булды был алым. Уҡып ҡына түгел, ишетеп өйрәндек телде. Ә Ер юлдашы 1957 йылда осҡан. Аҙаҡ уны ҡасан күреүем иҫемдә ҡалмаған. Моғайын, бик күп йылдар үткәс, телевизорҙан күрһәткәндәрҙер. Ваҡытында был бик ҙур ғилми ҡаҙаныш ине. Кеше Ерҙең тартыу көсөнән ҡотолдо, тартыу көсөн еңде. Шағирыбыҙ Хисмәтулла Юлдашев яҙғанса:

*Мин оҙонлоҡҡа һикерәм*
*Артҡа сигенеп.*
*Керештәй тартылмайынса*
*Булмай һикереп.*
*Аяҡтарым Ерҙе тоймай,*
*Осоп барғанда.*
*Тартыу көсөнә ҡарышыу*
*Тәндә һәм аңда.*

**Фәүзиә УСМАНОВА.**

**Редакциянан: Фәүзиә апай Усманова (Яхина, шулай уҡ Айгөл Ахунова) "Киске Өфө" гәзите сыға башлағандан алып, егерме йыл буйына беҙҙең иң фекерле, иң ҡыҙыҡлы яҙмаларыбыҙ авторҙары рәтендә. Һөнәре буйынса скульптор апайыбыҙҙың яҙыусылыҡ, журналислыҡ талантына һоҡланабыҙ, уның аҙна һайын тиерлек матур почерк менән ҡулдан яҙып ебәрелгән хаттарын "Апай тағы ниндәй фекер төйөндәрен тағатыр, ниндәй һығымталары менән аптыратыр икән?" тип түҙемһеҙләнеп асабыҙ. Фәүзиә Усманова яҙғандар журналист булырға йыйынған, үҙен ысынлап та ошо эшкә әҙерләгән йәштәргә бер дәреслек һымаҡ: фәһемле һүҙҙе ҡыҫҡа ғына итеп әйтеп тә, оло фекер төйнәтеп, донъяуи һығымталар яһатып була бит. Әйткәндәй, Фәүзиә апайҙың "Киске Өфө"лә баҫылған ошо аҡыллы кәлимәләрен дуҫтары китап итеп тә баҫтырып сығарғайны.**

АРХИВТАН: "ИР-АЗАМАТ"

# ИР ХОЛҠО - МИЛЛӘТ ХОЛҠО

Сит яҡта йөрөгәндә төрлө милләттең төрлө холоҡло ир-аттарын осратырға тура килә. Минә, мәҫәлән, ҡаҙаҡ һәм ҡырғыҙ ир-аттарының холҡо оҡшай. Һәр хәлдә, улар менән үҙебеҙҙең арала оҡшаш һыҙаттар күп. Ҡаҙаҡтарҙың беҙҙән айырылған яғы - улар уйлағанын бәреп әйтә. Беҙ кешенең күңелен ҡалдырмайбыҙ, тип, уйлағаныбыҙҙы тура әйтеп бармайбыҙ. Ҡаҙаҡтар араһында үҫкән башҡорт егеттәре лә уй йәшереп тормай. Үзбәктәр менән осрашырға тура килде, улар икенсерәк. Алтайҙар, хакастар, тывалар, яҡуттар, ҡарағалпаҡтар менән дә байтаҡ аралаштым. Уларҙа ла беҙгә оҡшаш һыҙаттар аҙ булһа ла осрай. Тибеттар, мәҫәлән, барыбыҙҙан да ныҡ айырылып тора. Беҙҙең өсөн мөһим булған аҡса, әйбер кеүек төшөнсәләр уларҙа һуңғы урында тора. Улар фәлсәфә менән йәшәй, ябайҙар, сабырҙар. Көньяҡ Америка халҡы, украиндар, чечендар, осетиндар менән дә аралаштым. Уларҙың да холҡо үҙҙәренсә.

Беҙҙең Йылайыр районы Юлдыбай ауылы халҡы ла кешегә тураһын әйтмәй, кинәйә менән һөйләргә ярата торғайны. Улар тыныс холоҡло, баҫалҡы. Йылайыр яғында шундай лаҡап та йөрөнө: "Ике Юлдыбай бабайы һөйләшеп ултыра икән, ти. Береһе: "Брежнев үлеп ҡалған икән", - тиген икән, икенсеһе: "Эйе, эсеңкерәне бит", - тип яуап биргән". Йәнәһе,"Эсте", тип ҡәтғи әйтмәй, "Эсеңкерәне", тип, йомшартып, Брежневтың күңелен уйлай булып сыға. Ғөмүмән, һөнәрем буйынса күп йөрөргә тура килә. Шуныһы, бер ауыл халҡының холҡо икенсеһенән бөтөнләй айырыла. Бер ырыу, бер зат кешеләре йәшәгән ауыл менән төрлө яҡтан йыйылған кешеләрҙән барлыҡҡа килгән ауылдар араһындағы айырма - ер менән күк араһы. Был йәһәттән беҙҙең Юлдыбай ҙа ныҡ үҙгәрҙе. Хәҙер ул ауыл шул тиклем ҙурайҙы, хатта көтөү йөрөргә урындары етмәй башланы. Билдәле, унда тәртипһеҙлектәрҙе ситтәгеләр алып килде. Иң аянослыһы шул: ситтән килеүселәр унда көн күреүсе төп халыҡтың борондан килгән йолаларын ҡыйратып ҡына ҡалмай, халыҡтың холҡон боҙа, эске йәшәү ҡанундарын ҡыйрата. Был йәһәттән һуңғы ваҡытта Башҡортостанға ситтәр күпләп күсеп килгәндә уйланаһы мәсьәләләр бихисап. Халыҡтың, милләттең холҡон ир холҡона ҡарап билдәләйҙәр икән, ауылдарыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу мәсьәләһе туранан-тура ир-ат тәрбиәһенә бәйле.

**Азат АЙЫТҠОЛОВ,**
**ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы.**

# АТАЙ ҒОРУРЛЫҒЫ - ИР БАЛАЛА

Көтөп алынған сабыйҙың донъяға килеүе һәр бер ғаилә өсөн иң иҫтәлекле һәм дә шатлыҡлы ваҡиғаларҙың береһелер ул. Малаймы, ҡыҙмы - берҙәй ҡыуаныслы. Ә беҙҙең башҡорт ирҙәре малайлы булһа, уғата ҡыуана, шатлығы эсенә һыймай, дуҫ-иштәре алдында маҡтанып та ебәрә. Ул үҫтерәсәк атай булып киткәс, ират үҙен мәртәбәлерәк итеп тоя шул. Малайҙар ысын ир булып үҫһен өсөн уларҙың тәбиғәтенә ярашлы тәрбиә биреү ҙә мотлаҡ. Ошо юҫыҡта, бигерәк тә йәш, тәжрибәһеҙ ғаиләләр ярҙамға мохтаж.

Билдәле педагог А.С. Макаренконың тәрбиә асылы тураһындағы мәҡәләләренең береһендә шундай диалог бирелгән:

- Баланы ҡасан тәрбиәләй башларға кәрәк?
- Балағыҙға нисә йәш һуң?
- Әле өс йәше генә тулды.
- Һеҙ балағыҙҙы тәрбиәләүҙә теүәл 3 йылға һуңға ҡалғанһығыҙ!

Малайҙарҙа буласаҡ ир-егеткә хас сифаттарҙы мөмкин тиклем иртәрәк тәрбиәләй башлау мөһим. Балалар үҙҙәренең малай йәиһә ҡыҙ затынан булыуын өс йәшкә тиклем үк айыра башлап, кешеләр араһында үҙ енесенә тәғәйен ролде ете-һигеҙ йәшкә тиклем аңлы рәүештә үҙләштерә ала. Тап ошо осорҙа "ысын малай", "ысын ҡыҙ" тәрбиәһенә ныҡлы нигеҙ һалына. Малайҙар аңына көслө, етеҙ, үҙ аллы, ныҡышмалы һәм ихтыярлы булыу, ауырлыуға түҙеү, сыҙамлылыҡ күрһәтеү, бер низән дә ҡурҡмау, биргән һүҙендә ныҡ тотоу һымаҡ төшөнсәләрҙе һеңдереп, ошо юҫыҡта уларҙың ғәмәлдә күҙәтелгән ҡылыҡтарын, тойғо-кисерештәрен баһалап, билдәле йүнәлеш биреп тороу фарыз. Иң ярамағаны - малайҙарҙың инициативаһын һәр осраҡта ла һүндерә килеп, рөхсәт итмәү, тыйыу алымдарын йыш ҡулланыуҙыр.

Үҫмерлек осоро еткәс, бигерәк тә малайҙарҙың организмы енси өлгөрөү стадияһына күсеү менән, уларҙың ир-егеттәргә оҡшарға тырышыуы яңы психологик сифатҡа әйләнә. Тап ошо осорҙа физкультура һәм спорт, техник һәм хеҙмәт тәрбиәһе аша үҫмерҙәрҙә ир-егеттәргә хас булған сифаттарҙы үҫтереү өсөн ыңғай шарттар барлыҡҡа килә. Шул уҡ ваҡытта үҫмерҙәрҙе ялған кумирҙар өлгөһөнән, ялған мәҙәниәт һәм тышҡы яҡтан ылыҡтырғыс стереотиптарҙан (тәмәке тартыу, һүгенеү, тупаҫ булып ҡыланыу һ.б.) ҡурсалау маҡсатында улар менән дуҫтарса, ололарса аңлашыу, уларҙы тиң күреп аралашыу ысулдарын табыу мөһим. Һәр малай ир-егетлек мәктәбе һабаҡтарын ваҡытында алған хәлдә генә башҡорт араһында лидерлыҡҡа ҡытлыҡ булмаҫ.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**



# ҮҘЕНӘ ЫШАНМАҒАН ХАЛЫҠҠА...

Атай тәрбиәһе тураһында һүҙ сыҡҡанда, борон-борондан йәшәп килгән традицион ғаилә моделен күҙ уңында тотам. Атай - мал табыусы, әсәй - ғаилә усағын һаҡлаусы. Иҫ киткес камил мөнәсәбәттәргә ҡоролған боронғо ғаилә институты, әлбиттә, бөгөнгө көндә һаҡланмаған. Бөтә нәмәне заманға ла һаплап булмай. Кеше бит мәңгелек ҡиммәттәр һағында тора белергә тейеш. Йәшәйештең нигеҙе булған ғаилә бөгөнгө көндә көсөргәнешле осор кисерә. Әсәй - әсәй урынында, атай - атай урынында түгел хәҙер. Йәштәрҙә бөгөн бер-береһе алдында яуаплылыҡ тойғоһо юҡ. Улар ҡорған ғаиләләре, тыуған балалары, ата-әсәләре, туғандары алдында яуаплы булырға бурыслы. Шунһыҙ, ғаиләнең нигеҙе ныҡ булмаясаҡ, ә киләсәге тураһында һөйләп тораһы ла түгел. Әсәй кешенең бурысы - бала табыу, уға күкрәк һөтөн биреү, хәүефле хәлдәрҙән ҡурсыу. Атай кешенең бурысы - балаға әйләнә-тирәләге тормош тураһында мәғлүмәт һәм дөрөҫ йүнәлеш биреү, матди яҡтан тәьмин итеү. Бигерәк тә бөгөнгө заман йәштәренә атай тәрбиәһе етешмәй. Хатта ғаиләлә атай кеше булһа ла, уның роле йыш ҡына формаль рәүештә үтәлә. Заман балаһын иһә аҡса идара иткән йәмғиәттә үҙенә урын табырға өйрәтергә кәрәк. Бөтә нәмә лә өйрәтеүҙән башлана бит. Атай-әсәйҙәр ошо тәрбиә ысулына - өйрәтеүгә ваҡыт бүлһен ине.

Халҡыбыҙға хас кире сифаттар тураһында һөйләгәндә инде... Беҙ һаман да бер нәмә өсөн бошмаған, иртәгәһен хәстәрләмәгән, донъя артынан ҡыумаған тәбиғәт балаһы булып ҡалыуҙы дауам итәбеҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был сифаттарыбыҙ заманға яраҡлашырға ныҡ ҡамасаулай. Етмәһә, әйләнә-тирәбеҙҙә беҙгә ҡапма-ҡаршы холоҡло кешеләр күбәйҙе. Улар ҡапҡан ризыҡтарыбыҙҙы ауыҙыбыҙҙан тартып алып китмәҫ, тимә. Тимәк, үҙ өлөшөндә бирмәҫ өсөн кисекмәҫтән үҙгәрергә кәрәк. Икенсенән, беҙ, башҡорттар, үҙебеҙҙең мөмкинлектәребеҙ менән тулыһынса файҙалана белмәйбеҙ. Ижади потенциалға бай, көслө рухлы икәнлегебеҙҙе оноторға ярамай. Беҙгә үҙ-үҙебеҙгә ышаныс тойғоһон күптән кире ҡайтарырға ваҡыт. Үҙенә ышанмаған халыҡҡа кем ышанһын?

**Сәләх ӘХМӘТОВ, пенсионер.**
**Бөрйән районы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Нисек итеп бәхәстә материалисты еңергә?

Бының өсөн бары тик биш принципты ғына иҫтә тотоу ҙа етә: мөхәббәт, аңлау, уйлап эш итеү, ихтыяж һәм килешеү.

Дәғүәсең менән бәхәсләшкәндә, уны нисек яратмаҡ кәрәк? Ҡарашы һеҙҙең ҡарашҡа ҡапма-ҡаршы булған кешене нисек аңларға? Дошман булған кешегеҙгә нисек яҡынларға? Теге йәки был сиккә килтереп ҡыҫҡанда, нисек итеп ғәҙел булып ҡалырға? Тәү ҡарашҡа был мәсьәләләр ҡапма-ҡаршы кеүек күренә, әммә рухи үҫешкән кеше өсөн түгел.

Алда һеҙ тышҡы ҡапма-ҡаршылыҡ кимәлендә метафизик эш менән таныштығыҙ, сөнки киңлек, ваҡыт һәм аралашыу тураһында физика ҡанундарын емерҙегеҙ. Һеҙ ошо ҡанундарҙан бейеккәрәк, менталь, икенсе ҡағиҙәләргә буйһонған, бик йыш физика ҡанундарына ҡаршы килгән кимәлгә күтәрелдегеҙ.

Бер миҫал ҡарайыҡ. Магниттың нимә икәнен яҡшы беләһегеҙ. Уның ике полюсы бар. Әгәр бер магниттың төньяҡ полюсын икенсе магниттың көньяҡ полюсына килтерһәк, улар бер-береһенә тартылыр. Икенсе яҡтан, бер төрлө полюстарҙы берләштерергә тырышһаҡ, улар бер-береһен ситкә этәрер. Тимәк, физик донъяла ҡапма-ҡаршылыҡтар тартыла, бер төрләләр бер-береһенән ситләшә.

Ә менталь планда хәлдәр нисек тора? Һеҙҙе үҙегеҙгә оҡшамаған кешеләр ылыҡтырамы? Әлбиттә, юҡ. Беҙ барыбыҙ ҙа үҙебеҙгә оҡшаған кешеләргә өҫтөнлөк бирәбеҙ. Ә ҡаршы енес вәкилдәренән (физик мәғәнәлә) беҙҙең ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙҙы һәм инаныуҙарыбыҙҙы бүлешкән кешене (менталь кимәл) һайлайбыҙ.

Шулай итеп, бер аҙға ғына физик планды онотоп, юғарыраҡ, рухи кимәлдәге бәхәстә енеп сығыу, йәғни үҙегеҙҙән алыҫ торған кешене инандырыу, уға тормошҡа һеҙҙең күҙлектән бағырға ярҙам итеү өсөн биш принципты ҡулланып ҡарайыҡ.

**Менталь кимәлдәге эш ҡағиҙәләре:**

**Мөхәббәт.** Тышҡы ҡиәфәт буйынса айырмалыҡтар булһа ла, беҙ барыбыҙ ҙа кеше. Үҙенсәлегебеҙгә ҡарамаҫтан, беҙ кешелектең бер өлөшө: әгәр беребеҙ донъяны бысратһа, башҡалар ҙа зыян күрә; берәү башҡаларға ярҙам итә икән, тирә-яҡтағыларҙың да күңеле күтәрелә Айырмалыҡтар тураһында онотоп, берлегебеҙ тураһында уйлағыҙ. Быны хәҙер үк эшләһәгеҙ, бер нисә секунд дауамында йылы тулҡын килеүен тойорһоғоҙ.

**Аңлау.** Һеҙ тәрбиә, шәхси тәжрибә, тышҡы донъя сигналдары һөҙөмтәһендә бөгөнгө кимәлгә еткәнһегеҙ. Һеҙҙең ҡаршыла ултырыусы ла уны нисек тәрбиәләгәндәр һәм уҡытҡандар - шуның һөҙөмтәһендә шундай кимәлгә еткән. Уның шәхси тәжрибәһе һеҙҙекенән ныҡ айырыла. Әгәр һеҙ үҙ-үҙегеҙ булып ҡалырға хаҡлы икән, ни өсөн ул был хоҡуҡтан мәхрүм булырға тейеш? Уны аңларға, йәғни уның үҙ-үҙе булырға хоҡуғы барлығын аңларға тырышығыҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 7 НОЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Художник".
22.20, 0.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.00 Д/ф "Освобождение". [16+]
2.15, 3.15 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
4.20 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Сируси" (на баш. яз). [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 0.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.30, 16.30, 17.30, 20.15, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 23.30, 1.15 Новости (на баш. яз).**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 БашГост. [12+]**
**17.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**17.45 Пофутболим? [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00, 0.15 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.50 Хоккей. "Куньлунь Ред Стар" (Пекин) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**1.45 Спектакль "Вознесись мой, Тулпар!". [12+]**
**4.00, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**
**4.45 История одного села. [12+]**
**5.00 "Ете егет". [12+]**

## 8 НОЯБРЯ
## ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Художник".
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Сируси" (на баш. яз). [12+]**
**11.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]**
**12.00, 16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**17.00 "100 имен Башкортостана".**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 "Елкән". [6+]**
**19.00, 20.30, 23.15, 0.45 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**1.45 Спектакль "Молодые сердца". [12+]**
**3.45, 4.45 История одного села. [12+]**
**4.00, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**
**5.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**

## 9 НОЯБРЯ
## СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Художник".
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Сируси" (на баш. яз). [12+]**
**11.00, 5.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 История одного села. [12+]**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**15.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00 Тайм-аут. [16+]**
**17.00 "Это моя профессия". [12+]**
**17.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00, 20.30, 23.15, 0.45 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**1.45 Спектакль "Таланты и поклонники". [12+]**
**4.00, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**
**4.45 Тормош. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 10 НОЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Художник".
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Автограф. [12+]**
**10.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.00, 22.00, 5.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**15.00 "Сулпылар". [0+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 История одного села. [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00, 20.30, 23.15, 0.45 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**1.45 Спектакль "Вой волчицы". [12+]**
**4.00, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**
**4.45 "Дорога к храму". [0+]**

## 11 НОЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
0.20 Улыбка на ночь. [16+]
1.25 Х/ф "Никто кроме нас". [12+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**10.30 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**11.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 4.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.45 Патриот РФ. [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 18.00 "Йома". [0+]**
**14.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**15.00 "Городок АЮЯ". [6+]**
**15.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 История признания. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.00 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омск). КХЛ.**
**22.00 Финликбез. [12+]**
**23.00, 3.45 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Колесо времени. [12+]**
**1.15 "Земляки". [12+]**
**3.15 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 12 НОЯБРЯ
## СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Т/с "Тайны следствия-21". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Светлана". [12+]
0.40 Х/ф "Опавшие листья". [12+]
4.00 Х/ф "Домоправитель". [12+]
5.29 Перерыв в вещании.
23.15 "Башкорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45, 4.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.15 "Это моя профессия". [12+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Гора новостей". [6+]**
**10.15 "Дети-детям". [6+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.15 Д/ф "Рождение истории". [12+]**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45, 6.15 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 0.00, 3.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башкорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.45 "Башкорт йыры-2021". [12+]**
**1.30 Спектакль "Жанна, завтра будет новый день". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 13 НОЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.30, 2.30 Х/ф "Оазис любви". [16+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 16.00 Вести.
11.50 Х/ф "Найди нас, мама!" [12+]
17.00, 19.00 Песни от всей души. [12+]
18.00 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
4.15 Перерыв в вещании.
20.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.15 Д/ф "Рождение истории". [12+]**
**8.30 Новости (на баш. яз).**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 "Йома". [0+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Преград. Net. [6+]**
**10.15 "Книга сказок". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45, 3.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 "Дорога к храму". [0+]**
**15.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Барыс" (Астана). КХЛ.**
**18.30, 1.45 Д/ф "Конная гвардия: умирает, но не сдается..." [12+]**
**19.15 Автограф. [12+]**
**20.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**20.30, 3.00, 5.00 История одного села. [12+]**
**20.45 Дознание. [16+]**
**21.00, 22.30, 4.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 Спектакль "Последние". [12+]**
**1.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**2.30 Историческая среда. [12+]**
**4.00 "Это моя профессия". [12+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**8 ноябрь "Балам"** (В. Емелева), спектакль-терапия. 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**9 ноябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 11.00 0+
**11 ноябрь "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон), трагикомедия. 16+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**8 ноябрь "Песочная фантазия".** 6+
**11 ноябрь "Сокровища кельтов".** 6+
**12 ноябрь "В ожидании чуда"** буласаҡ әсәйҙәр өсөн концерт. 13.00 0+
**13 ноябрь "Легенды барокко: Бах и Вивальди".** 18.00 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**8 ноябрь "Отвага! Честь и слава!"** музыкаль-әҙәби лекторий. 18.00 6+
**13 ноябрь "Аленушкины сказки"** Рус халыҡ инструменттары оркестры концерты. 12.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**7 ноябрь Премьера! "Ынйыҡай менән Юлдыҡай"** (Х. Ғәбитов, Г. Саламатова инсц.), шиғри драма. 14.00 12+
**12 ноябрь "Море. Остров. Клад"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар тарихы. 13.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Ноябрь (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (12) дүшәмбе | 7:02 | 8:32 | 13:30 | 15:36 | 17:25 | 18:55 |
| 8 (13) шишәмбе | 7:04 | 8:34 | 13:30 | 15:35 | 17:24 | 18:54 |
| 9 (14) шаршамбы | 7:06 | 8:36 | 13:30 | 15:33 | 17:22 | 18:52 |
| 10 (15) кесе йома | 7:08 | 8:38 | 13:30 | 15:31 | 17:20 | 18:50 |
| 11 (16) йома | 7:10 | 8:40 | 13:30 | 15:30 | 17:18 | 18:48 |
| 12 (17) шәмбе | 7:12 | 8:42 | 13:30 | 15:28 | 17:16 | 18:46 |
| 13 (18) йәкшәмбе | 7:14 | 8:44 | 13:30 | 15:26 | 17:15 | 18:45 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

АРХИВТАН: "АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО"

# ӘБЙӘЛИЛ МӘҘӘКТӘРЕ

*(2006 йыл, №42)*

## "Һаумы гәзиттәш!"

Районның "Осҡон" гәзитендә "ГАИ мөйөшө" исемле рубрика баҫылғаны әбйәлилдәрҙең иҫендәлер әле. Унда иҫерек килеш транспорт йөрөтөп тотолған шоферҙарҙың исемлеге баҫыла торғайны. Колхозда баш белгес булып эшләп йөрөгән яҡташым гәзиттә үҙенең водителенең исемен күргәс, "Бөтөн районға исем һатып йөрөйһөң, кемдең шоферы - шуның шоферы тиерҙәр, миңә алкаш машина йөрөтөүсе кәрәкмәй", тип, уны эшенән бушата.

"Донъя - ҡуласа", тигәндәй, ике ай ҙа үтмәй ҡала, баш белгестең дә исем-фамилияһы "ГАИ мөйөшө"ндә ташҡа баҫыла. Юғары белемле, дәрәжәле кешенең битен йыртып, тураһын әйтергә ҡыймаған яҡташым хәҙер элекке хужаһын күргән һайын үҙенә әйтелгән һүҙгә оҡшаш итеп:

- Һаумы, гәзиттәш! - тип сәләмләй.

**Илдар ИСЛАМОВ.**

## Намаҙымды боҙҙоң...

Илленсе йылдар аҙағында Хәлил ауыл Советына радио үткәрәләр. Бер ғаилә радиоалғысты һындерергә онотоп, клубҡа концерт ҡарарға китә, ә өйҙә яңғыҙ әбей ҡала. Радио һөйләй ҙә һөйләй, ти. Әбей, штепселде һурып алып, ауыҙын розеткаға терәй ҙә: "Теңкәмә генә тейҙең бит, намаҙымды боҙоп бөттөң. Етер, лыҡылдама", - тип әрләп-әрләп, теге штепселде кире тығып ҡуя икән. Радио йәнә һөйләй ҙә китә, ти. Ул шулай балалары ҡайтҡансы ыҙаланған.

**Зөһрә ХАНСОЛТАНОВА.**

## Телде оноҭҡан, имеш...

Элегерәк беҙҙең ауылдан бер егет армияла хеҙмәт итеп ҡайта. Әсәһе улына ни алып, ни һалып бирергә белмәй, өйөрөлөп-сөйөрөлөп йөрөп һыйлай икән: "Кана, улым, аша. Әрмелә ниндәй тәмле ризыҡ булһын. Өй ашы танһыҡтыр". Ә тегеһе, йәнәһе, туған телен оноҭҡан: "Бер ни аңламаус, әсәүес-атауыс, ҡоймаҡауыс, ашауыс", - тип тик ултыра икән. Атаһының йәне көйөп киткән дә: "Коймаҡауыс ашауыс килһәүес, тышҡа сығауыс та утынды ярауыс, тиҙәкте түгәүес", - тип екергән, ти.

**Әнүзә САФИНА.**

## Украинса аңламағас ни...

Етмеш бишенсе ҡороллоҡ йылында күп кешеләрҙе Украинаға һалам бәйләргә ебәрҙеләр. Беҙҙең колхоздан барған бер ағай ашханала сиратҡа баҫа. Украин ҡатыны: "Скильки вам?" - тип һорай ("сколько" тигән һүҙе инде). Ағайыбыҙ: "Нет" - ти. Ашнаҡсы аптырап: "Скильки вам, ховорю?" - тип ҡабатлай. "Нет, без кильки", - ти икән был. Сираттағылар шаулаша башлағас, ҡатын асыулана һәм: "Ну, скильки вам?" - тип аҡыра. Шунан яҡташыбыҙ: "Ладно, давай с килькой", - тигән ти.

**Мөнирә КИРӘЕВА.**

## Мунсаның эсен күрһәт!

Ауылда киномеханик булып йөрөйөм. "Дом и хозяин" тигән фильм бара. Шундай бер эпизод: алыҫта кәсептә йөрөп ҡайтҡан ир мунсаға инә. Уныһы йылға ярында урынлашҡан. Бер ваҡыт хужа, мунса ишеген ҡыҫып, ҡатынына: "Һалҡын һыу килтер", - тип ҡысҡыра. Йылғанан һыу алып, иренә тоттороуы була, тегеһе биҙрәһе-ние менән бисәне эскә һөйрәп алып инеп китә. Һәм шунда кадр үҙгәрә. Шул саҡ ауылдашым Хаммат ағай будканы емерә яҙып дөбөрләтә башламаһынмы: "Иршат, ну-ка, мунсаның эсен күрһәт әле!"

**Иршат ИХСАНОВ.**

## Исеме Пират уның...

Ураҙа мәлендә апайым кискелеккә ҡунаҡҡа саҡырырға сығып китә. Берәүҙәрҙең эте үҙенең исеме менән өндәшкән кешене генә өйгә үткәрә икән. Апайым ҡапҡа алдына еткәс, эткә "Бандит" тип өндәшә. Теге өрә генә. "Партизан" тип әйтә - файҙа юҡ. "Дезертир" тигән ҡушамат эттең тамам йәнен көйҙөрә. Алабайҙың тауышына хужабикә үҙе килеп сыға: "Исемен яңылыш әйтәм шикелле, индермәй. Хулиганмы әле ул?" - тип һорай апайым. Хужабикә: "Юҡ, Пират!" - тигәс кенә эт өрөүҙән туктай.

**Фәрзәнә ЮЛМӨХӘМӘТОВА.**

## Бутаған

Аскарҙағы үҙәк дауаханала УЗИ кабинеты бәҙрәф менән йәнәш урынлашҡан. УЗИ үтергә килгән бер әбей ишектәрҙе бутап баҫҡан да, эргәһенән үтеп барған шәфҡәт туташынан: "Бында ҡағыҙымды бер юлы тотоп инәйемме, әллә аҙаҡмы?" - тип һорай икән.

**Резеда МӘСӘЛИМОВА.**

# БАЙМАҠ МӘҘӘКТӘРЕ

*(2007 йыл, №13)*

## Үлер ине...

Ҡыҙмаса булып алған егеттәр нимәгәлер килешә алмай, һуғышып китәләр. Кемдер Хажиәхмәттең башына балта менән тондора. Ул башын тотоп ҡайтып ингәс, әсәһе:

- Уй, балаҡайымдың башына алай ҙа балта төйҙәһе менән генә һуҡҡандар. Йөҙө менән һуҡһалар, үлер ҙә ҡуйыр ине бит, - тип тынысланып ҡуйған.

## Урамдары тап-таҙа

Ғәбиҙә инәй Мәскәүгә беренсе ауыл хужалығы күргәҙмәһенә барып ҡайтҡас, ауыл халҡына Мәскәү тураһында иҫе китеп һөйләй икән. "Мәскәүҙә иң матур урын Ҡыҙыл Майҙан, унда Кремль тора, Мавзолей, уның тирәһендә нәҡ беҙҙең Бурһаҡ ташы кеүек үҫкән бабайҙар тора. Тик Маркстар ғына танымым, башҡаларының кемлеген белә алманым. Шуныһы шәп: Мәскәү урамдары тап-таҙа инде хатта, бер генә бөртөк кәзә кәнфите лә күренмәй", - тип һөйләй икән.

## Йәйәү йөрөйәсәкһең

Бер көн иртәлә Зәйнетдин ағай кис тышап ҡалдырған атын алырға тип Тоҡан һаҙына барһа, уныһын бүре ашап киткән була. Бер ҙә бошонмаған ағай: "Эй, бүре, бүре, минең атты ашау менән ней ҡылдың инде, үҙеңә насар эшләнең бит. Мин янынан ат алырмын, ул, ә бына һин ғүмер буйы йәйәү йөрөйәсәкһең бит", - тип үҙ алдына һөйләнеп ҡуйған.

## Һынып торғандыр

Яңы ғына һуғыштан ҡайтҡан Закир ағайҙы Мәфтүхә апай һыйыр йығышырға саҡыра. Һыйырҙың аяҡтарын салып элеп тарткан ыңғайы уныһы Закир ағайҙың аяғына йығыла.

- Эй, килен, аяҡ ынды шикелле, - ти ул.

Аяғын мал аҫтынан һөйрәп сығарып, итеген систереп, силғауын тағатып ҡараһалар, ысынлап та, уның аяғы сурт һынған була.

- Уй, ҡайнаға, ул аяғың элек һуғышта һынып торғандыр ул, яңы ғына һынмаҫ, - тигән Мәфтүхә апай уның аяғын күреп.

## Урыҫсам бөттө

Хәйҙәр армиянан башҡортса һөйләшергә онотоп ҡайтҡан. Әсәһе урыҫса белмәгәс, Сания апайға йүгереп бара ла етә икән. Уныһы үҙе белгәненсә улының һүҙҙәрен тәржемә иткән. Бер нисә көн шулай дауам иткәс: "Хватит, Хәйҙәр, минең дә урыҫсам бөттө, дауай, башҡортса һөйләшәйек тә ҡуяйыҡ", - тигән ти аптырағас.

## Аяғымдан башлаһындар

Таһира инәй Түбә баҙарынан ҡайтып килгәндә Ирәндек башындағы аҡланда бүреләргә тап була. "Ярар, Аллаға тапшырам, был ас бүреләрҙән ҡотолоп булмаҫ, ошонда ғына ятайым да, доғаларымды уҡый торайым. Ашаһалар, аяғымдан башлаһындар, башым доға уҡырға кәрәк, ясин сыға торайым", - тип башын яулығы менән урай ҙа, ҡиблаға ҡарап, сәждәгә киткән һымаҡ ята.

Бер аҙ ваҡыт үткәс ҡараһа, бүреләрҙән елдәр иҫкән була.

Шулай итеп, бер үлемдән ҡотола ул. Аҙаҡ: "Алай ҙа аяғымдан ашай башлаһындар, тип әйткәнмен, былайһа...",- тип тә һөйләп йөрөгән, имеш, Таһира инәй.

**Миҙхәт БАЙРАМҒОЛОВ.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



# ФЕСТИВАЛДӘН...

**Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры ҡайнап йәшәй. Был әүҙемлек театрға иғтибарлы тамашасының зауығына, ихтыяжына тап килеү маҡсаты менән генә үлсәнмәй. Тамашасының зауығына һәм йәшәйешебеҙ йүнәлештәренә тап килерлек маҡсатлы эш алып барыуы менән йәшәп итә театр. Мәғәнәле әҫәр, оҫта белгестәр һәм сәхнәнең булыуы - тәү шарт. Әммә бер урында, бер генә ерлектә тапаныу киңлектәр өсөн мөмкинлектәр асмай. Аралашыу, хәл белешеү, үҙеңә ситтән ҡарау - ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Форсаты ла сығып тора: быйыл Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрына өс фестивалдә ҡатнашыу бәхете тейҙе.**

Сентябрҙә, театрҙың 33-сө ижад миҙгеле асылыу менән, театрҙың рус труппаһы сағырыу буйынса Владикавказ ҡалаһына "Театр көҙө" Рәсәй Милли театрҙар фестивален дә барып, А.С. Пушкин әҫәре буйынса ҡуйылған "Капитан ҡыҙы" (режиссеры - Искәндәр Сакаев) спектакле менән сығыш яһап ҡайтты. Фестивалдең ойоштороусылары - Рәсәй Мәҙәниәт министрлығы ярҙамы менән "Балтик йорто" (Санкт-Петербург ҡалаһы) театр-фестивале. Быйыл фестиваль афишаһын Башҡортостан, Сыуашстан, Дағстан, Ҡалмыҡстан, Марий Эл, Татарстан, Төньяҡ Осетия һәм Мордовия театрҙары тулыландырҙы.

25 сентябрҙә театрҙың Л.Пантелеев һәм Г.Белых әҫәре буйынса "Республика ШКИД" спектакле (режиссеры - Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Мөсәлим Ҡолбаев) Мордовия Республикаһында "ХудСовет" региондара йәштәр театрҙары фестивалендә ҡатнашты. Фестивалгә ебәрелгән 60 видеояҙманың 12-һе һайлап алынған. Ҡатнашыусыларҙың географияһы төрлө - Мәскәү, Санкт-Петербург, Элиста, Мичуринск, Өфө, Таганрог, Донецк. Быйыл беренсе тапҡыр үткәрелгән был фестиваль Мордовия Республикаһы театр эшмәкәрҙәре Союзы тарафынан мәҙәни башланғыстар, Президент фонды ярҙамында ойошторолдо. Рәсәй театрҙарының йәштәр көсө менән булдырылған сағыу һәм аутентик постановкаларын берләштергән фестиваль бик ихлас һәм йылы сараға әйләнде. Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры спектаклен тамашасы бик оҡшатты, актерҙарҙы сәхнәнән оҙаҡ ҡына ебәрмәй, аяғүрә баҫып алҡышланы.

Октябрҙә - Марий Эл республикаһында уҙған "Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн заманса пьеса" тип исемләнгән Йәш тамашасы театрҙары фестиваленә Милли йәштәр театры Л.Соловьевтың "Хужа Насретдин мажаралары" спектаклен (режиссеры - Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Мөсәлим Ҡолбаев) тәҡдим итте һәм ҡатнашыуға саҡырыу алды. Ойоштороусылар беҙҙең театрҙың күнелле, дәртле спектаклен һәм актерҙарҙың иҫ киткес итеп уйнауын билдәләне. Был фестивалдән театр бик күп наградалар менән ҡайтты: "Хужа Насретдин мажаралары" спектакленең ҡуйыусы рәссамы Геннадий Скоморохов - "Иң яҡшы спектакль"; "Иң яҡшы костюмдар"; Хужа Насретдин роле өсөн Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рәмзил Сәлмәнов - "Иң яҡшы ир-егет роле"; Отун биби роле өсөн Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Аида Ҡолбаева - "Икенсе пландағы иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле"; Ишәк роле өсөн Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Ренат Фәтхиев "Иң яҡшы эпизодик роль" номинацияларында бүләкләнеүгә лайыҡ булды.

Сәнғәтте аңлаған, хатта тамаша барышында ысынбарлыҡ менән иҫәпте өҙөп торорға ризалашҡан халыҡ йыйыла фестиваль спектаклдәрен ҡарарға. Улар бер ҙә тамашаға мохтажлыҡ кисермәй, ә шулай ҙа ситтән килгән таныш булмаған театр сығышына һыуһап, тыны менән тартып алырҙай ҡабул итә алыуҙары таң ҡалдыра. Ошондай фестиваль, бәйгеләрҙә ҡатнашыу мөмкинлектәре - театр эшмәкәрҙәре, коллективтары өсөн мәртәбә, үҙенде һынап ҡарау, аралашыу ғына түгел, ә үҙ хаталарыңды, етешһеҙлектәреңде лә аңлау өсөн майҙансыҡ булып тороуы менән әһәмиәтле.

**Рәзилә ЫРЫҪҠУЖИНА,**
**театрҙың әҙәбиәт бүлеге етәксеһе.**

АФАРИН!

# ЭПОС ҺЫНЛЫ ЭПОСТЫ...

## яттан һөйләй балалар



(Башы 1-се биттә).

Күптән килгән йолаға ярашлы, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр өс йәш арауығына бүлеп баһаланды һәм 1-5 синыф уҡыусылары 600-ҙән ашыу юл, 5-7 синыфтар - 1100-ҙән ашыу, 8-11 синыфтар 3000-дән ашыу юл ятларға тейеш булды. Был йәһәттән яңғыҙ сығыш яһаған 42 ҡатнашыусы юғары сәсәнлек һәм артислыҡ оҫталығы күрһәтеп, көс һынашты. Эпосты яңғыҙ һөйләүселәр араһында призлы урындарға Баймаҡ, Мәсетле, Бөрйән, Белорет, Йылайыр районДАРЫ, Өфө һәм Сибай ҡалалары уҡыусылары лайыҡ булды, төрлө номинацияларҙа еңеүселәр ҙә билдәләнде. Шулай ҙа улар араһынан Ишембай районындағы Ә.З. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының 11 синыф уҡыусыһы Ғәлиә Шәриповаға етеүсе булманы. Ҡыҙ ҡобайырҙы тулыһынса ятҡа белеүе менән генә түгел, шартына килтереп оҫта бәйән итеүе, кәрәк урында думбыра сиртеп, дөңгөр ҡағып та ебәреүе менән алдырҙы. Уға Башҡортостан Мәғариф министрлығының дипломы, аҡсалата бүләк тапшырылды.

- Эпосты мин 5-се синыфта уҡығанда ятлай башлағайным, 6-сының аҙағына тулыһынса ятлап бөттөм. Был республика кимәлендәге конкурста дүртенсе тапҡыр сығыш яһауым, 2018 йылдан беренсе урын яулап килдем. Ниһайәт, быйыл еңеүсе дәрәжәһен алыуға өлгәштем. Башланғыс синыфтарҙа уҡығанда уҡ "Урал батыр" эпосын ятлау теләге бар ине, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусым Фаягөл Әмирханова тәҡдим иткәс тә ризалаштым. Башлап ҡына китеүе ауырыраҡ, сөнки барыһын да тиҙерәк отоп алғы, хәтерҙә ҡалдырғы килә. Ә һуңынан инде онотолоп китмәһен өсөн ваҡыты-ваҡыты менән ҡабатлап ҡына торорға кәрәк, - ти Ғәлиә.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләгән дәүерҙә бик күп балаларға халҡыбыҙҙың тәрән фәлсәфәһе йәшеренгән донъя ишектәрен асыусы, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләргә өйрәтеүсе педагог Фаягөл Әмирханова иһә, уҡыусыһы менән ғорурланыуын һис йәшермәй: "Ғәлиә 6-сы синыфта район кимәлендәге ярышҡа 1500 юл белеп барғайны, июндә уҙғарыла торған республика кимәлендәгеһенә ай ярым эсендә тулыһынса ятлап ҡуйҙы. Йыл да тиерлек ҡатнашып, гел беренсе урын яулап килде. Ғәлиә - белемле, тәртипле, әҙәпле, маҡсатлы һәм тырыш ҡыҙ. Үткән уҡыу йылында ул шулай уҡ башҡорт теле буйынса төбәк-ара олимпиадала ла еңеүсе булды. Хәҙер "Урал батыр" эпосын башҡарыусылар конкурсында Гран-при яулаған уҡыусыларым дүртәү булды: 2013 йылда Ислам Төхвәтуллин, 2016 йылда Гөлфрүз Хисмәтуллина, 2018 йылда Гөлсәсәк Шәрипова юғары баһаға өлгәшкәйнеләр. Шуны билдәләп үтергә кәрәк: еңеүселәр әҙерләһәм дә, үҙем был эпос юлдарын тулыһынса яттан белмәйем. Быға өлгәшә алырҙай һәләтле балаларҙы ынйы бөртөгөләй күрәм. Әле өлкән ағай-апайҙарына алмашҡа Яҙгөл Хәйруллина исемле бик шәп ҡыҙ үҫеп килә, ул эпостың 500 юлын яттан белә лә инде. Тағы ла Зәлиә исемле бер уҡыусым үткән аҙнала ғына бик теләп китапты ҡулына алды. Ҡыҙғанысҡа күрә, егеттәр араһынан диҡҡәт биреп, үҙенә быңдай маҡсат ҡуйыусылар әлегә юҡ", - тине Фаягөл Тимербай ҡыҙы.

Конкурста уҡыусылар "Урал батыр"-ҙан тыш, башҡорт халҡының башҡа эпостарын сәхнәләштереү буйынса ла ярышты. Фольклор коллективтары араһында Бөрйән районы Яңы Мөсәт филиалының Нәфисә Әхмәтова һәм Эльвира Ҡаһарманова етәкселегендәге уҡыусылар беренсе урынға лайыҡ булды. Икенсе урынды Учалының Башҡорт гимназияһы (етәксеһе Гөлдәр Хәкимова) менән Белорет районы Я. Хамматов исемендәге Башҡорт гимназияһы (етәксеһе Сәриә Ҡаһарманова) коллективтары яуланы. Ә бына өсөнсө урын Борай районы Яңы Таҙлар ауылы мәктәбенең Раушания Әхәтова етәкселегендәге, Т. Йосопов исемендәге Республика лицей-интернатының Гүзәлиә Баева һәм Әлфирә Нуриева етәкселегендәге һәм Сибай гимназия-интернатының Әлнисә Кәримова етәкселегендәге фольклор коллективтарына бирелде. Әйткәндәй, сәхнәләштереүселәр араһында "Иң яҡшы ир-егет образы" номинацияһында Белорет районы Я. Хамматов исемендәге Башҡорт гимназияһының 9-сы синыф уҡыусыһы Ильяс Шаһиязданов, ә "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ образы" номинацияһында Борай районы Яңы Таҙлар ауылы мәктәбенең 8-се синыф уҡыусыһы Эльза Шәймәрҙәнова билдәләнде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәш быуындың күңелендә башҡорт халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһыныу, хатта мауығып өйрәнеү теләге уятҡан был конкурс киләһе йыл 25 йыллыҡ тарихи һыҙатына аяҡ баҫасаҡ. Әйтеүе генә еңел, әммә 25 йыл - кеше өсөн дә әҙ ғүмер түгел, был бишектәге бала бишкә төрләнеп үҫеп буй еткереп, хатта үҙ ғаиләһенә нигеҙ һалырлыҡ арауыҡ. Тимәк, "Урал батыр" эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәрҙең республика конкурсы бер быуын балаларға кешелек, яҡшылыҡ, илһөйәрлек төшөнсәләрен туплаған орлоҡтарҙан йөрәктәренә ғәм һалып өлгөргән. Киләсәктә лә был күркәм һәм кәрәкле ярыш матур йола булып дауам итһен генә.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ҠЫҘ КҮҘЛӘГӘН ЕГЕТ ҺЫМАҠ



**"Киске Өфө" сыға башлағас, тәүҙә уны киоскынан һатып алып уҡып, ҡойма ярығынан ҡыҙ күҙләгән егет һымаҡ ситтән тороп күҙәттем. "Артабан былар тағы нимә яҙған булырҙар икән?" тигән һымаҡ эш иттем.**

Шул рәүешле ике йыл ваҡыт үтеп китте, ә гәзит һаман һәйбәтләнә. Унда осраҡлы ғына бер мәҡәлә лә баҫылмай, барыһында ла ниндәйҙер мөһим проблема күтәрелә. Яңы баҫма һынауымды яҡшы үтте. Шунан һуң ғына мәһәрен түләп өйләнгән егет һымаҡ, гәзитте яҙҙырып уҡый башланым.

Бөгөн гәзиттең сыға башлауына 20 йыл да үтеп киткән. Минең гәзит булып сыҡты ул. Хәҙер даими яҙылам. Льготалы яҙылыу мөҙҙәтен көтөп тормайынса, алдан уҡ яҙылып ҡуям. Килгән бер һанын уҡып барам. Теге йәки был сәбәп менән яҙыла алмаған туғандарыма, күршеләремә уҡытам. Ҡайһы ваҡыт гәзит әллә нисәмә кешенең ҡулы һәм күҙе аша үтеп, миңә таушалып бөткәс кенә килеп элэгә. Унда күтәрелгән көнүҙәк проблемаларға битараф түгелмен, шуға ла ҡайһы ваҡыт эстән генә урыҫсанан алып әрмәнсәгә тиклем һүгенеп тә алам. Их, ул проблемаларҙы "Киске Өфө" генә хәл итә алһа ине лә бит! Уларҙы шәйләп алып, күтәреп, йәмәғәтселек иғтибарына сығарғаны өсөн дә рәхмәт гәзиткә.

**Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ.**
**Баймаҡ районы Икенсе Әтҡол ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕР ҺЫНАҒАН ЯМАНДЫ...

## ҡайта-ҡайта һынама

Дуҫың күбәйһә, белеп ҡуй: аранан берәүһе дошмандыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Балаһы өйҙә саҡта әсәнең елкәһе ауырта, балаһы урамда саҡта унын йөрәге ауырта.

**(Ралф Эмерсон).**

Ҡыҙыҡ бит: һәр быуын һайын балалар насарая, ата-әсәләре яҡшыра бара. Бынан шундай һығымта яһарға мөмкин: тимәк, насар балаларҙан яҡшы ата-әсәләр барлыҡҡа килә.

**(Веслав Брудзиньский).**

Ғүмерҙең тәүге яртыһын - ата-әсәләр, икенсе яртыһын балалар ағыулай.

**(Кларес Дарроу).**

Ата-әсәләр шул тиклем ябай ҡоролмаға оҡшаш, улар менән хатта балалар ҙа идара итә ала.

**(Питер Устинов).**

Ата-әсәләрҙең алама ҡылыҡтарын үҙгәртеп өлгөрә алмайбыҙ шул, сөнки беҙ ошоно эшләр йәшкә еткәндә улар ҡартайған була.

**(Миньон Маклофлин).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Йәшәгән, ти, ике аҡыл эйәһе. Берәүһе йыш ҡына яңылыша торған булған, ләкин башҡалар уның ысынлап та бөйөк кеше икәненә ысын күңелдән ышанған. Икенсеһе ысынлап та юғары белем эйәһе булған, әлбиттә, уға ышаныусылар ҙа аҙ булмаған.**

**Бер ваҡыт ике аҡыл эйәһе лә үҙ уҡыусылары менән бергә тәбиғәт ҡазаһына осрай һәм улар йәндәрен тамуҡҡа һәм охмахҡа ебәреүсе, хөкөм итеүсе ике фәрештә алдына барып баҫа. Фәрештәләр һәр береһенән һорау ала һәм шулай тип ҡарар итә: беренсе аҡыл эйәһе һәм уға ышаныусы уҡыусылары - тамуҡҡа, икенсе аҡыл эйәһе һәм уның уҡыусылары ожмахҡа китә.**

**Барыһы ла аптырашҡа ҡалған. "Ни өсөн улай?" тигән һорауға фәрештәләр шулай тип яуап биргән: "Ике аҡыл эйәһе һәм уларҙың уҡыусылары ла нимәгәлер ышана. Ләкин беренсе аҡыл эйәһе ниндәйҙер юғары көскә ышанам, тип уйлай, ләкин бары тик үҙенә генә ышана, ә уның артынан барыусылар Хәҡиҡәткә түгел, тимәк, уҡытыусыларына табына. Икенсе аҡыл эйәһе тик Хәҡиҡәткә ышана. Уның уҡыусылары ла Хәҡиҡәт эҙләүселәр, кешегә табыныусылар түгел. Үлемдән һуң йәшәү - ул Хәҡиҡәтте табыу. Уның ҡанундары кешеләр тарафынан уйлап сығарылһа, тарих бөтөнләй икенсе булыр ине. Шуға күрә беҙҙең ҡарарҙы башҡасаға үҙгәртеп булмай".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 22044

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
3 ноябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3540
Заказ - 1396

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.